ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 ғинуар - февраль (ныуығай - шаҡай) 2024

№3 (1096)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кәфенден кеҫәһе юҡ...**



6

**Яҡшыны ямандан айырһындар,**

күңел йылыһын ситтән эҙләмәһендәр



8-9

**Ғәзиз балаң...**

ике ут араһында ҡалмаһын



10

**Аждаһаны кем күргән?**



12-13

*Власть - ғорурҙарҙы һәм ярһыуҙарҙы, байлыҡ ҡыйыуһыҙҙарҙы һәм баҫалҡыларҙы ылыҡтыра; бына ни өсөн йәшлек власҡа ынтыла, ә ҡартлыҡ иһә байлыҡ алдында ялағайлана.*

*(Сэмюэл Джонсон).*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Президент Владимир Путин педагогтар алдына мәғариф өлкәһендә традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытыу буйынса ҙур бурыстар ҡуйҙы. Ошо йәһәттән уҡытыу һәм тәрбиә эшен нисек итеп ҡуҙаллайһығыҙ?



***Ләйсән САФИУЛЛИНА, 2-се "СМАРТ" полилингваль күп профилле гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, БР мәғариф алдынғыһы:*** Бөгөнгө көндә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төп миссияһы балаларға белем биреү менән генә сикләнмәй, бәлки, беренсе сиратта улар күңеленә рух, милли ғорурлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек тойғолары һалыу мөһимерәк бурыс булып тора. Ә инде балала туған теленә, иленә ихтирам тәрбиәләнә икән, ул, әлбиттә, үҙенән-үҙе күберәк белергә, әсә телендә аралашырға ынтыласаҡ. Беҙҙең 2-се "СМАРТ" гимназияһында 1550 баланың барыһы ла башҡорт дәүләт телен өйрәнә.

2021-2022 уҡыу йылынан башҡорт-инглиз теле кластары асылды. Был класта уҡыусыларҙың 95 проценты туған тел булараҡ башҡорт телен уҡый. Әсә телен белеү балаларҙың рухи үҫешенә булышлыҡ итә, сөнки улар халыҡ педагогикаһы өлгөләре булған боронғо ҡобайырҙарыбыҙҙы, "Урал батыр" эпосын, Аҡмулла, Бабич, Ризаитдин Фәхретдин әҫәрҙәрен төп нөсхәһендә уҡый икән, уларҙың яҡшы, кешелекле шәхестәр булып үҫеренә ышаныс бар, тигән һүҙ. Башҡорт теле буйынса ҡала, республика, төбәк-ара кимәлдәге һәр төрлө ярыш-конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашыу ҙа уҡыусыларҙың күңелен, рухын үҫтерә, белемаң даирәһен байыта. Бәләкәй класс уҡыусылары "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡатнашып, телмәр оҫталығын шымартһа, "Мостай уҡыуҙары", "Р. Бикбаев уҡыуҙары" кеүек саралар, шулай уҡ уҡыусыларҙың төбәк-ара ғилми-эҙләнеү эштәрендә ҡатнашыуы уларға туған төйәк тарихын, мәҙәниәтен, телебеҙ байлыҡтарын тағы ла тәрәнерәк тойорға, рухиәтебеҙ хазиналары менән ғорурланырға сәбәп булды.

Һәм, әлбиттә, әйтеп китеүемсә, халыҡ аҡылы, уның тәрбиә һабаҡтары энциклопедияһы булған "Урал батыр" эпосын яттан башҡарыу конкурсында ла үҙебеҙҙе күрһәтә алдыҡ. Балалар эпосты ятлау менән генә сикләнмәй, ә уның идея-йөкмәткеһенә төшөнөргә тырыша, ҡыҙыҡһына, һорауҙарын бирә. Эйе, был йәһәттән уҡытыусынан, әлбиттә, күп яҡлы белем кимәле, уҡытҡан предметыңды яратыу, дәресте өҫтәмә материалдар менән байытыу, яңылыҡ эҙләү кеүек төпсөрлөк, тынғыһыҙ эшмәкәрлек талап ителә. Ошо юҫыҡта үткән йылдың "Уҡытыусы һәм остаз" тип нарыҡланыуы, шул айҡанлы үткәрелгән ғилми-методик ярҙам саралары, конкурстар уҡытыусы һөнәренең дәрәжәһен, абруйын күтәреүҙә мәртәбәле йыл булды, тиер инем. Шөкөр, гимназиябыҙҙа көслө етәксе, рухташ уҡытыусылар, теләктәш ата-әсәләр барҙа, ошондай уҡытыу-тәрбиә сараларын гөрләтеп үткәреү һөҙөмтәләрен бирмәйенсә ҡалмай: балалар туған әсә телебеҙгә айырым хөрмәт менән ҡарай, дәрескә һәр саҡ әҙерлекле килә һәм уҡытыусы һорауҙарына теүәл, аныҡ яуап бирә ала икән, тимәк, эшебеҙ юҡҡа түгел. Туған тел байлыҡтары, әҙәби әҫәрҙәр геройҙары, ижад донъяһы миҫалдары аша беҙ илһөйәр ҙә, телһөйәр ҙә, кеселекле һәм кешелекле лә йәштәр әҙерләүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ, тигән һүҙ.

АФАРИН!

# МӘСКӘҮГӘ, ИЛГӘ...

## башҡорт халыҡ ижадын күрһәттеләр



**Мәскәүҙең ВДНХ комплексында "Рәсәй" Халыҡ-ара күргәҙмә-форумы дауам итә. Уҙған аҙна төбәк стенды биләмәһендә ойошторолған Халыҡ ижады аҙналығында күргәҙмә ҡунаҡтары башҡорт халҡының милли мәҙәниәте һәм йолалары менән танышты. Аҙнаның һәр көнөнөң айырым бер темаға бағышланған булыуы уны мәғлүмәти йәһәттән байытты һәм күркәм итте.**

Башҡортостан стенды янына килеүселәрҙе сағыу, үҙенсәлекле космолет - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме "Ҡашмау" ҡаршы алды уҙған аҙнала. Тәүге минуттарҙан уҡ бөтә иғтибарҙы үҙенә йәлеп иткән космолет ҡунаҡтары Башҡортостандың бай мәҙәниәте, ижады менән танышып ҡына ҡалманы, ә бүләк отоу мөмкинлегенә лә эйә булды: Санкт-Петербург, Мәскәү, Белгород һәм Үзбәкстандан килеүселәр француз яулыҡ алып ҡыуанды. Ә кемдер иһә легендар "Салауат Юлаев" хоккей командаһы символикаһы һүрәтләнгән шапкалы булды.

(Дауамы 16-сы биттә).

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә ҙур урын бүлеүе менән күңелемә яҡын "Киске Өфө". Шулай уҡ гәзиттә дөрөҫлөктә алдап күрһәтеүгә, нимәнелер йәшереүгә юл ҡуйылмай, нисек бар - шулай яҙыла.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# "БЫНДА БӨТӘҺЕ ЛӘ - ЯЛАНАЯҠ..."

**Бик күп кинәйә, көләмәс, ишаралар ишеткәнем, уҡығаным бар, ләкин был йәһәттән хәтер хөртөрәк минең: ҡыҙғаныҫҡа, уларҙы шундуҡ онотам. Ғүмеремдә иҫтә һаҡланған бер генә көләмәс бар, шуны һеҙгә лә һөйләйем әле.**

Оптимист менән пессимист хаҡында ул. Ҙур ғына бер аяҡ кейемдәре фирмаһы эшен тағы ла киңерәк йәйелдерергә уйлай. Ошо маҡсаттан сығып, фирма етәксеһе урындағы ихтыяждарҙы өйрәнеү маҡсатында Африка илдәренең береһенә пессимист бер хеҙмәткәрен ебәрә. Ә униһы барып етеү менән: "Бында беҙгә эш юҡ - бөтәһе лә яланаяҡ йөрөй", - тип телеграмма һуға. Ул ҡайтып төшөүгә, етәксе шул уҡ илгә оптимисты ебәрә. Барып төшөү менән оптимистан шатлыҡлы хәбәр килә: "Бында беҙгә эш муйындан - бөтәһе лә яланаяҡ йөрөй". Бына шуның кеүек, тормошта ла бер үк мәсьәләгә ике төрлө ҡарарға мөмкин булыуын йыш ҡына онотоп ебәрәбеҙ. Был бигерәк тә берәй проблема килеп тыуғанда нык һиҙелә: мәсьәләне анализлау, уны хәл итеү юлдары хаҡында уйлай башлау урынына йыш ҡына: "Юҡ, булмай был минән..." - тип сигенеү, еңелде һайлауға биреләбеҙ.

Былағайҙар, "илаҡ" һәм мыжыҡтар юлы был - еңел, тик рухи көрсөктән башҡа бер нигә лә илтмәй торған юл. Ныҡышлылар, маҡсатлылар, һәр нәмәнең ыңғайын күреп, йүнен табыусы оптимистар, әлбиттә, бөтөнләй икенсе, аҡыл эйәһе әйтмешләй, Ер шарының ҡояшлы яғында йәшәүсе яҡты күңелле кешеләр улар. Тап ана шундай ағалы-ҡустылы ауылдаштары хаҡында яңыраҡ ҡына редакциябыҙға килеп киткән бер танышым һөйләп китте: "Был бер туғандарҙың өлкәне армиянан алда ауыл хужалығы техникумы тамамлағайны, хеҙмәт итеп ҡайтҡас, әле бер, әле икенсе эшкә тотоноп ҡараны, килтереп сығара алмай, ташлап ҡуйғайны, йәнә лә армиянан ҡустыһы ҡайтып төштө. Шешәгә күҙ ата башлаған ағаһын төрткөләп-типкеләп тигәндәй ҡуҙғатып, ниһайәт, уның башламаҫ борон ташлап ҡуйған эшен дәрләтеп ебәрҙеләр бит! Фермерлыҡ эштәре һарыҡ үрсетеү булһа ла, башмаҡтар ҙа аҫрайҙар, хәҙер килеп бер өйөр йылҡылары бар. Ҡатындары бейә һауып, ҡымыҙ бешә, хатта ҡыш та яһайҙар был шифалы эсемлекте. Ҡаҙы эшләп тә һаталар. Ҡыш һуғым мәлендә ҡапҡа төптәренән машина өҙөлмәй: килеп тә алып китәләр итте, үҙҙәре лә ҡалаға алып барып һаталар: район баҙарында сауҙа нөктәләре бар. Мал ҡараусы булып ауылдаштары ялланды, уларына бер тигәс тә эш булды. Бына шулай итеп, бер ниндәй һөнәре булмаһа ла, ағаһын "уҡытты" бит оптимист егетебеҙ. Уларҙың уңышына ҡыуанып бөтә алмайбыҙ: бөтөн ауыл шуларға ҡарап тора, бик ярҙамсыл, мәрхәмәтле булып сыҡты егеттәребеҙ. Әле иттән ярымфабрикат цехы асырға ниәтләйҙәр. Эшһеҙ ятҡан ауылдаштары ла, ошо йүнселдәргә ҡарап, бер аҙ тартыла төштө, сәмләнешеп йорт-хужалыҡтарына тотондо, ҡайһылары Себергә эшкә юлланды - һәр хәлдә, ошоға тиклем ойоп ятҡан ауылдаштарын ҡуҙғатып, уятып ебәрҙе Оптимист. Беҙ уны тап шулай тип йөрөтәбеҙ ҙә, ысын исемен берәү ҙә иҫләмәйҙер ҙә, моғайын".

Эйе, әле тап ана шундай уңышлылар, оптимистар заманы бөгөн. Уйлап ҡарайым да, ниндәй холҡо менән донъяға килһә лә, ахыр сиктә, бик теләһә, алдына маҡсат ҡуйһа, һәр кем үҙен оптимист итеп тәрбиәләй алалыр, моғайын...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МӘҒЛҮМӘТ ИҪКЕРМӘЙ,
## уны ҡабат-ҡабат уҡыйым



**Бөгөнгө яҙмамда байтаҡ йылдар ваҡытлы матбуғат өлкәһендә баш ҡаланың ғына түгел, тотош республиканың йөҙөк ҡашы булып торған "Киске Өфө" гәзите тураһындағы уй-фекерҙәрем менән бүлешеп киткем килә.**

Үҙем уны күптән алдырып уҡыйым һәм уның хаҡында ошо йылдар дауамында фекерем арыу ғына төйнәлде. Һәр уҡыусыһына иғтибарлы булыуы менән айырылып тора "Киске Өфө". Ҡағыҙ баҫмаларҙың матур әҙәби телебеҙ һаҡланып ҡалыуында роле ҙур. Телевизор, интернет селтәрендә бөтә мәғлүмәтте лә ҡыҫҡа, кешенең иғтибарын 1-2 минут тотоп ҡалырлыҡ ҡына итеп эшләйҙәр. Улар поезд вагондары ише, күҙ алдынан үтеп тора, һин уларҙы онотоп тораһың. Ә гәзит-журналдарға, ҡағыҙға баҫылған мәғлүмәт мәңгелеккә ҡала. Матур әҙәби тел менән яҙылған мәғлүмәт, мәҡәләләрҙе ҡабат-ҡабат ҡулға алып уҡырға мөмкин.

Яҡшы гәзит меңәрләгән мәғлүмәт араһынан иң мөһимен, кәрәген, актуаль булғанын һайлап ала белергә һәм шуны аңлайышлы итеп үҙенең уҡыусыһына еткерә белергә тейеш. "Киске Өфө" нәҡ шундай баҫмаларҙың береһе. Уның биттәрендә баҫылған мәҡәләләрҙә күп төрлө ваҡиғалар системалы баһалана, тирәяҡта барған хәл анализлана, төп күренештәргә иғтибар йүнәлтелә. Дөйөмләштереп әйткәндә, гәзит коллективы эшмәкәрлеге баҫма биттәрен "һыу" мәғлүмәт менән тултырыуға түгел, ә үҙ уҡыусыһына реаль файҙа килтереүгә йүнәлтелгән.

Башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә ҙур урын бүлеүе менән күңелемә яҡын "Киске Өфө". Шулай уҡ гәзиттә дөрөҫлөктә алдап күрһәтеүгә, нимәнелер йәшереүгә юл ҡуйылмай, нисек бар - шулай яҙыла.

Баҫманың сәләмәт тормош алып барыуға баҫым яһауы оҡшай. Табиптар менән әңгәмәләрҙе шулай уҡ көтөп алам. "Зыялылар майҙанын" яратып уҡыйым, һәр фекер төплө, урынлы, актуаль. Баш ҡалабыҙ тураһындағы мәҡәләләрҙе лә күҙ унынан ысҡындырмайым һәм унда күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙең ысынлап та урынлы булыуына шаһитмын. "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһы гәзиттең иң һуңғы битендә булһа ла, әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Гәзит биттәрендә ауыл хужалығы тураһында күберәк материал булыуын теләр инем. Шулай уҡ хәҙер туризмды үҫтереүгә ҙур көс һалалар, ләкин, миненсә, был өлкәлә ҙур туристик объекттар ғына күҙ уңында. Райондарҙа, ауылдарҙа ла туризм менән шөғөлләнгән кешеләр бихисап, улар хаҡында ла уҡыу яҡшы булыр ине.

Гәзит уҡыусылары өсөн абруйлы, файҙалы, яҡын дуҫ булған баҫма коллективына уңышлы ижади йыл теләйем. Именлектә үткәрергә яҙһын йылдары барыбыҙға ла.

**Рәжәп ӘЛИМБАЕВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Президент Владимир Путин педагогтар алдына мәғариф өлкәһендә традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытыу буйынса ҙур бурыстар ҡуйҙы. Ошо йәһәттән уҡытыу һәм тәрбиә эшен нисек итеп күҙаллайһығыҙ?***

***Фәтих ИМАНҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Белем һәм тәрбиә өлкәһендә Рәсәй Президенты тарафынан ҡуйылған бурыс, әлбиттә, яңылыҡ түгел. Беҙ, бөгөнгө пенсионерҙар, ошондай тәрбиә мәктәбе үткән быуынбыҙ. Беҙҙе нисек тәрбиәләнеләр һуң? Эйе, бөгөн күптәр ул йылдар тәрбиә мәктәбенә юғарынан ҡарап, кәмһетергә, хатта мыҫҡылларға ярата, ләкин илебеҙҙе генә түгел, бөтөн Европа илдәрен ана шул октябрят, унан пионер, унан комсомол тәрбиәһе үткән илһөйәрҙәр фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарып ҡалды ла инде. Күкрәге менән ут сәсеүсе амбразураны ҡаплаған комсомолец Шакирйән Мөхәмәтйәнов түгел инеме? Йә булмаһа, боеприпасы бөткәс, "И-16" самолетын дошмандың 4 пилоты ултырған "Хейнкель-111" бомбардировщигына туранан-тура таран яһаған Виктор Талалихин? Ә йыртҡыстарса язалауҙарҙан һуң да иптәштәрен һатмаған батыр партизан ҡыҙ Зоя? Улар бөтәһе лә совет мәктәбендә уҡып сыҡҡан һәм тәрбиәләнгән комсомолдар ине.

Һуғыштан һуңғы быуын геройҙары ла күп булды. Хәйер, ул заманда һәр бер тип әйтерлек йәш кеше Тыуған илебеҙ өсөн йәнен бирергә лә әҙер ине. Быңдай илһөйәрлектең нигеҙендә нимә ята ине һуң? Беҙҙе берәү ҙә илебеҙҙе көсләп яраттырманы, совет йәштәренең булмышы, асылы шулай ине. Беҙ илебеҙҙе яраттыҡ, уның фән ҡаҙаныштары, төҙөлөштәре, космонавтары менән ғорурландыҡ. Илебеҙ ҙә беҙҙе яратты: уҡыйым, эшләйем, тигән кешегә һәр тарафҡа юл асыҡ ине.

Дөрөҫ, төрлө саҡтар булды. Күптәр ул ваҡыттағы тауар һәм аҙыҡ-түлек ҡытлығын ғәйеп итеп күрһәтергә тырыша, ләкин беҙ ас үҫмәнек, яланғас булманыҡ, күңелдәребеҙ бөтөн һәм күтәренке ине. Ысын ҡытлыҡ һәм көрсөк касафаттары быуат байышына табан, 1990 йылдарҙа башланды. Ул осорҙа инде Советтар державаһын Ельцин "ботарлап" ташланы. Тәрбиә-әхлаҡ көрсөктәре лә тап ана шул йылдарҙан башланды ла инде. Йәмғиәт байҙар һәм ярлыларға бүленде, ил мөлкәтен олигарх-капиталистар бүлешеп алып бөтөрҙө. Хәйер, улар бөгөн дә ил байлығын ашап ята, байығандан байый, ә ярлылар фәҡирлек сигенә килеп етте. Эре, ҙур чиновниктар, депутаттар аҡсаларын сит ил банктарына күсерә, бала-сағаларын сит илдә уҡыта, ғаиләләрен сит илгә сығарып, шунда виллалар һатып алып, бизнес асып, лафа ҡороуҙы дауам итә һәм ике тормош менән йәшәп, ике йөҙлөгә әйләнеп бөттөләр. Ә ниңә Рәсәй мәктәбендә уҡытырға теләмәй улар балаларын? Бөтөн донъялары, уйҙары - сит илдә, тимәк, улар тыуған илде яратмай, унан нисек тә ҡасыу яғын ҡарай. Быны бөтөн халыҡ, шул иҫәптән, йәштәр күрә, белә, аңлай. Шундай хәлдә бөгөн нисек итеп декларациялар ярҙамында йәш быуындан илһөйәрҙәр яһарға тейешбеҙ? Мин өлкән кеше хәҙер, күрәһең, ниҙәлер аңлап бөтмәйемдер...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Салауат районы Миәшәгәр ауыл хакимиәте башлығы булып эшләгән ире үҙ теләге менән Махсус хәрби операцияға киткәс, ҡатыны, күп балалы әсә Ильнара Сафина уның вазифаһында эште дауам итә. Ошо көндәрҙә Ильнара "Служение" тип аталған Бөтә Рәсәй муниципаль премияһына лайыҡ булды. "Кеше яҙмышы - Ватан ғорурлығы" номинацияһындағы награданы уға Рәсәй Президенты Владимир Путин тапшырҙы. Билдәле булыуынса, конкуренция бик юғары булған - конкурсҡа 19 мең ғариза ҡабул ителгән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте хәрбиҙәрҙең айырым категорияларына бер тапҡыр бирелә торған аҡсаны түләүгә ҡағылышлы үҙгәрештәрҙе раҫланы. Документта 2023 йылдың 10 ноябренән һуң Рәсәй Федерацияһының Ҡораллы көстәрендә хәрби хеҙмәт үтеү тураһында контракт төҙөгән мобилизацияланғандар хаҡында әйтелә. Үҙгәрештәр ошо уҡ осорҙа Башҡортостанда урынлашҡан хәрби комиссариаттар йәки хәрби частар менән контрактҡа ҡул ҡуйғандарға һәм сағыру буйынса хеҙмәт итеү урынына контракт буйынса хеҙмәтте һайлағандарға ла ҡағыла.

✓Силәбе өлкәһенең Копейск ҡалаһы урамына Башҡортостандың халыҡ шағиры, яҙыусы һәм драматург Мостай Кәримдең исеме бирелде. Тейешле ҡарар Копейск ҡала округы депутаттары йыйылышы ҡарары менән ҡабул ителде, тип хәбәр итә Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге. Мәскәүҙә, Өфөлә, Алматыла (Ҡаҙағстан), Ҡазанда, Екатеринбургта, шулай уҡ Башҡортостандың бик күп ҡала-ауылдарында Мостай Кәрим урамдары бар.

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткән аҙнаға йомғаҡ яһағанда республиканың, экстремистарға ҡаршы тороп, өлгөргәнлеккә һынауҙы лайыҡлы үтеүен билдәләне. Шуның өсөн ул республика халҡына рәхмәт белдерҙе. Башҡортостанда хәлде ҡаҡшатырға тырышҡан кешеләр тураһында дөрөҫөн һөйләргә кәрәк, тине республика етәксеһе. Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарын кабинеттарынан сығырға, халыҡ менән йышыраҡ аралашырға, уларҙың проблемаларына ҡолаҡ һалырға, хәл итергә саҡырҙы.

✓ *Интернетта йәш-елкенсәк кенә түгел, өлкәндәр ҙә русса ғына аралашып ултыра. Телебеҙгә ҡарата бик һаҡ булыу кәрәк, ҡайһы берҙә ваҡ-төйәк тип, иғтибарһыҙ булмайыҡ.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# "САҠ ҠЫНА"ЛАРҘАН ТОРА...

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



***Мөнир СӨЛӘЙМӘНОВ, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат ҡалаһы:*** Башҡорт халҡы асылда бер-береһенә ҡарата асыҡ күңелле ул. Ана шул хәйлә, алдыҡ, бурлыҡ, ике йөҙлөлөк булмауы, электән үҙ-ара ярҙамлашып, ышаныс-терәк булып, золом-бәләнән ҡурсалашып йәшәүебеҙ арҡаһында беҙ милләт булып һаҡланып ҡалғанбыҙ ҙа. Шулай ҙа тынысланырға ярамай, сөнки яйлап ҡына үҙ асылыбыҙҙы - ҡан хәтере тигәнде, нәҫелдән килгән ғөрөф-ғәҙәт, милли холоҡто юғалта барабыҙ. Башҡорт телен һаҡлайыҡ, яҡлайыҡ тип күп һөйләп, әҙ эшләйбеҙ. 1990 йылдарҙа йәмәғәтселек менән әүҙем эш алып барып, Салауат ҡалаһында балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре, мәктәптәрҙә башҡорт кластары, аҙаҡтан инде бер лицей, бер гимназия астырғайныҡ. Быларҙы атҡарып сығыуға беҙгә билдәле шәхесебеҙ Мөхәмәт Исҡужин ярҙам итте. Ошо башҡорт гимназияһы бинаһы иҫке, ремонтлап булмай, тигән һылтау менән ябылып та ҡуйҙы. Шулай уҡ башҡорт кластары һәм төркөмдәре лә яйлап юҡҡа сыҡты.

Хатта дәүләт тарафынан ниндәйҙер мөмкинлектәр асылып та, кеше үҙе тырышмай икән, тимәк, был битарафлыҡ барыбер телде онотоуға килтерәсәк. Тәү сиратта, телде һаҡлау ғаиләнән булһа ла, туған телебеҙгә битарафбыҙ. Хатта аш бүлмәһенә дөгө урынына - рис, ҡарабойҙай урынына - гречка, һарымһаҡ урынына чеснок килеп "инде", бер һуған ғына "лук" була алмай ҡалғандыр. Интернетта йәш-елкенсәк кенә түгел, өлкәндәр ҙә русса ғына аралашып ултыра. Телебеҙгә ҡарата бик һаҡ булыу кәрәк, ҡайһы берҙә ваҡ-төйәк тип, иғтибарһыҙ булмайыҡ. "Донъя бит саҡ ҡыналарҙан тора һәм шул саҡ ҡыналар дөйөмләшеп, тулы бер бөтөн хасил була" - тигән бит Мостай Кәрим.

Шуны иҫтә тотайыҡ: үҙебеҙҙән тыш, беҙгә бер кем дә ярҙам итмәйәсәк. Беҙ балаларҙы 80-се йылдарҙа үҫтерҙек, ул саҡта башҡорт мәктәбе тигән төшөнсә лә юҡ ине. Ғаиләлә талап иткәс, өсөһө лә башҡортса һөйләште. Белемде русса алғас, фекерләүҙәре русса, әммә мин уларҙан, исмаһам, өйҙә башҡортса аралашыуҙарын теләнем һәм ошоно тормошҡа ашыра алдыҡ. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә башҡортса аңлап та, һөйләшмәгән балалар бар. "Һөйләшмәһендәр, әммә үҙең уларға башҡортса әйт, был барыбер төпкө аңында һаҡланып ҡала ул", - тип әйтәм ундай таныштарыма. Ысынлап та, олоғая бара рух күтәрелә икән ул, һин милләтеңә нығыраҡ тартыла башлайһың, башҡортса аралашҡың килә. Олатай-өләсәйҙәрҙең әйткән һүҙҙәре, өгөт-нәсихәттәре лә иҫкә төшә - ҡан хәтере юғалмай.

Шулай уҡ тарихты белеү кәрәк, тигән кәңәш әйткем килә. Шул саҡта беҙ милләтебеҙ менән ғорурланып йәшәйәсәкбеҙ. Мин, мәҫәлән, 11 быуын ата-бабамды беләм. Тик беҙҙең арала бынан да күберәк быуынын белеүселәр бар. Ишетеүемсә, Ғафури районы Сәйетбаба ауылында йәшәүсе ағалы-ҡустылы Ғәбделхәй менән Рәшит Лоҡмановтар тәү олаталары Мөйтән бейҙең 24-се быуыныбыҙ, тиҙәр. Бына был бит ҙур ғорурлыҡ, ошолар хаҡында ни эшләп һөйләмәйбеҙ?

Нисәнсе йылдалыр, бер милли баҫма хәҙерге Ишембай районы биләмәһендә Үрйән тигән ҡала булған, тип яҙып сыҡты. Мине белгән егеттәр: "Һеҙҙең яҡта боронғо ҡала булған икән", - тиҙәр. "Мин уны мәктәпкә төшмәҫ элек үк белә инем", - тием. "Ә ни эшләп һөйләмәнең?"- тип аптырайҙар. Тыуған ауылым Ишембай районы Уразбай ауылына ҡайтып, ошо хаҡта һөйләһәм, миңә ышанмаясаҡтар. Гәзитте күрһәтһәм, ышанасаҡтар. Шуға ла ваҡытлы матбуғатта тарих тураһында күберәк мәҡәләләр баҫтырырға кәрәк. Халҡыбыҙҙың боронғолоғон күрһәткән, данлы тарихыбыҙҙы һөйләгән ошондай урындар, атамалар беҙҙә бихисап бит. Уларҙы белгәс, йәштәр милләте менән дә ғорурланасаҡ.

Һәм тағы ла, ел ыңғайына арҡабыҙҙы ҡуйырҙан алда "Кеше күңелен күрһәң, үҙеңдең күңелең буш ҡалыр" тигән мәҡәлде иҫтән сығармайыҡ. Ни өсөн тиһәң, башҡаларҙың арбаһына ултырырһың да ул, ә арба хужаһы теләһә үҙ йырын йырлата, оҡшамаһаң, теләгән ерендә төшөрөп ҡалдыра ала. Былай барһа, киләсәктә балаларыбыҙ телһеҙ, ерһеҙ ҡалырға ла мөмкин бит.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Президент Владимир Путин педагогтар алдына мәғариф өлкәһендә традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытыу буйынса ҙур бурыстар ҡуйҙы. Ошо йәһәттән уҡытыу һәм тәрбиә эшен нисек итеп күҙаллайһығыҙ?***

***Рафиҡ ӘБҮЛӘЕВ, Өфө ҡалаһының 108-се дөйөм урта белем биреү мәктәбе директоры:*** Традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр нимә ул, уны балалар күңеленә, аңына нисек итеп һеңдерергә? Тәүҙә, әлбиттә, һәр уҡытыусы үҙе өсөн ошо мәсьәләләрҙе асыҡлап алырға, уҡытыу эшмәкәрлеген ошо йүнәлешкә көйләргә һәм программа билдәләргә тейештер. Был программа директор өсөн ташҡа баҫылған план булмаҫҡа ла мөмкин, сөнки һин уҡытыусы икән, ул мотлаҡ күңел түрендә йәшәүсе ниәт булырға тейештер, тип күҙаллайым мин үҙем. Ни өсөн тигәндә, уҡытыусы белем биреүҙе тәрбиә биреү менән яраштыра белергә, балаларҙың социаль аң кимәлен, әхлаҡи сифаттарын үҫтереүгә булышлыҡ итергә лә тейеш бит. Илһөйәрлек, телһөйәрлек сифаттары, өлкәндәргә кеселекле мөнәсәбәт, ихтирам, үҙеңдән кеселәргә ярҙамсыллыҡ, хәстәрлек, бергә уҡыған тиҫтерҙәрең менән берҙәмлек, татыулыҡ - былар бит бөтәһе лә ана шул рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙең ҡайһы бер өлгөләре. Улар мәктәп тормошонда көн һайын, минут һайын кәрәкле шарттар. Уларһыҙ, ғөмүмән, коллективта йәшәү, уҡыу, уҡытыу мөмкин дә түгел. Дөрөҫ, уҡытыусылар өсөн әлегә был турала яҙылған методик ҡулланмалар, хеҙмәттәр ҙә, оҫталыҡтарын камиллаштырыусы ниндәйҙер махсус курстар ҙа юҡ, был һәр педагогтың интеллектына, эске мәҙәниәтенә, белем һәм аң даирәһенә бәйлелер, тип уйлайым. Шул осраҡта ғына уҡытыусы белем менән бергә баланың аң кимәлен дә үҫтерә аласаҡ.

Әйткәндәй, программа, тигәндән, унһыҙ ҙа эшләп булмаясаҡ. Был күбеһенсә мәктәптә үткәрелгән кластан тыш тәрбиә эштәренә ҡағыла. Мәҫәлән, күптән түгел мәктәбебеҙҙә йәш армеецтар сафына ҡабул итеү тантанаһы булып үткәйне. Мин унда уҡыусыларҙың был сараға нисек тулҡынланып әҙерләнеүҙәрен күрҙем. Улар махсус формаларҙа матур итеп кейенеп килде һәм үҙҙәренең Бөтөн Рәсәй "Юнармия" балалар-үҫмерҙәр хәрби-патриотик хәрәкәтенә ҡушылыу ғорурлығы кисереүҙәрен йәшермәне. Бындай сараны йәш күңелдәрҙе тетрәндерерлек кимәлдә үткәрергә тырышырға кәрәк; тантананың формаль бер сара түгеллеген, ә шәхсән һәр уҡыусыға төбәлгәнлеген күрһәтергә, уға уҡыуында, тәртибендә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелеүен аңлатырға кәрәк.

Мәктәбебеҙҙә йәш армиясылар отрядын ойоштороусы уҡытыусыбыҙҙан уңдыҡ. Балаларҙа илһөйәрлек рухын ул үҙ тормош юлы өлгөһөндә тәрбиәләргә хоҡуҡлы, сөнки ул күп йылдар буйы авиацияла хеҙмәт итеп, ҡаһарманлыҡ күрһәткән, илебеҙ наградаларына лайыҡ булған авиация полковнигы Данис Фәрит улы Йәнгиров. Балаларға рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү эше һәр уҡытыусыға, уның белеме һәм мәҙәни кимәленә бәйле, тигәйнем. Был Ватан тарихы, туған тел һәм әҙәбиәт, география, хеҙмәт, физкультура, музыка дәрестәре уҡытыусыларының бөтәһенә лә берҙәй ҡағыла, сөнки улар уҡытҡан һәр предмет теге йә был дәрәжәлә кешелек тарихы ҡиммәттәренең сағылышы ул. Шул уҡ ваҡытта был йүнәлештә бөтөн эште мәктәпкә генә ауҙарып ҡуйыу ҙа дөрөҫ түгелдер, тием. Иң тәүҙә атай-әсәй ғаиләлә балаһына рухи байлыҡ һеңдереп үҫтермәһә, әхлаҡи йәһәттән тәрбиәләмәһә, мәктәптең тырышлығы менән генә уңышҡа ирешеүе икеле, сөнки, нимә генә тимә, ғаилә баланы ысын кеше итеп үҫтереүҙә беренсел мөхит булып ҡала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Хоҡуҡ һаҡлау органдары Баймаҡта рөхсәтһеҙ акцияла ҡатнашыусыларға Рәсәй Енәйәт кодексының 212-се статьяһы ("Күмәк сыуалыштар") буйынса енәйәт эше ҡуҙғатты. Ошо статья буйынса 15 йылға тиклем иректән мәхрүм ителеү янай. Шулай уҡ күмәк сыуалыштарҙа ҡатнашырға саҡырыу, йәлеп итеү өсөн дә яуаплылыҡ ҡаралған.

✓2024 йылда үтәсәк Рәсәй Президенты һайлауҙарында Башҡортостанда онлайн тауыш биреү булмаясаҡ. Ошо йылдың 15-17 мартында электрон тауыш биреү хоҡуғына 29 төбәк эйә булған, яҡынса 38 млн кеше һайлау участкаһына бармай ғына Президент һайлауҙарында ҡатнашасаҡ. Бының өсөн улар алдан ғариза бирергә тейеш, ә баш ҡалала һайлаусыларҙың электрон исемлеге ҡулланыла, шуға ла уларҙан был талап ителмәй.

✓Сығарылыш класс уҡыусылары 1 февралгә тиклем БДИ тапшырасаҡ фәндәрҙе һайларға тейеш. Был турала БР мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин белдерҙе. Быйылғы сығарылыш уҡыусылары ғаризаны үҙе уҡыған мәктәптә бирә, белем усағын алдағы йылдарҙа тамамлаусылар һәм колледж студенттары өсөн министрлыҡ махсус имтихандар тапшырыу урындары исемлеге билдәләгән. 9-сы класс уҡыусылары 1 мартҡа тиклем ғариза бирә. БДИ-ның ҡыҙыу линияһы ла эшләй: 8 (347) 218-03-81, 8 (347) 218-03-28.

✓Башҡортостан Башлығы бойороғо менән 2024-2028 йылдарға муниципаль берәмектәрҙә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙең үҙгәреү индексы раҫланды. Республиканың барлыҡ муниципаль берәмектәре өсөн индекс - 13,6 процент. Түләүҙең үҙгәреү темптары коммуналь хеҙмәттең төрөнә ҡарап айырыла. Мәҫәлән, 2024 йылдың 1 июленән Өфөлә һыу менән тәьмин итеүгә һәм һыу бүлеүгә - 114 процент, йылылыҡ менән тәьмин итеүгә - 112 процент, электр энергияһына - 108,9 процент, газға - 111,2 процент һәм ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеүгә 110 проценттан артмай.

✓Ошо көндәрҙә 3-сө "Сибай" республика полилингваль күп профилле гимназия-интернатында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова призына ижадсылар бәйгеһе үтте. Конкурсҡа бөтәһе 100-ҙән ашыу эш ҡабул ителгән. Методика, проза, поэзия һәм журналистика буйынса килгән ижади эштәрҙе абруйлы баһалама ағзалары тикшерҙе. Иң яҡшы эштәрҙең авторҙары икенсе турға - бәйгенең финал өлөшөнә саҡырылды.

*✓ Башҡортостан Башлығы Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан баш ҡала урамдарын төҙөкләндереү барышында адреслы таҡтаны башҡортса яҙырға кәрәклегенә иғтибар итте.*



ҠЫҪҠАСА

# БАШҠОРТ БАЛЫ...

**2023 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостандан сит илдәргә бал оҙатыу күләме 2,5 тапҡырға артҡан, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығынан. Былдай күрһәткестәргә "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" милли проекты ярҙамында өлгәшелгән.** "Быltыр донъяның ете иленә 111 тоннанан ашыу бал оҙатылған. Унан алдағы йылда 6 илгә экспорт - 43,6 тонна, 2021 йылда 8 илгә 103 тонна тәшкил иткән. Быltыр ошо исемлеккә Беларусь, Ҡаҙағстан, Сербия, Үзбәкстан һәм башҡа дәүләттәр ҙә инде", - тип аңлатма бирҙе Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәҙрахманов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан тауар балын етештереү буйынса Рәсәйҙә лидер булып тора.

✓ **Хәйбулла районының Аҡъяр тау колледжы етәкселеге яңы уҡыу йүнәлешен асыу һәм медицина кадрҙары әҙерләү тәкдиме менән сыҡты. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе.** "Уҡытыусылар менән тәьмин итә алырлыҡ көслө колледж. Әйҙәгеҙ, унда фельдшерҙар һәм шәфҡәт туташтарын әҙерләүсе медицина бүлексәһен асайыҡ. Нефтекамала һәм Мәсәғүттәге кеүек", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе фекеренсә, был Башҡортостандың көньяғын һәм күрше төбәктәрҙе медицина кадрҙары менән тәьмин итергә мөмкинлек бирергә тейеш. Тәүге студенттарҙы 2025 йылда ҡабул итеү планлаштырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылдың сентябрендә Нефтекамала Бөрө медицина-фармацевтика колледжының филиалы асылды, ә 2023 йылдың февралендә Мәсәғүттә Өфө медицина колледжының филиалы эшләй башланы.

✓ **Киләһе йылдарҙа Берҙәм дәүләт имтихандарын үткәреү процедураһында глобаль үҙгәрештәр көтөлмәй, тип белдерә Рособрнадзор етәксеһе Анзор Музаев.** "Берҙәм дәүләт имтиханларына ҡағылған ҙур үҙгәрештәр булмаясаҡ. Ә булған ваҡ яңы төҙәтеүҙәрҙе йыл һайын 1 сентябргә тиклем халыҡҡа еткереп торабыҙ". Рособрнадзор етәксеһе билдәләүенсә, имтихан ғәҙәти режимда үтә. Экспертҡарҙың объективлыҡ йәһәтенән иҫкәртеүҙәре булғаны юҡ. Анзор Музаев БДИ индерелгәндән алып элекке баһалау системаһына кире ҡайтырға саҡырыуҙарҙың туктамауы хаҡында ла әйтте. Тик 2013-2014 йылдан алып БДИ-ны үткәреү көслө контроль аҫтында үтә һәм халыҡ араһында кире тойғолар тыуҙырмай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ХӘСТӘРЛӘП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Туған телдәр сәғәте" үткәрҙе. Кәңәшмәлә фән, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, полилингваль күп профилле мәктәп директорҙары ҡатнашты. Был турала республика Башлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

- Беҙ бөгөн киләсәккә бурыстар билдәләү өсөн йыйылдыҡ, - тине Радий Хәбиров. - Үткән тематик кәңәшмәлә бер нисә ҡарар ҡабул иткәйнек. Уларҙың күбеһен, мәҫәлән, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһына ярҙам, Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант, полилингваль гимназиялар селтәрен үҫтереү, дәүләт һәм муниципаль власть органдарында кәңәшмә ваҡытында республиканың дәүләт телдәрендә сығыш яһауҙы ойоштороу кеүектәрен ғәмәлгә ашырҙыҡ...

Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин һүҙҙәренсә, республиканың мәғариф системаһында 13 туған телдә өйрәнеү ойошторолған. Әйтәйек, балалар баҡсаларында башҡорт, татар, сыуаш, удмурт телдәре, шулай уҡ өҫтәмә рәүештә мордва һәм мари телдәре туған тел булараҡ өйрәнелә. Мәктәптәрҙә рус, башҡорт, татар, сыуаш, мари, удмурт, мордва, украин, немец һәм белорус телдәре уҡытыла. 2023/2024 уҡыу йылында мәктәп уҡыусыларының 29,5 проценты (153 800 кеше) туған телдәрҙе (рус телен иҫәпкә алмайынса) өйрәнә. Был уҙған уҡыу йылына ҡарағанда 8,5 мең балаға күберәк. Бынан тыш, республика мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү ойошторолған. Уҡыусыларҙың 78,5 проценты - 408 781 кеше уны һайлаған. Быltырғыға ҡарағанда 42 мең балаға күберәк.

Башҡортостанда Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала, Сибайҙа, Учалы, Хәйбулла һәм Мишкә районларында һигеҙ полилингваль күп профилле мәктәп уңышлы эшләй. 2024 йылда Баймаҡ һәм Тәтешле районларында ошондай ике мәктәп асыу, 2030 йылға тиклем республикала өҫтәмә һигеҙ полилингваль белем биреү учреждениеһы төҙөү планлаштырыла. Уңышлы проекттарҙың береһе - Башҡорт теленән диктант, 2019 йылдан ул халыҡ-ара кимәлгә сыҡты. Әгәр башланғыс этапта 70 мең кеше диктант яҙһа, 2023 йылда бар донъяла ҡатнашыусыларҙың һаны 340 меңдән ашты.

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы ла йыл һайын башҡорт телен популярлаштырыу буйынса проекттарға грант ярҙамы конкурстарын уҙғара. Мәҫәлән, быltыр дөйөм суммаһы 900 мең һумлыҡ 25 грант киң мәғлүмәт өлкәһендәге башланғыстарҙы һәм онлайн-проекттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелде. Бынан тыш, 2023 йылда башҡорт теленән тәүге онлайн-олимпиада ойошторолдо. Унда 23 илдең һәм Рәсәйҙең 67 төбәге вәкилдәре - бөтәһе 27,6 мең кеше ҡатнашты.

Башҡортостан Башлығы Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан баш ҡала урамдарын төҙөкләндереү барышында адреслы таҡтаны башҡортса яҙырға кәрәклегенә иғтибар итте. Кәңәшмә аҙағында Радий Хәбиров профилле министрлыҡтарға һәм ведомстволарға республикала Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса яңы башланғыстар хаҡында тәкдимдәр әҙерләргә ҡушты.

# БЕҘҘЕҢ РИЗЫҠ ҮТЕМЛЕ

**2023 йылда Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы иген һәм уны эшкәртеүҙән алынған продукттар экспортын ике тапҡырҙан ашыуға арттырған.**

Яҡын һәм алыҫ сит илдәргә ебәреү күләме 130 процентҡа тиерлек артып, 471,78 мең тоннаға еткән. 2022 йылда Башҡортостан агрокомпаниялары сит илгә 205,6 мең тонна иген оҙатҡан. Хәҙер Башҡортостан ашлығын һатып алыусылар иҫәбенә Әзербайжан, Бельгия, Беларусь Республикаһы, Германия, Грузия, Дания, Ҡаҙағстан һәм Үзбәкстандан тыш, Афғанстан, Ҡырғыҙстан, Ҡытай, Латвия, Нидерландтар, Польша, Төркмәнстан, Төркиә һәм башҡалар өҫтәлгән. Һанап үтелгән илдәргә 121,21 мең тоннанан ашыу бойҙай, 79,42 мең тонна арпа, 51,6 мең тонна етен, 6,84 мең тонна борсаҡ, 8,7 мең тонна арыш, 0,95 мең тонна көнбағыш, 0,59 мең тонна гәрсис, 0,98 мең тонна һоло, 1,9 мең тонна сафлор оҙатылған.

Экспортланған ҡуҙаҡлы иген һәм мал аҙығы культуралары исемлегендә ноҡот борсағы, ҡарабойҙай, шипкән, кәрешкә һәм башҡа үҫемлектәр бар. Шулай уҡ быltыр республика сит илгә 17 мең тоннанан ашыу ярма, он һәм кәрпә һатҡан.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Әлшәйҙең "СН Агро" компанияһы Ҡытайға 2,3 мең тонна арпа оҙатҡан, тип хәбәр иттеләр ведомствонан.

# АУЫЛ УҠЫТЫУСЫҺЫ

**Башҡортостанда дүрт йылда "Ауыл уҡытыусыһы" программаһында ҡатнашҡан 150 уҡытыусы ауылдарға, ҡала тибындағы ҡасабаларға һәм 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға күсеп килгән һәм бер тапҡыр бирелә торған компенсация алған. 2023 йылда был программа буйынса өс уҡытыусыға аҡса түләнгән.**

"2022 йылда тормош иптәшем тыуып үҫкән Ҡариҙел ауылында инглиз теле уҡытыусыһы урыны булыуы тураһында белеп ҡалдым һәм "Ауыл уҡытыусыһы" федераль программаһы буйынса конкурста ҡатнашыу өсөн документтарымды тапшырҙым. Конкурста еңгәс, күп уйлап тормайынса, Ҡариҙел районының 2-се мәктәбенә эшкә сыҡтым", - тип һөйләне инглиз теле уҡытыусыһы Светлана Закирова.

Хәбәр иткәнебеҙсә, "Ауыл уҡытыусыһы" программаһы 2030 йылға тиклем оҙайтылған. Хәҙер 20 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡасабаларҙа эшләп йөрөгән 35 йәшкәсә уҡытыусылар грантҡа дәғүә итергә мөмкин (элек 15 мең ине). Конкурсҡа документтар 1 февралдән 31 майға тиклем ҡабул ителә. "Ауыл уҡытыусыһы" программаһында ҡатнашыу конкурста еңгән уҡытыусыларға 1 миллион һумлыҡ бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүҙе күҙ уңында тота. Педагог мәктәптә кәмендә 5 йыл эшләргә бурыслы.

# АСТАНАЛА БИЗНЕС-ФОРУМ АСЫЛДЫ

**Астана ҡалаһында "Ҡаҙағстан - Башҡортостан" бизнес-форумы эшен башланы.**

"Һуңғы ике йылда Ҡаҙағстан менән Башҡортостан араһында тотороҡло, дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырылды. Файҙалы сәфәрҙәр ойошторолдо. Ҡаҙағстан - Башҡортостандың төп сауҙа-иҡтисади партнерҙары иҫәбендә. 2022 йылда сауҙа әйләнеше 10 процентҡа артып, 464 миллион долларға еткән. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса үҫеш биш процент тәшкил иткән. Ағас эшкәртеү, химия һәм машиналар төҙөлөшө тармағында уртаҡ проекттар бойомға ашырыла. Беҙҙең алда амбициялы бурыстар тора һәм беҙ сәнәғәттә, инновацияла, һаулыҡ һаҡлауҙа, мәғарифта, бәләкәй бизнеста хеҙмәттәшлекте үҫтерәсәкбеҙ. Бөгөн республика хөкүмәте һәм Радий Фәрит улының тырышлығы менән бизнес тағы ла нығыраҡ үҫешһен өсөн уңышлы майҙансыҡ барлыҡҡа килде. Был форум идеялар, тәжрибә менән алмашыу һәм яңы партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен булдырыу өсөн уникаль мөмкинлек бирер тип ышанабыҙ", - тине Ҡаҙағстандың сәнәғәт һәм төҙөлөш министры Канат Шарлапаев.

"Ҡаҙағстан - беҙҙең өсөн төп тышҡы иҡтисади сауҙа партнеры. Дәүләт башлыҡтары Ҡасым-Жомарт Кемелевичтың һәм Владимир Путиндың сәйәси өлөшө һәм үҙ-ара хөрмәткә нигеҙләнгән мөнәсәбәттәре беҙгә хеҙмәттәшлекте үҫтерергә мөмкинлек бирә", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Радий Хәбиров ҡаҙаҡ коллегаларын көҙ көнө Өфөгә Ҡаҙағстандың һәм Рәсәйҙең XX төбәк-ара хеҙмәттәшлек юбилей форумына саҡырҙы.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2024 йылдың тәүге 8 көнөндә Башҡортостанда 575 бала донъяға килгән, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Татьяна Һәүбәнова. Уның билдәләүенсә, 1-8 ғинуарҙа тыуған балалар араһында 10 игеҙәк бар. Быltыр тыуыу тураһында таныҡлыҡтың 76 проценты тиерлек электрон төрҙә бирелгән, тип тә өҫтәне спикер.

✓Ильяс Иштуған улы Вәлиев "Башҡортостан Республикаһының халыҡ уҡытыусыһы" тигән абруйлы исемгә лайыҡ булды. Ул 40 йылдан ашыу ғүмерен мөғәллимлек эшенә бағышлаған. Ауыл уҡытыусыһынан алып педагогия фәндәре докторы, ике академияның мөхбир ағзаһына тиклем хеҙмәт юлы үткән. Ильяс Иштуған улы - Эстонияның Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаев һәйкәлен, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Рәшит Ниғмәти, 1-се гимназия-интернаты тарихы музейҙарын асыу инициаторҙарының береһе.

✓Тарихсы Рәмил Рәхимов күп йылдар республикаға етәкселек иткән Миҙхәт Закир улы Шакировтың хәтерен мәңгеләштереү тәкдиме менән сығыш яһаны. Башҡортостан Башлығы тәкдимде хупланы. Быйыл йыл аҙағында билдәле сәйәси эшмәкәр Миҙхәт Шакиров йәшәгән йорт янында һәйкәл асырға әҙерләнәбеҙ, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Ғинуар башынан "Сәләмәтлек поезддары" ла әүҙем эшләне. Ҡыуатов исемендәге РКД-ның күсмә диагностика комплексы белгестәре Благовещен, Борай, Балтас районларында 306 кешене ҡабул иткән, уларҙың 6-һы стационар дауаланыуға йүнәлтмә алған. Шулай уҡ Стәрлетамаҡтың балалар дауаханаһында Өфө табиптары бәләкәй пациенттарҙы ҡараған. "Был акция йыл һайын дауам итәсәк, сөнки ул ауыл халҡына квалификациялы медицина ярҙамы алыуға мөмкинлек бирә", - тип яҙҙы Радий Хәбиров телеграм-каналында.

✓Яңы йыл каникулдары ваҡытында электричка менән йөрөүселәр һаны артҡан. 2023 йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, 123 мең пассажир ошо төр транспортка өҫтөнлөк биргән, был 31 процентҡа күберәк. Иң популяры булып "Өфө - Айгыр - Яңы Абҙаҡ" маршруты буйынса хәрәкәт иткән "Урал легендаһы" тау саңғыһы экспресы билдәләнгән. Шулай уҡ "Өфө - Күмертау - Ырымбур" йүнәлешендәге "Көньяҡ радиус" популяр булған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Баш ҡалабыҙҙың Рус академтеатрында "Өфө, мин һине яратам!" тип аталған Ижади лаборатория эшләй башланы. Был уникаль проект баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына арналған.



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ОПЕРАТИВ ШТАБ...

**Өфө ҡала хакимиәтенең Оператив штабы ултырышын хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Сергей Кожевников конференцбәйләнеш режимында уҙғарҙы.**

Ул иң тәүҙә ҡала урамдарын ҡарҙан таҙартыу һәм йәмәғәт транспорты эшен иғтибар үҙәгендә тотоу зарурлығын билдәрҙе. Ултырышта Өфөнөң Граждандарҙы ҡурсалау идаралығы начальнигы Руслан Шәйҙуллин оҙайлы ял көндәренең бәлә-ҡазаһыҙ үтеүе хаҡында һөйләп үтте.

Штаб ултырышында, баш ҡала кешеләре өсөн үтә мөһим булған мәсьәләләрҙең береһе булараҡ, райондар биләмәләрендә янғын сығыуҙы иҫкәртеү хаҡында етди һөйләшеү булды. Был проблема буйынса баш ҡаланың Янғын һағы идаралығы етәксеһе Шамил Тоҡомбәтов сығыш яһаны. Ул Өфөлә янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәмәү арҡаһында янғындарҙың күп булыуы, ошо мәсьәлә буйынса профилактик сараларҙы әүҙемләштереү кәрәклеге хаҡында белдерҙе. Ул йыл башынан бирле янғында 45 кешенең ғүмере ҡотҡарылыуы, 3332 кеше менән янғын хәүефһеҙлеге хаҡында әңгәмәләр үткәрелеүен билдәләне. Сергей Кожевников идара итеүсе компаниялар менән тығыҙ бәйләнештә эшләп, күп фатирлы йорт подъездарында "Хәүефһеҙлек мөйөштәре"н булдырып, граждандарҙы янғын хәүефһеҙлеге саралары хаҡында мәғлүмәт менән таныштырыуҙы талап итте.

# ХАҠТАР ҮҘГӘРӘ

**"Өфө һыу каналы" предприятиеһы хәбәр итеүенсә, ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы һәм Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитетының 2023 йылдың 13 декабрендәге ҡарарҙары нигеҙендә 2024 йылға һыу менән тәьмин итеү, һыу бүлеү хеҙмәттәре өсөн хаҡ раҫланған.**

Хаҡты 1 июлдән арттырыу ҡарала. Баҫылып сыҡҡан мәғлүмәттәргә ярашлы, халыҡ өсөн эсәр һыуҙың бер кубометры 30,79 һумдан 35,10 һумға тиклем ҡиммәтләнә. Һыу бүлеү - бер кубометры 33,88 һумдан 38,62 һумғаса күтәрелә. Халыҡ өсөн һыу тариф үҙгәрмәй, бер кубометр өсөн 39,95 һум буласаҡ.

# БАШ ҠАЛА СӘХНӘҺЕНДӘ

**Баш ҡалабыҙҙың Рус академтеатрында "Өфө, мин һине яратам!" тип аталған Ижади лаборатория эшләй башланы.**

Был уникаль проект баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына арналған. Йәш, әммә танылыу яулаған режиссерҙар Ленара Ғәҙелшина (Мәскәү), Ксения Пещик (Красноярск) һәм Илсур Ҡаҙаҡбаев (Өфө) тәүге эс театраль эскизында тамашасыларға баш ҡала тормошонон, уның тарихының ижади сағылышын күрһәтте.

- Театр лабораторияһы - был эҙләнеүҙәр ваҡыты һәм территорияһы. Эскиздар документаль театр жанрында ижад ителә, уларҙың текстары "бында һәм хәҙер" тыуҙырыла. Бының өсөн режиссерҙар актерҙар менән бергә төрлө ҡала легендаларын йыя, билдәле Өфө кешеләренең көндәлектәрен өйрәнә, ошо сюжеттарға үҙҙәренең шәхси кисерештәрен, хәтирәләрен дә ҡуша, - тип белдерҙеләр театрҙың мәғлүмәт хеҙмәтендә.

# ЯҢЫ ҠАСАБА БУЛАСАҠ

**Өфө эргәһендәге Начапкин ауылында яңы ҡасабаның проект финанслауын һәм эскроу-иҫәп ҡулланып төҙөлгән тәүге йорттары файҙаланыуға тапшырылды.**

"Өфөлә ҡала ситендәге торлаҡҡа ихтыяж йылдан-йыл арта, шуға күрә ошо маҡсатҡа банк кредитлауын йәлеп итеү зарур. Был проекттың тормошҡа ашырыу өсөн республикала биләмәләрҙе комплекслы үҫтереү механизмы йәлеп ителгән, ул халыҡты сифатлы торлаҡ менән генә түгел, тейешле инфраструктураһы булған уңайлы мөхит менән дә тәьмин итергә тейеш", - ти республиканың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Владислав Сидоркин.

Дөйөм майҙаны яҡынса 800 квадрат метр тәшкил иткән ике яны аҙ ҡатлы йорттоң һәр береһендә 7-8 фатир бар. Быйыл төҙөүселәр дөйөм майҙаны 3 мең квадрат метрҙан ашыулыҡ тағы дүрт таунхаусты тамамлап, 35 яңы фатирҙы файҙаланыуға тапшырырға йыйына. Бынан тыш, 2024 йылда дөйөм майҙаны яҡынса 4 мең квадрат метрлыҡ 32 айырым йортто сафҡа индереү планлаштырыла. Бында бөтәһе 300 аҙ ҡатлы йорт - таунхаустар һәм 100 шәхси өй төҙөләсәк. Биләмәне комплекслы төҙөүҙән тыш, проектта төҙөкләндереү, ял зоналары, балалар һәм спорт майҙансыҡтары, социаль һәм коммерция объекттары булдырыу ҡаралған.

# МИЛЕКТЕ ТӘЛӘФЛӘМӘ!

**15 ғинуарҙа вандалдар "Каруанһарай" аҡыллы туҡталыш павильонын эшлектән сығарып китһә, 22 ғинуарҙа "Госцирк" туҡталышы павильонында ла ҡорамалдарға зыян килтерелде.**

Бында усал ниәт менән ҡыйыҡ аҫтындағы электр сымдары өҙөп ташланған. Әлеге ваҡытта "Уфагортранс" вандалдарҙың шәхесен асыҡлау һәм яуаплылыҡҡа тарттырыу маҡсатында полицияға мөрәжәғәт итте. Әйтергә кәрәк, РФ Енәйәт Кодексында вандаллыҡ өсөн бик етди статьяллар бар. 214-се статьяға ярашлы, биналарҙы һәм башҡа ҡоролмаларҙы йәмһеҙләп бысраткан, йәмәғәт транспортында йә иһә башҡа йәмәғәт урындарында мөлкәтте тәләфләгән өсөн суд ҡарары менән хөкөм ителеүсегә 40 мең һумға тиклем йәки уның өс айлыҡ эш хаҡы йә иһә башҡа килеме кимәлендә штраф һалыу, йә 360 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәргә, йә бер йылға тиклем ваҡытҡа холоҡ төҙәтеү эштәренә дусар итеү, йә өс айға тиклем ҡулға алыу ҡаралған. Әгәр ҙә ошондай ғәмәлдәр төркөм составында ҡылынһа, енәйәт ҡылыусылар өс йылға тиклем иркен сикләүгә, йә өс йылға тиклем мәжбүри эш башҡарыуға, йә шул уҡ ваҡытҡа тиклем иркенән мәхрүм ителә.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## РАМАҘАН ӨМӨТБАЕВ

Күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре, ғалим-иҡтисадсы, яҙыусы Р.Ғ. Өмөтбаев 1924 йылдың 7 апрелендә Башҡорт АССР-ының Йылайыр кантоны Әлмөхәмәт ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) ишле ғаиләлә беренсе бала булып тыуа. Ата-бабалары бөрйән ырыуынан. Тыуған ауылында башланғыс мәктәптә уҡый, Ишҡолда - ете йыллыҡ, Баҡыр Үҙәк эшселәр ҡасабаһында урта мәктәпте маҡтау грамотаһына тамамлай. Колхоз һәм район һабантуйҙарында башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарып, беренсе урындар ала. 1942 йыл башында үҙ теләге менән фронтҡа китә. 1943 йылдың йәйендә Курск дуғаһындағы яуҙарҙа ҡатнаша, Орёл ҡалаһы янында ауыр контузия ала. Дауаланып сыҡҡас, 11-се гвардия армияһы составында Балтика дәүләттәрен дошмандан азат итеүҙә ҡатнаша.

1945 йылдың ноябренән башлап "Сибайалтын" руднигында эшләй, рудниктың комсомол ойошмаһы сәркәтибе була. 1947 йылдан коммунистар партияһының Баймаҡ район комитетында эшләй, унда беренсе секретарь вазифаһына тиклем хеҙмәт юлы үтә. 1960 йылда уны КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына партия органдары бүлеге етәксеһе итеп үрләтәләр. 1954 йылда Магнитогорск педагогия институтын тамамлай. 1965-1967 йылдарҙа - Мәскәүҙең йәмәғәт фәндәре академияһы аспиранты. 1967 йылда Рамаҙан Өмөтбаев иҡтисад фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә лайыҡ була, иҡтисад буйынса бер нисә китап яҙа.

1967-1975 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары. БАССР-ҙың 4-9-сы саҡырылыш Юғары Советы депутаты. 1989 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. 1982 йылда хеҙмәт юлын БАССР-ҙың Кинофикация буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһында тамамлай.

Наградалары: Ленин (1957), II дәрәжә Ватан һуғышы (1985) һәм "Почёт Билдәһе" (1974) ордендары кавалеры. Әбйәлил районының Ким Әхмәтйәнов исемендәге премияһының беренсе лауреаты (1993). Баймаҡ районы һәм Баймаҡ ҡалаһының Почётлы гражданы. РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы (1958), Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1995).

1997 йылдың 24 августында хәләл ефете Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән бер үк көндә яҡты донъя менән хушлаша. Өфө мосолман зыяратында ерләнгән. Әлмөхәмәт ауылы мәктәбенә, Сибай ҡалаһының 13-сө лицейына Р. Өмөтбаев исеме бирелгән, уның музейы асылды. Сибай, Баймаҡ ҡалаларында, Аҫҡар, шулай уҡ Урал аръяғы ауылдарында уның исемендәге урамдар бар.

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йөрәк астмаһы

❖ Йөрәк астмаһы сәбәпле тын ҡыҫылғанда 2 ҡалаҡ кипкән эналек (боярышник) емешенә 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, яҡшылап төрөргә һәм 2-3 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Ашарҙан 30-40 минут алда бер йотом эсергә.

❖ Был сирҙән дауаланғанда лимон да ярҙам итеүе ихтимал. Ике лимон һәм ике баш һарымһаҡты ит турағыстан үткәреп, 1 литр ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм бүлмә температураһында 3-4 көн төнәтергә. Шунан һөҙөргә, 2-3 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Дауаны иртәнсәк ас ҡарынға 50 мл эсергә. Был йөрәк мускулын нығытыуға булышлыҡ итә.

❖ 50 грамм ваҡланған һарымһаҡҡа 250 мл араҡы һәм бал ҡушырға. Талғын утта 30-40 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр эҫе көйөнсә 1-әр ҡалаҡ эсергә. Бер әҙерләгән сара бөткәнсе дауаланырға.

❖ Ҡырылған керән һәм лимон һутын бер тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Дауаны 3 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30-40 минут алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

## Йүтәл

❖ Ҡурай еләге (малина) емешен, үгәй инә үләне япрағын, мәтрүшкә үләнен тигеҙ өлөштә алырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 20 минут төнәтергә. Бындай шифалы сәйҙе эҫе көйөнсә эсергә.

❖ 2-шәр өлөш бесәй тырнағы (алтей) тамыры һәм үгәй инә үләне япрағын, 1 өлөш мәтрүшкә алырға. 3 балғалаҡ йыйылмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә һәм һөҙөп, көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Шалфей япрағы, әнис орлоғо һәм ҡарағай бөрөһөн 1-әр өлөш, бесәй тырнағы (алтей) тамырын һәм татлы тамырҙы 2-шәр өлөш алырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көн дауамында эсеп бөтөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Ошо рәүешле Диоген Македонский тәҡдим иткән байлыҡтан баш тартҡан. Улай ғына ла түгел, философ байлыҡты яҡтылыҡҡа ҡорған сүрәтендә тип белгән.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ерәнсә сумғыс**
**(Красноносый нырок)**



Сумғыс өйрәктәр йылға өйрәктәренә ҡарағанда ҡәүҙәлерәк. Һыуҙа тәрән ултыралар. Ҡанатындағы "көҙгө"ләре аҡ, күп төрҙәрендә ҡанат киңлегендә, йәки бөтөнләй юҡ. Тәпәйҙәре артҡараҡ сығып тора, шуға ла ҡоро ерҙә насар йөрөй. Осоп киткәндә, һыу өҫтөнән байтаҡ осоп баралар. Яҡшы сумалар, тәпәйҙәре һәм ҡанаттары менән ишеп йөҙәләр. Емде лә һыу аҫтынан табалар. Сумғыс өйрәктәрҙе таныуы анһат - артҡы бармағында тиреле ялпыуыс һәм суҡышында киң "тырнаҡ" бар.

Сумғыс өйрәктәрҙең иң билдәлеһе - ерәнсә сумғыс, ул һуна өйрәк кеүек ҙурлыҡта. Ата ҡоштоң башында йөнтәҫ өлпөһө бар, шуға ла уның башы ҙур кеүек күренә. Башы, муйынының өҫкө яғы ҡыҙғылт, бөрләтәүе, түше, ҡорһағы ҡара, ҡабырғалары аҡ, суҡышы ҡыҙғылт, тәпәйҙәре ҡыҙыл. Инә ҡош ҡуңыр, сикәләре, ҡорһағы аҡһыл, башында ҡара "башлыҡ", суҡышы ҡара, уның осо ҡыҙыл, тәпәйҙәре ҡыҙғылт-ҡуңыр. Тиҙ оса, әммә бик ауыр күтәрелә. Ата ҡош яҙын шым ғына һыҙғыра, инә ҡош ҡырҡыу тауыш менән ҡарҡылдай.

Кавказ алдында, Волга дельтаһында, Урта Азия илдәрендә оя ҡора. П.П. Сушкин (1897) Шиңгәккүлдә һәм Беркаҙанҡамыш күлендә бер нисә пар ерәнсә сумғысты осрата. Ырымбур өлкәһендә был ҡоштарҙың оя ҡороп йәшәүе тураһында ғалим Ғүмәр Сәмиғуллин тарафынан билдәләнгән. Был 1992-1998 йылдарҙа була.

Беҙҙең көндәрҙә Ырымбур өлкәһенә яҡын районда, республикаҡын көньяҡ өлөшөндә ерәнсә сумғыстарҙы осоп китеп йә ҡайтып барышлай туҡтап киткәндәрен күреп ҡалыусылар бар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КӘФЕНДЕҢ КЕҪӘҺЕ ЮҠ...

**Беҙҙең эраға тиклем 356-323 йылдарҙа йәшәүсе Македония батшаһы Александр Македонский - Искәндәр Зөлҡәрнәй ярты донъяны яулағандан һуң 32 йәшендә донъя ҡуя. 33 йәше тулыуға ай самаһы, ғәрәптәргә ҡаршы һуғыш башланыуға 6 көн ҡалғас, ул мәңгелеккә күҙҙәрен йома. Йылъяҙмаларҙа теркәлеп ҡалғанса, ул үҙен һуңғы юлға ике ҡулының устарын халыҡҡа күрһәткән килеш алып барыуҙарын һорай. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа ул ҡулдарын ҡәберҙән тышҡа сығарып күмеүҙәрен үтенгән, тигән мәғлүмәт тә һаҡлана.**



Шундайын батшаның, мәшһүр ғәскәр башлығының вафатына бәйле был мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тура килеүенә шик юҡ. Әлбиттә, бының менән Македонский, ярты донъяны яулауына, олуғ шөһрәткә, иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлыҡҡа эйә булыуына ҡарамаҫтан, донъялыҡтан туплаған байлығының семтем тиклемен дә теге донъяға алып китә алмауы хаҡында аңлатырға теләгән. Ҡайҙан килгән икән иҫәпһеҙ-һанһыҙ кешеләрҙең ғүмерен ҡыйыусыға, тарихҡа исемен ҡан һәм хәрби дан менән яҙып ҡалдырыусы башкиҫәргә былдай тәрән аңлау? Төптән уйлап ҡараһаң, бары тик донъялыҡҡа, уның иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлығына сытырман йәбешмәгән кеше генә донъя менән хушлашҡанда ошондай һүҙҙәрҙе әйтә алалыр кеүек.

Хәҙерге замандың иң оҙаҡ йәшәүселәре ғүмере менән үлсәп ҡарағанда, Искәндәр Зөлҡәрнәй ни бары уларҙың өстән бер ғүмерен генә йәшәгән булып сыға. Ул 20 йәшендә, атаһы Филипп II үлтерелгәндән һуң, тәхеткә ултыра. Уға тиклем, 18 йәшенән башлап, атаһы походта сакта ил менән идара итеү эшенә йәлеп ителә. Күберәген ирен яратыпөнәп бөтмәгән әсәһе Олимпиада (иренең ҡатындары күп булыуы уны шулай көнсәл иткәндер тип уйларға урын ҡала) йоғонтоһонда тәрбиәләнгән Александр, шулай итеп, ҡалған ғүмерен 12 йыл буйына ерҙәр һәм илдәр яулап үткәрә. Ул Македония империяһы сиктәрен Кесе һәм Урта Азия, Сирия, Мысыр, Һиндостан, Фарсы ҡултығы дәүләттәрен яулау иҫәбенә тиклем киңәйтә. Ул туплаған байлығын теге донъяға алып китеүҙән мәхрүм булып ҡына ҡалмай, хатта үҙе төҙөгән империя менән дә идара итеп, башҡа хандар һәм батшалар һымаҡ, йөҙәрләгән ҡатын алып, байман булып йәшәргә лә өлгөрмәй. Өлгөрмәй генә түгел, уның былдай теләге лә булмай. Кем белә, бәлки, мәшһүр философтар Аристотель, Диоген менән аралашып йәшәгән Искәндәр Зөлҡәрнәй башҡа төрлө була ла алмағандыр.

Атаһы Искәндәрҙе Аристотелгә тәрбиәгә бирә. Искәндәр илдәр яулап походтан ҡайтҡанда һәр ваҡыт үҙенең уҡытыусыһы өсөн төрлө илдәрҙән тарихи документтар, һирәк осраусы үләндәр, бөжәктәр һәм йәнлектәр алып ҡайта. Македонский вафат булғас, ярандары иң тәүгеләрҙән уның уҡытыусыһына ябырыла. Хатта батшаны ағыулап үлтереүҙә ғәйепләп, 61 йәшлек Аристотелде батшалыҡтан ҡыуып ебәрәләр. Аристотель үҙенең уҡыусыһы үлеп бер йыл үткәнсе генә йәшәй, ауыр шарттарҙа көн итеп, 322 йылда вафат була. Аристотель тәхет янындағы күп аҡыл эйәләре кеүек, Македонский сәскөргән һайын "Йәрхәмбикалла!" тип кенә ултырмаған. Ул енеүҙәре менән маһайып, "үҙен Аммона-Ра аллаһы улы" тип атауға тиклем барып еткән Искәндәргә хәҡиҡәтте йөҙөнә бәреп әйтә торған булған, уның менән оҙайлы ҡыҙыу бәхәстәргә ингән. Уларҙың бәхәстәренең стенограммалары, әлбиттә, һаҡланмаған. Әммә үҙен Алла улы тип атар өсөн иң тәүҙә Александрҙың атаһы Филиптан баш тартырға тейеш булыуын иҫәпкә алғанда, был хаҡта Аристотель батшаға үҙ фекерен әйтмәй ҡалмағандыр.

Походта йөрөгәндә Македонский Аттика тигән урынға килгәс, унда йәшәүсе икенсе бер философ Диогендың үҙе килеп батшаға башын әйерен көткән. Ахырҙа, батша үҙе уның янына килгән. Диоген Краний тигән урында ҡояшта ҡыҙына икән. Уларҙың араһында шундай һөйләшеү булған:

- Мин бөйөк Александр батша...
- Ә мин Диоген тигән эт...
- Ә нинә һине эт тиҙәр һуң?
- Кем ашарға бирһә - шуға ҡойроғомдо болғайым, бирмәгәнгә - өрәм, уҫалдарҙы тешләйем...
- Ә һин минән ҡурҡаһыңмы?
- Ә һин ниндәйһең: яуызмы, изгеме?
- Изге...
- Изгелектән кем ҡурҡһын инде...
- Нимә теләһәң, шуны һора минән. Һорағаның мотлаҡ үтәлер...
- Кәрәкмәй, юғиһә, минә ҡояшты ҡаплайһың...

Ошо рәүешле Диоген Македонский тәҡдим иткән байлыҡтан баш тартҡан. Улай ғына ла түгел, философ байлыҡты яҡтылыҡҡа ҡорған сүрәтендә тип белгән. Диоген менән артабан һүҙ көрәштереү файҙаһыҙ икәнлеген аңлаған Македонский уның янынан китеп барған. Шул саҡ ул ярандарына тарихҡа инеп ҡалырлыҡ һүҙ әйткән: "Әгәр ҙә мин Александр Македонский булмаһам, мотлаҡ Диоген булырға теләр инем..." Әммә яҙмыштың шаяртыуымы, башҡа ғилләме, Македонский менән Диоген икеһе бер көндә беҙҙең эраға тиклем 323 йылдың 10 июнендә вафат була. Диоген, гүйә, ошо һүҙҙәре менән бөйөк батшаның бөтә киләсәген әйтеп бирә.

Үкенескә күрә, Александр Македонский, хатта үлгәндән һуң ҡулдарын күрһәтеп ҡәберенә алып барырға йәки шул рәүешле күмеүҙәрен һораһа ла, үҙенең 12 йыл буйы илдәр яулауы, байлыҡ туплауы менән үҙенән һуң донъялыҡта ҡалыусыларҙың да ғүмер ҡояшын ҡаплай. Уның тәүге ҡатыны Роксананан тыуған улы тәхет вариҫы Александр 14 йәшендә үҙенең үк хәрби башлыҡтары тарафынан үлтерелә. Ҡолбикәһе Барсинанан тыуған улы Гераклды ла шундай уҡ яҙмыш көтә. Македонскийҙың хәрби башлыҡтарына - диадохтарына батша туплаған байлыҡҡа һәм тәхеткә дәғүә итер вариҫтары кәрәк булмай. Искәндәр төҙөгән империя ул үҙе үлгәндән һуң шулай уҡ йәлап тарҡалыуға, ике, аҙаҡ, өс, дүрт өлөшкә бүленеүгә дусар ителә. Империяның Греция һәм Македония өлөшөнә хәрби башлыҡ Антигон хакимлыҡ итә башлай.

Кәфендең кеҫәһе юҡ шул. Хатта ярты донъяны яулауға өлгәшкән Искәндәр Зөлҡәрнәй ҙә уның бер семтемен алып китә алмай, вариҫтарына тапшырыу ғына түгел, уларҙың үлтерелеүенә үҙе сәбәпсе була, йәғни ҡәбере менән уларҙың ғүмер ҡояшын ҡаплай, төҙөгән империяһының һаҡланыуын тәьмин итә алмай. Шуға күрә, ғүмеренең мәғәнәһеҙ үтеүен бик һуңлап, үлер алдынан ғына аңлағанға күрә лә башта килтерелгән һүҙҙәрен әйтеп ҡалдыра. Үтә бәхетһеҙ, әммә ғибрәтле яҙмыш...

Һүҙемде йомғаҡлап, байлыҡ хаҡында бер нисә сығанаҡтан ҡыҙыҡлы фекерҙәр килтереп үтәм:

- Ғайса бәйғәмбәр үҙенең шәкерттәренә: "Һеҙгә хаҡты әйтәм: бай кешегә ожмахҡа үтеүе бик ауыр буласаҡ; тағы ла һеҙгә әйтәм: бай кешегә Аллаһ хозурына барыуға ҡарағанда, дөйәгә энә күҙәүенән үтеүе уңайлыраҡ", - тип әйткән;
- Һин байлығың менән идара ит, тик байлығың үҙең менән идара итеүгә юл ҡуйма;
- Кем байлыҡтың ҡоло, ул байлығын ҡол кеүек һаҡлай, ә кем үҙендәге ҡоллоҡто емерә, ул байлығын хужа кеүек башҡаларға тарата;
- Ваҡытлыса бирелгән әйбергә йөрәгеңде бәйләмә. Тиҙ генә беҙҙән киткән әйбер байлыҡ түгел ул;
- Байлыҡ һинә башҡаларға бирер өсөн бирелә;
- Фәҡиргә ярҙам итһәң, Аллаһ һинә ярҙам итер;
- Байлыҡ диңгеҙ һыуына оҡшаған: ни тиклем күп эсһәң, шул тиклем сарсайһың;
- Беҙ ни тиклем күп байлыҡ туплаһаҡ, шул тиклем ҡолға әүерелә барабыҙ;
- Байлыҡ беҙҙе Хоҙайҙан алыҫлаштыра. Ул беҙҙең күңелде зәғифләй, шундай ғәриплектә беҙ үҙ-үҙенә бикләнгән ҡаты, тупаҫ, һалҡын, тәкәббер, һаран кешегә әүереләбеҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

22

# Ғаиләм-кәлғәм

26-1 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай)
2024 йыл
№3 (1096)

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ТЫУЫР БАЛАЛАР ТЫУҺЫН...

**Мәғлүм булыуынса, ғаиләләрҙе яҡлау, традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен популярлаштырыу маҡсатында быйыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы иғлан ителде.**

Был эш сиктәрендә 2030 йылға тиклем демографик һәм ғаилә сәйәсәте йәһәтенән стратегик документ әҙерләү, күп балалылар өсөн берҙәм хоҡуки статусты һәм төп социаль гарантияларҙы федераль кимәлдә нығытыу, өсөнсө бала тыуғанда аҡсалата түләүҙең ғәмәлдә булыуын оҙайтыу, уны ипотеканы ҡаплауға йүнәлтеү планлаштырыла. Ә 2024 йылдағы төп бурыстар - йәш ғаиләләрҙә тәүге балаларҙың тыуыуы өсөн шарттар булдырыу, репродуктив һаулыҡты нығытыу, күп балалы һәм күп быуынлы ғаиләләргә ярҙам итеү, күп балалы ғаиләләрҙә сәләмәт тормош алып барыуҙы популярлаштырыу.

Уларҙан тыш, традицион ғаилә ҡиммәттәрен популярлаштырыуға арналған саралар ҙа бик күп булыр, тигән өмөт бар.

Ғаилә, уның әһәмиәте тураһында төшөнсәне балаға ни тиклем иртәрәк бирһән, шул тиклем отошлораҡ бит инде ул. Ошо тәрбиә етешмәйме, әммә бөгөн заман йәштәре ғаилә ҡорорға бик үк ашығып бармай. Кәләш алыуҙы йәки кейәүгә сығыуҙы бөгөн аллә ни һымаҡ күргәндәр бар. Эше, фатиры, машинаһы булған, күптән өйләнеп йәки кейәүгә сығып, ғаиләле булыр йәштәгеләрҙән: "Ни эшләп һаман кәләш алмай йөрөйһөң?"- тип һораһаң, "Ниндәй енәйәт эшләнем әле ул мин?" йәки "Кемгә ниндәй насарлығым тейҙе минең?" тип тә яуап биргеләйҙәр хатта. Тимәк, ундайҙар ғаиләле булыуҙы ниндәйҙер кимәлдә яза һымаҡ күрә.

Йәштәрҙең янғыҙ йәшәүҙе хуп күреүе Көнбайыштан да килә. Үҙебеҙҙең кинофильмдарҙың да өлөшө ҙур. Хәҙер бит ниндәй генә фильмды алма, төп геройҙарҙың барыһы ла тиерлек йә иренә, йә ҡатынына хыянат итә, алдай, икенсе төрлө тормош алып бара, йәки бер ниндәй яуаплылыҡ кисермәй, ирекле мөхәббәт менән океан аръяғындағы кеүек "матур" тормош алып бара. Бына ошондай фильмдарҙы экрандарҙан бөтөнләй алып ташларға кәрәк һәм ғаилә тормошо хаҡында, тоғролоҡ, мөхәббәт, хөрмәт, яуаплылыҡ тураһында кинолар төшөрөргә кәрәк!

Мәктәптәрҙең, юғары уҡыу йорттарының белем биреү программаларына ғаилә тормошо этикаһын индереү, унда әсәй, атай абруйы, балалар алдындағы яуаплылыҡ тураһында төплө белем биреү мөһим.

Исемле йыл күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙамды, күп балалы әсәләрҙе, атайҙарҙы бүләкләүҙе күрһәтеү менән генә тамамланмаһын ине. Ғаилә институтын нығытыуҙың яңы юлдарын табырға, аныҡ ярҙам сараларын күрһәтергә кәрәк. Шуныһы, йәштәр һаман ғаилә ҡороуҙы һуҙыр, тыуаһы балалар тыумай ҡалыр. Аллам һаҡлаһын!

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ШУНДАЙ ХӘБӘРҘӘР

## ТҮЛӘҮ АЛАСАҠТАР...



**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың әле тыумаған балалары дәүләт страховкалауы буйынса түләү алыусылар исемлегенә индерелә.** Был хаҡта Федерация Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары, махсус хәрби операция мәсьәләләре буйынса эшсе төркөм етәксеһе Андрей Турчак белдерҙе. Беренсе вице-спикер һүҙҙәренсә, дәүләт страховкалау тәртибен көйләүсе закон проектына төҙәтмәләр индерелә. Дәүләт Думаһы уны тәүге уҡыуҙа ҡабул итте.

"Бында һүҙ һәләк булған яугирҙың йөклө тороп ҡалған ҡатыны тураһында бара. Ғәмәлдәге ҡануниәт тыумаған сабыйҙарҙы дәүләт страховкалауы буйынса түләү алыусылар исемлегенә индермәй. Тейешле документтарҙы алғандан һуң 15 көн эсендә бүленергә тейеш. Әгәр ошо осорҙа бала тыумаһа, ул бындай түләүгә иҫәп тота алмай, - тип билдәләне Андрей Турчак. - Дәүләт страховкалауы тәртибен көйләүсе закон проектына төҙәтмәләр индерелә, Дәүләт Думаһы уны беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Икенсеһендә беҙ тәҡдим иткән норма хупланыр һәм яңы тыуған сабыйҙар страховка түләүҙәренә хоҡуҡ алыр тигән өмөттә ҡалабыҙ".

## РИЗАЛЫҠ КӘРӘК

**БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһы Ғаилә кодексының 51-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡараясаҡ.** Ул республика территорияһында суррогат әсәлек технологияһын ҡулланыуҙың хоҡуки мәсьәләләрен билдәләйәсәк. Закон сит ил граждандары һәм граждандарлығы булмаған шәхестәргә бындай технологияларҙы ҡулланыуҙы тыясаҡ. Бындай хоҡуҡҡа медицина күрһәткестәре буйынса йөккә уҙа һәм бала таба алмағандар эйә буласаҡ. Бының өсөн буласаҡ атай менән әсәйҙең РФ граждандары булыуы, килешеү төҙелгән осорҙа законлы никахта тороуҙары мотлаҡ. Бындай хоҡуҡ менән яңғыҙ ҡатын да ҡуллана аласаҡ. Закон айырылышыу осрағында атай-әсәйлекте таныу мәсьәләһен дә ҡарай. Айырылған осраҡта, йәки никах ғәмәлдә булмай тип танылһа, ир менән ҡатын баланың ата-әсәһе булараҡ яҙыла ала, тик бының өсөн суррогат әсәнең ризалығы һәм суд ҡарары кәрәк. Шулай уҡ ир менән ҡатын граждандарлыҡтарын үҙгәрткәндә, уларҙың береһе вафат булғанда ла суррогат әсәнең ризалығы кәрәк буласаҡ.

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ...

**Әсәлек капиталын тыуғанда уҡ Рәсәй граждандарлығы булған балаларға ғына алырға мөмкин.** Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа ошондай башланғысты ҡабул итте. Әлеге ваҡытта закон буйынса Әсәлек капиталын алыусы ла, бала ла Рәсәй граждандарлығына эйә булырға тейеш. "Ярҙам сараһын алыу өсөн бала Рәсәйҙә тыуырға тейеш. Был граждандарлыҡ тураһында закон менән билдәләнә. Мәҫәлән, әгәр ата-әсәнең икеһе лә - Рәсәй Федерацияһы граждандары йәки ата-әсәнең береһе - Рәсәй Федерацияһы, ә икенсеһе сит ил граждандары булһа, Әсәлек капиталын алырға мөмкин. Төп шарт - баланың Рәсәйҙә тыуыуы", - тип хәбәр итә Дәүләт Думаһының телеграм-каналы. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең яңы төбәктәрендә йәшәүселәр Әсәлек капиталына хоҡуҡлы, уларҙың илебеҙ граждандарлығын ҡасан алыуы мөһим түгел.

## ЕТЕМДӘРГӘ...

**Дәүләт Думаһы икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙарҙа етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың торлаҡ һатып алыу йәки ипотека кредитын ҡаплау өсөн түләүгә хоҡуғы тураһында закон ҡабул итте.** Думаның барлыҡ фракциялары депутаттары әҙерләгән төҙәтмәләргә ярашлы, етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар, 21 йәше тулғас, торлаҡ сертификатын алырға мөмкин (әгәр быға тиклем ил субъекттарында ошондай нормалар ҡаралған булһа). Шулай уҡ етем балалар - махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм үҙҙәре ата-әсә булып, Әсәлек капиталын торлаҡ һатып алыу өсөн файҙаланырға йыйыныусылар сертификат алыуҙа өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә. Тәүҙә закон проектында 23 йәш тип билдәләргә тәҡдим ителгәйне. "Торлаҡ сертификаттары етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү проблемаһын хәл итеүҙә һөҙөмтәле булыуын күрһәтте, күпселек төбәктәрҙә ошондай программалар тормошҡа ашырыла. Йәш сиген 21 йәшкә тиклем кәметеү хоҡуғы төбәктәргә етемдәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү бурысын һөҙөмтәлерәк атҡарырға мөмкинлек бирер", - тине Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин. 2022 йылда Башҡортостанда 945 етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған баланың торлаҡ менән тәьмин ителеүе тураһында яҙылғайны.

## ҺАЙ, ӘҮҘЕМДӘР!

**Өфө ғаиләләре "Бар ғаилә менән" Бөтә Рәсәй проектында әүҙем ҡатнаша. Бигерәк тә Ленин районы ғаиләләре һоҡландыра.** Социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә улар күмәкләп ял иткән фотоһүрәттәрен ҡуя һәм ғаилә традицияларымы менән таныштыра, тип хәбәр итте район хакимиәте башлығы Олег Котов үҙенең сәхифәһендә. "Бар ғаилә менән" проекты Ғаилә йылы сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Ҡатнашҡан ғаиләләр аҙнаһына бер тапҡыр төрлө эштәр башҡарырға тейеш (мәҫәлән, бергәләп киске аш әҙерләргә, музейға барырға, спорт менән шөғөлләнергә). Проектта ҡатнашыу өсөн: проекттың төркөмөнә яҙылырға; һылтанма буйынса проектта теркәлергә; эште башҡарырға һәм фотоны #всейсемьей #всейсемьей02 хештегы менән социаль селтәргә һалырға кәрәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, иң әүҙем ғаиләләр өсөн ойоштороусылар Рәсәй буйлап 100 сәйәхәт әҙерләгән.

## БАРЛЫҒЫ НИСӘҮ?

**Башҡортостанда 2023 йылдың 1 ғинуарына 17 йәшкәсә балалар һәм үҫмерҙәр һаны 899, 2 мең кеше йәки республика халҡының 22,1 процентын тәшкил иткән.** Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, балиғ булмағандарҙың 63,1 проценты - ҡала ерендә, 36,9 проценты ауылда йәшәй. Мәктәпкәсә йәштәге - 6 йәшкә тиклемге балалар балиғ булмағандарҙың 34,4 процентын тәшкил итә. "Былтыр республикала 36 213 сабый донъяға килгән. Малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда йылдан-йыл күберәк тыуа. Уҙған йылда 100 ҡыҙға 106 малай тура килгән. Яңы тыуғандарҙың дөйөм һанынан 35,1 проценты - беренсе, 33,0 проценты - икенсе, 31,8 проценты өсөнсө һәм артабанғы балалар", - тип асыҡлыҡ индерҙе статистар. 2023 йылдың башына республикала 995 ҙуллы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы, филиал хоҡуғында 279 учреждение, 471 мәктәпкәсә тәрбиә биреү подразделениеһы (төркөмө), шулай уҡ мәктәпкәсә белем биреү программалары буйынса белем биреү эшмәкәрлеген алып бармаған 12 учреждение иҫәпләнгән. Балалар баҡсаларына 220 мең бала йөрөгән. 2022/2023 уҡыу йылы башында мәктәптәрҙә, лицейҙарҙа һәм гимназияла 519,7 мең уҡыусы уҡыған, тип һығымта яһаны статистар.

## ЙӘШ СИКЛӘНМӘЙ

**Башҡортостанда балалар лагерында ял итергә теләгән уҡыусылар өсөн йәш сикләүе бөтөрөлдө.** Республика Хөкүмәтенең 2010 йылдың 15 мартындағы "Башҡортостан Республикаһында балаларҙың ялын ойоштороу һәм уларҙы һауыҡтырыу тураһында (каникул ваҡытында балаларҙың ялын ойоштороуҙан тыш), балалар ялы һәм уларҙы һауыҡтырыу ойошмаларында уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыу тураһында" 72-се ҡарарына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Документ рәсми хоҡуки мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Республиканың Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, үҙгәрештәр балалар ялы һәм уларҙы һауыҡтырыу өлкәһендәге хеҙмәттәр алыусыларҙың йәшенә ҡағыла. "Быға тиклем 15 йәшкә тиклемге балалар ғына ошондай мөмкинлектән файҙаланһа, хәҙер бөтә уҡыусыларҙың да хоҡуғы бар", - тип белдерҙеләр ведомствола. Алдан хәбәр ителгәнсә, былтыр йәй Башҡортостандың ҡала ситендәге һәм мәктәп лагерҙарында 500 мендән ашыу уҡыусы ял иткән.

✓ ***Насарлыҡтан аралайбыҙ, тип, кире мәмерйәлә йәшәтә алмайбыҙ бит инде уларҙы. Тик яҡшыны ямандан айырырға өйрәтергә һәм балалар күңел йылыһын ситтән эҙләмәҫлек шарттар тыуҙырырға тейешбеҙҙер.***

# ЯҠШЫНЫ ЯМАНДАН күңел йылыһын

**Традицион ғаилә ҡиммәттәре - сәләмәт һәм бәхетле ғаилә нигеҙе белгестәр тарафынан был күптән раҫланған инде. Халыҡтың тап ошо быуаттар буйына формалашҡан рухи ҡиммәттәре быуындар араһындағы бәйләнеште булдыра, ғаиләне, тимәк, йәмғиәтте лә нығыраҡ итә. Бөгөнгө геройҙарыбыҙ - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары Зилиә менән Айнур СИТДЫҠОВтар ҙа тап ошондай фекерҙә. Ай менән көнө генә түгел, һайлаған һөнәрҙәре лә, эшләгән урындары ла, уй-ниәттәре лә, балалар тәрбиәләүҙәге ҡараштары ла уртаҡ уларҙың.**

**‣ Һеҙ - актерҙар ғаиләһе. Актер өсөн ире йәки ҡатыны ла ошо уҡ һөнәр эйәһе булыуы яҡшымы? Ғаиләгеҙҙең барлыҡҡа килгән ваҡытын ниндәй итеп хәтерләйһегеҙ?**

**Айнур:** Башта мин ҡәйнәм менән таныштым. Өфө дәүләт сәнғәт академияһына (хәҙер институт. - **Ред.**) имтихан тапшырғанда бар абитуриенттарҙы ла бәпләп, ҡарап алып йөрөнө ул. Имтихандар төшкә тиклем, ә исемлекте кискә эләләр. Шуны көтөп йөрөгәндә уларҙың машинаһында бәлештәр ашап, сәй эсеп ултырған саҡтар ҙа булды. Ә Зилиә менән уҡый башлағас таныштыҡ, ул миңә тәүҙә артыҡ оҡшаманы. Шаталаҡ, күп һөйләй, бер урында тик тора белмәй - академияла ла башта тауышы ишетелә, аҙаҡтан үҙе күренә торғайны. Хәҙер 10 йыл ғаилә булып йәшәгәс, бының бары тик тышҡы битлек булыуын яҡшы беләм, ул ҡурҡағыраҡ, өйҙө, өй йылыһын яратҡан кеше, балалар өсөн һәйбәт әсәй.

**Зилиә:** Икебеҙ ҙә отличник инек, мине староста итеп тә һайлап ҡуйҙылар. "Отличник синдромы" тигән төшөнсә бар ҙа инде, беҙ ҙә ныҡ дөрөҫ кешеләр инек: яуаплыбыҙ, берәй нәмә килеп сыҡмаһа, ныҡ ҡайғырабыҙ, етдибеҙ. Ә актер булараҡ үҫеп китер өсөн, киреһенсә, еңелерәк, елбәҙәгерәк, шаянраҡ булырға кәрәк. Шулай бер курсты бер партала ултырып, бер-беребеҙ менән һөйләшмәй генә үткәреп ебәрҙек. Тик икенсе курста Рима Тәлғәт ҡыҙы Харисова бер өҙөктә эшләргә беҙҙе бергә ҡуйҙы. Күреп йөрөгәндер инде, ә курс дуҫ-татыу булырға тейеш. Бер нәмә лә килеп сыҡмай, ҡараңғы төнгә тиклем эшләйбеҙ. Шунда һөйләшеп, бер-беребеҙгә асылғанбыҙмы икән, өҙөк тә килеп сыҡты, беҙҙең пар ҙа барлыҡҡа килде. Шунан алып бер-беребеҙгә тағылып ҡына йөрөнөк.

**Айнур:** Ул саҡта режиссура кафедраһы бар ине, беҙ актерҙар, режиссерҙар, ситтән тороп уҡыусылар - барыбыҙ ҙа Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы Ҡасимованың уҡыусылары. Бер оҫтаның уҡыусылары булғас, бер-беребеҙгә ярҙам итәбеҙ, шуға ялһыҙ көнө-төнө уҡыу йортонда була инек. "Бер генә ғаилә тыуһа ла, тимәк, был курсты йыйыуҙың мәғәнәһе булған",- тип әйтә торғайны Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы. Ә беҙҙең курста 3 ғаилә барлыҡҡа килде, бер курсташыбыҙ параллель курс ҡыҙына өйләнде. Шулай ҙа беҙ бер йыл эшләп, шунан ғына ғаилә ҡорҙоҡ, был Зилиәнең талабы ине.

**Зилиә:** Һуң, мин бит ныҡ яуаплы кеше, уҡыған ваҡытта ниндәй өйләнешеү, тип уйланым. Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә алғастар, тағы ла яуаплылыҡ тип ҡабул иттем. Физика-математика йүнәлешендә белем алырға ниәтем бар ине, шулай ҙа актерлыҡ һөнәрен һайлағас, минең янымда сәнғәтте яратҡан, сәнғәтте мөкиббән китеп яратҡан кеше булырын белә инем. Өйҙә лә, эштә лә бергәбеҙ һәм бының ыңғай яҡтары күберәк.

**‣ Эшегеҙ өйгә эйәреп ҡайтамы? Ғәҙәттә, бөйөк актерҙарҙың балалары ла ата-әсәләренең өйҙә репетициялар яһауы тураһында телгә алыусан бит?**

**Айнур:** Мин өйҙә роль уйнау ғына түгел, уның тураһында һөйләшергә лә яратмайым. Зилиә һөйләй башлаһа ла, тыям, хатта ҡатыраҡ яңғыраһа ла: "Был миңә ҡыҙыҡ түгел", - тип әйтә алам. Былай ҙа актерҙың эше уның башында тәүлегенә 24 сәғәт буйына ҡайнай, рулдә китеп барһаң да уйлайһың, башҡа эш менән булышҡанда ла. Баш ял итергә тейеш, шуға ла мин үҙемә көсләп булһа ла өйҙә эш хаҡында һөйләшмәскә тигән талап ҡуйғанмын. Эйе, ҡайһы саҡта тел ҡысый, ролең тураһында әңгәмәләшкең килә, шулай ҙа тыйылам. Сәхнәләге үҙеңде яратма, тиһәләр ҙә, актер ул тәбиғәте менән эгоист кеше, ул үҙен дә, ролдәрен дә ярата, әммә был сәләмәт эгоизм булырға тейеш.

**Зилиә:** Балалар тыумаҫ элек спектакль, кино ҡараһаҡ та, музыка тыңлаһаҡ та был турала оҙаҡ итеп һөйләшә инек. Хәҙер инде балалар бар, донъя мәшәҡәттәре лә баҫа, икенсе ҡиммәттәргә баҫым яһайһың икән, был иһә тәжрибә һәм йәш менән килә. Әле ғаиләбеҙ шундай этапта, ҡатын-ҡыҙ һәм әсәй булараҡ, балаң ҡулдан ысҡынмаһын йәиһә иренә ҡарата мөнәсәбәтең һыуынып китмәһен тип тә уйлайһың.

Унан һуң, мин бит актерҙар ғаиләһендә үҫкәнмен. Бәләкәй саҡтан шундай хәтирәләр ҡалған: атайым менән әсәйем (Башҡортостандың халыҡ артисы Зөлфиә Хәлилова менән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азамат Хәлилов. - **Ред.**) спектакль сығара башлаһалар, ашарға бешергәндә лә, сәй эскәндә лә тик шуның тураһында ғына һөйләшә инеләр. "Мин уларға кәрәкменме ул?" - тип тә уйлай инем. Хәҙер үҙебеҙҙең балалар булғас, саҡ ҡына буш ваҡытымды ла уларға бағышларға тырышам. Бәләкәйерәк саҡтарында ҡәйнәмдәр, апайымдар алып ҡала ине, хәҙер үҫтеләр, улыбыҙ 1-се класта уҡый, ҡыҙыбыҙға 4 йәш. Уларҙы йышыраҡ театрға үҙебеҙ менән алабыҙ. Сөнки бала саҡтан беләм: асыҡһаң да, арыһаң да, атай менән әсәй эргәһендә яҡшыраҡ. Балалар үҫкән ваҡыт бер мәл генә бит ул, иң мөһиме, сәләмәт булһындар, һау баланы ҡарауҙың бер ауырлығы ла юҡ.

**‣ Бала тәрбиәһенә килгәндә, һеҙҙең ғаиләлә ул нимәгә нигеҙләнгән? Бик еңел булмаған ваҡытта йәшәйбеҙ, ситтән килгән йоғонтоларҙан да тулыһынса аралап булмай бит баланы?**

**Зилиә:** Китапта бер төрлө яҙыла, кеше бер төрлө һөйләй, һеңлендә-ҡустыңды үҫтерешәһең, әммә үҙ балаңды тәрбиәләү бөтөнләй икенсе. Бала менән бергә үҙең дә әсәй-атай булараҡ үҫәһең. Берәй нәмә килеп сыҡмаһа, төшөнкөлөккә бирелеп тә китәм, шул саҡта Айнур мине: "Идеаль ата-әсә лә, идеаль тәрбиә өлгөһө лә юҡ", - тип йыуата.

**Айнур:** "Шәп атай менән әсәй ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға яуап биргән китап бер китапхана ла, бер мәсеттә лә, ғөмүмән, бер ерҙә лә юҡ, ул яҙылмаған, яҙылмаясаҡ та. Эсмәгән-тартмаған, яҡшы вазифала булған кешеләрҙең сит илдәрҙә генә уҡытҡан балаһы ла наркоман, енәйәтсе булып китеүе бар. Шул уҡ ваҡытта, балаһын ҡарамаған кешеләрҙең дә балалары аслы-туҡлы, яланғас, бер-береһен ҡарашып үҫеп етеп, матур итеп йәшәгәндәре бар, етмәһә, ата-әсәһен дә ҡәҙер итеп торалар. Ҡайһы атай-әсәй яҡшы һуң? Шуға ла әҙер ҡағиҙәләр юҡ.

Миненсә, хәҙер бала культы заманы, ата-әсәләр нык әпүәләп үҫтерә балаһын. Уның балаһы иң яҡшыны, уйынсыҡтары фатирға һыймай, кейем тиһәң, уныһы бигерәк ҡыҙыҡ хәл: 25 градус һыуыҡ өсөн бер куртка, 20 градус һыуыҡ өсөн - икенсе. Уйлаһаң, ошо рәүешле ата-әсәләр үҙ-ара кем яҡшыраҡ тигән бәйгелә ярыша. Балаға былар түгел, иғтибар һәм һөйөү генә кәрәк. Һәр нәмәлә алтын урталыҡ мөһим, нык ҡурсалауҙың да кире эҙемтәләре бар бит. Мәҫәлән, мин, атай ҡатыраҡ булырға тейеш, тигән ҡараштамын. Шул уҡ телефонға килгәндә лә, минең телефонға тейергә ярамағанлыҡты улар белә, теймәйҙәр ҙә, мин уны бөтөн ерҙә лә ҡалдырып йөрөй алам. Тыйыуҙарға килгәндә, шуны ла әйтәйем, беҙ шул уҡ телефонды тыйһаҡ та, тыймаһаҡ та, эволюция бара, беҙҙең ейәндәр был цифрлы технологияларҙы ҡуллана белеү йәһәтенән тағы ла замансараҡ буласаҡ. Насарлыҡтан аралайбыҙ, тип, кире мәмерйәлә йәшәтә алмайбыҙ бит инде уларҙы. Тик яҡшыны ямандан айырырға өйрәтергә һәм балалар күңел йылыһын ситтән эҙләмәҫлек шарттар тыуҙырып, уларҙы яратыуыбыҙҙы, яҡшылыҡ ҡына теләүебеҙҙе күрһәтергә тейешбеҙҙер.



Улымды мин ҡыҙыма ҡарағанда ла нығыраҡ йәлләйем, әммә уға ҡарата йомшаҡлыҡ күрһәтә алмайым, юғиһә, унда ир-егет холҡон тәрбиәләп булмаясаҡ. Ә ҡыҙ инде башҡа тарих. Ул мине баштан уҡ ҡоралһыҙландырҙы. Уға ҡарата бер ниндәй талаптар ҙа, ҡағиҙәләр ҙә эшләмәй. Үҙең генә хәл ит тә ҡуй инде, тием күпселек осраҡта Зилиәгә уның ҡылығына-холҡона ҡағылышлы хәлдәр тыуғанда. Ә әсәләре уларҙан хисен йәшермәй. Улар ҙа миңә әсәләре аша күпер һалырға тырыша күп осраҡта.

**‣ Ә борондан килгән йолаларға, мәҙәниәткә балаларҙы нисек йәлеп итәһегеҙ, башҡортса аралашыуҙарын талап итәһегеҙме?**

**Зилиә:** Баланың теле туған телендә асылһын, тигән талабым булды. Айбулат 3 йәшкә тиклем тик башҡортса һөйләште, теле лә иртә асылды. Уның менән әхлаҡи тәрбиә өлгөләренә нигеҙләнгән совет йәнһүрәттәрен дә ҡараныҡ, классик музыка ла тыңлаттым. Бының үҙенең файҙаһы бар, ул бөгөн үҙенең фекерен туплап, уйлап, үҙ ҡарашын әйтеп бирә алған бала. Өйҙә бала менән шөғөлләнәләр икән, балалар баҡсаһында, мәктәптә лә улар донъяға киң ҡарашлы булыуы менән айырылып торалар һәм бөгөн балаһының рухи үҫешенә атай-әсәйҙәр күп көс һала. Тик улыбыҙ барыбер бөгөнгө заманда ниндәй телдең донъя аренаһында кәрәгерәк булыуын самалап, инглиз, ҡытай теле менән ҡыҙыҡһына, милләт йәһәтенән дә үҙенең кемлеген асып-ярып күрһәтеп йөрөмәү яғында.

Ә Айназа тыуғанда Айбулат балалар баҡсаһынан өйгә рус телен "алып ҡайтҡайны" инде, шуға беҙгә уны башҡортса ғына һөйләштереү ауырыраҡ булды. Әммә унда башҡорт мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү көслө. Был нисектер гендар менән бирелгән һөйөү. Телевизорҙан "Байыҡ"тың бер тапшырыуын да ҡалдырмай. "Бейеүгә алып бар мине", тигәс, заманса бейеү түңәрәгенә яҙылғайныҡ, "Ҡасан башҡортса бейейбеҙ?" тип һорай. "Юҡ, миңә бындай бейеү кәрәкмәй", - ти. Уның бөтөн яңы нәмәгә лә бер генә һорауы бар: "Ә был башҡортсамы? Башҡорттоҡомо?" Бына быларҙы беҙ уға өйрәтмәнек, талап та итмәнек, улар уның күңелендә.

Йолаларға килгәндә, әсәйемдең яғынан туғандарыбыҙ менән нык аралашып йәшәйбеҙ. Үҙебеҙҙең генә йолалар бар, табын ҡороп ултырыу ғына түгел, эштәр, өмәләр ҙә уртаҡ. Ғаилә, туғанлыҡ культы тиер инем быны. Үҙебеҙҙең генә түгел, балаларыбыҙҙың да ошо тормошта ҡайнап йәшәүе уларҙы тәрбиәләйҙер тием. Айнурға ла ҡыҙыҡ был, әҙер: "Әйҙә, һеҙҙең яҡҡа ҡайтайыҡ", - тип кенә тора.

**Айнур:** Өләсәйҙәре хәҙер ун йыл инде юҡ, әммә ул һаман да шул үҙенең йортонда йәшәй кеүек. Күҙ алдына килтерегеҙ, йәкшәмбе таралышалар ҙа, кесе йома яңынан шул йортҡа йыйыла башлайҙар. Бер кем дә, үҙ өйөмдә генә кешенән ял итәйем, тимәй, улар быға шул тиклем өйрәнгән. Бынан тыш, уларҙың яртыһы менән беҙ Өфөнөң бер районында йәшәйбеҙ һәм аҙна эсендә тағы бер нисә тапҡыр күрешәбеҙ. Ҡайнымдың бажаларына мин дә бажа бит инде. Ҡайным: "Ул - миңә бажа, ул һиңә лә бажа, ә һин миңә кем?" - тип шаярта торғайны. Хәҙер инде уның урынына ҡалған кеүекмен, минең менән уға ҡараған кеүек йы-

# АЙЫРҺЫНДАР,

## ситтән эҙләмәһендәр

лы мөнәсәбәттәләр, үҙ итеп торалар. Ҡунаҡсылдар, ҡоймаҡ ҡойһалар, ярты ауылды саҡыралар әле сәй эсергә. Башҡортлоғондо, милләтеңдә һаҡлау туғанлыҡ аша һалына. Телең дә шунда, мәҙәниәтең дә, йолаларың да, иң мөһиме, бер кем дә һине унда көсләп башҡортса һөйләштермәй, башҡортса йырлатмай-бейетмәй, быны һин үҙең теләп башҡараһың.

**Халыҡтың "һөйкөмлө һөйәк" тигән әйтеме бар. Зилиә, атайығыҙ, Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт театры актеры Азамат Хәлилов тап шундай һөйкөмлө һөйәк, Аллаһ тарафынан күп ҡырлы талант менән бүләкләнгән актер булды. Атай, ҡайны, олатай булараҡ ул ниндәй ине?**

**Зилиә:** Ул беҙҙе, ике ҡыҙын, ныҡ иркәләтеп үҫтерҙе, быны мин ул үлгәс кенә аңланым. Иртә менән гаражына китһә, "Атай, беҙ йоҡонан торғанда өйҙә бул, йәме", - тигән була торғайныҡ. Белмәгән эше булманы, әсәйем дә: "Азамат, шул боҙолған, был эшләмәй, бынауҙы ғына ялғап, тегеп һ.б. бир әле", - тип кенә әйтә лә, атай йүнәтеп тә ҡуя. Кейәүгә сыҡҡас, фатирҙа берәй нәмә ватылһа, Айнурға әйтәм дә, ул, мин быны эшләй белмәйем, тиһә, ныҡ аптырай торғайным. Атайым бешерергә лә ярата ине, ҡоймаҡ ҡоя, бәлеш бешерә, бынан шундай кинәнес ала ине. Бөтөн фәндәрҙән дә өйгә эштәрҙе эшләште. Эске донъяһы шул тиклем бай, әммә тормошта ныҡ ябай булды, уны кешеләр ярата ине. Айбулатҡа аҙ ғына олатай һөйөүе эләгеп ҡалды.

**Айнур:** Ҡайным менән ысын ирҙәрсә, ныҡ яҡын мөнәсәбәттә булдыҡ. Ул һине тулыһынса аңлай торған, ысынлап ғәжәйеп кеше булды, уны урманға ғына түгел, Марсҡа сығарып ебәр, билендә балтаһы булһа, унда ла үҙенә ризыҡ табып, хатта йәшәр өсөн йортон да һалып ҡуйыр ине. Һунарҙы, балыҡҡа йөрөүҙе яратты. Минең үҙемдең атайым төҙөүсе, ул бындай эштәр менән ҡыҙыҡһынған кеше түгел. Ә егет кешенең мылтыҡ тотоп һунарға барғыһы килә бит инде. Бер шулай ҡайныма һунарға барайыҡ, тейем. Шул мәлдә ул ауылда йорт һалыр өсөн ер алғайны, киттек шунда, бер юлы һунарға ла сығырға тейешбеҙ. Ер ҡаҙабыҙ, көн үтеп бара, минең уйҙа һунар ғына, күңелдә ҡомар уянып китте бит инде. Ауыл тирәләй бәләкәй генә күлдәр күп. Кис булды, беҙ балта, ау алдыҡ та, күлгә киттек. Талдан 5-6 метрлыҡ сыбыҡ ҡырҡып алды, ауҙы күлдең бер яғына нығытты ла, миңә шул сыбыҡ менән һыуға һуғырға ҡушты. Өйрәк ҡапыл ғына һауаға күтәрелмәй икән, һыуҙың өҫтөнән осоп бара башта, өркөткәс, ул шул ауға осоп барып ҡына үҙе эләкте лә ҡуйҙы. Мылтыҡтан атабыҙ икән, тип ымһынған миңә: "Бына һунар һиңә, - ти. - Мылтыҡ менән шатыр-шотор килергә кәрәк, былай атмай ғына, тауышһыҙ һунар итергә була", - ти. Шулай мут та ине.

**Башҡорттарҙа ҡәйнә менән кейәү мөнәсәбәте лә үҙенсәлекле, ҡәйнә кейәүен ҡыҙына ҡарағанда ла нығыраҡ ярата кеүек хатта, уға һүҙ әйтеү түгел, насар ҡараш та ташламай...**

**Айнур:** Быныһы ла дөп-дөрөҫ. Минең ҡәйнәм мировой кеше. Ул бар кешене лә "майлай" белә, бына был холҡо ҡыҙына бөтөнләй күсмәгән. Ҡәйнәмдең игеҙәге Гөлфиә апайға оҡшаған Зилиә. Беренсе тапҡыр Дәүләкәнгә картуф ултыртырға ҡайттыҡ та, 12 кеше көрәк тотҡан, 12 кеше орлоҡ һалып йөрөй һәм шулар араһында бер ҡәйнәмдең генә көрәге лә, биҙрәһе лә юҡ, ҡул суҡтарын берерһенә һалып ҡына алған да, йә тегендә береһен һөйләндерә, йә бында икенсеһен көлдөрә. Ул һөнәрҙе шул тиклем дөрөҫ һайлаған, ул бар булмышы менән артист. Шуға ла уның менән бик еңел, беҙгә килгәндә уның менән икебеҙ генә сәй өҫтәле артында оҙаҡ итеп сөкөрләшеп ултырырға яратабыҙ.

**Айнур, һеҙ Өфө егете, атай-әсәйегеҙ актер булып китеүегеҙҙе нисек ҡабул итте?**

**Айнур:** Мәктәптә уҡығанда йырлата торғайнылар, конкурстарҙа ла ҡатнаштым, урындар ҙа алдым, шуға ла мине сәнғәт училищеһына бар тип ҡоҙалай торғайны уҡытыусылар. Әсәйемә оҡшаны был тәҡдим, беҙҙең кеүек төҙөлөштә йөрөмәҫһең, шунда әртис ҡыҙына өйләнерһең, тине. Әйткәне тормошҡа ашты ла.

Сәнғәт мәктәбендә баян класын тамамлап, Юғары хәрби оркестр училищеһына барайыммы икән, тип йөрөгәндә, әлеге лә баяғы әсәйем, Өфө дәүләт сәнғәт академияһына барып ҡара, тине. Шулай актер булып киттем инде.

**Зилиә:** Өйләнешкәс, беҙ 4 йыл ҡәйнәмдәр менән йәшәнек, шул ваҡытты мин һағынып иҫкә алам. "Нисек ҡәйнә менән йәшәйһең?" - тип аптырағандар булды, уларға: "Ҡәйнә менән йәшәүе әсәй менән йәшәүгә ҡарағанда ла рәхәтерәк", - ти торғайным. Әсәй барыбер талапсаныраҡ. Ҡәйнәм минән уңғаныраҡ, минән дәртлерәк, шәберәк. Беҙ унда ҡыҙ менән егет шикелле йәшәнек, рәхәтләнеп эшкә барабыҙ, ҡәйнәм менән һөйләшмәйенсә генә эштәрҙе лә бүлешеп алдыҡ. Ул миңә ҡыҫылманы, мин - уға.

Ҡайным инде тик минең ыңғайға ғына тора. Беҙ йыл һайын Яңы йылға шыршы ҡуя торғайныҡ. "Ҡасан шыршы ҡуябыҙ", тип һорайым Айнурҙан йәшәй башлаған ғына йылда. "Ниндәй шыршы, бында балалар юҡ та инде", - ти ул миңә. "Нисек инде, атайым беҙгә йыл һайын шыршы ҡуя", - тейем. Ҡайным ошоно ишетеп торған да, миңә шыршы алып ҡайтты. Был хәҙер традиция, йыл да улар шыршы ҡуя.

**Айнур:** Ике яҡтан да атай-әсәйҙәрҙең беҙҙе айырым ғаилә итеп ҡарап, ҡыҫылмаҫҡа аҡылдары етте. Барлыҡ бәләләр шул артыҡ ҡыҫылыуҙан килеп сыға. Бер ҡыҙыҡ булды. Өйләнештек тә, бер-ике ай үттеме икән, икебеҙ һүҙгә килешеп, Зилиә үсегеп тышҡа сығып китте. Әсәйемдәр мине уның артынан сығарып ебәрҙе, беҙ бергә ҡайттыҡ. Ҡараһам, әсәйем ҡәйнәмә шылтырата: "Тәк, килегеҙ, былар талаштылар бында, шулай-шулай". Артыҡ бер нәмә лә булманы, әммә ул уны шундай итеп тасуирланы, ҡайным менән ҡәйнәм осоп килеп еттеләр. Ултырҙыҡ, әсәйем һөйләй, шулай иттеләр, былай иттеләр, ти. Ҡайным Зилиәнән һорай: "Кейәүгә мин һине көсләп бирҙемме?" "Юҡ". "Әсәйең көсләп бирҙеме?" "Юҡ". "Айнур, һине көсләп өйләндерҙеләрме?" "Юҡ", - тием. "Был беренсе һәм һуңғы тапҡыр булһын", - тине ҡайным. Ҡәйнәм һүҙҙе шаяртыуға борор өсөн нимәлер әйтеп ебәрҙе, шуның менән үтеп тә китте. Әммә был беҙгә һабаҡ булды. Башҡа уларҙы борсолорлоҡ хәлгә ҡуйғаныбыҙ юҡ.

**Быйылғы йылды Рәсәй Президенты Ғаилә йылы тип иғлан итте. Нимә көтәһегеҙ был йылдан, ғөмүмән, был өлкәлә хөкүмәт тарафынан нимәгә иғтибар булырға тейеш?**

**Зилиә:** Заманы шулай, бөгөн бер баланы үҫтереү ҙә күп сығымдар талап итә. Мин инде, исмаһам, белем биреү бушлай булһын ине, тейем, сөнки әле лә барлыҡ түңәрәктәр, секциялар түләүле, был аңлашыла, мәғариф усаҡтары ла баҙар мөнәсәбәттәренә ҡулайлашырға, нисектер аҡса эшләргә тырыша. Ә юғары белем биреү ниндәй хәлгә тороп ҡалыр, белеп булмай. Күп кеше бала табыр алдынан ошоларҙан да ҡурҡалыр.

**Айнур:** Уйлап ҡараһың, ситтән көтөп кенә ултырып булмай. Тиҙерәк донъяға тыныслыҡ ҡайтһын. Илемде яратҡан кеше булараҡ, төрлө яҡтан уны тарҡатыу булмаһын, тип теләйем. Йыл нисек аталһа ла, кешенең тапҡан аҡсаһы йәшәренә етергә тейеш. Ошо ябай ғына талаптарын хәләл көсөн түгеп тапҡан килеме ҡаплай ала икән, уның бала тәрбиәләргә лә, уларҙы рухлы итеп үҫтерергә лә көсө һәм теләге буласаҡ.

Шулай уҡ дәүләт тарафынан ниндәйҙер ярҙам, пособиелар бар икән, күптәр уны юллап та йөрөмәй. Бына беҙ, мәҫәлән, ваҡытында республикала беренсе балаға 300 мең һум бирелгән саҡта уны алып ҡалдыҡ. Театрҙа эшләгән өсөн биргәндәрҙер, тип һөйләнеләр. Юҡ, бары тик документтар йыйҙыҡ та, биреп ҡараныҡ һәм үттек тә. Шуға ла үҙегеҙ ҙә битараф булмағыҙ, шул уҡ ваҡытта ситтән ярҙамға ғына ышанып ултырмағыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙенә тулыһынса бағышлауҙы талап иткән һөнәр һайлауҙарына ҡарамаҫтан, ғаиләһенә, балаларын үҙ милли рухыбыҙҙа тәрбиәләргә ваҡыт табыуҙары менән маҡтауға лайыҡ бөгөнгө геройҙарыбыҙ. "Театр ул беҙгә тиклем дә йәшәгән, унда алыштырғыһыҙ кеше юҡ, шуға ла эш тип кенә йәшәргә ярамай", - тигән һүҙҙәре менән дә килешмәйенсә булмай. Шулай ҙа уларға йәшәйештең бөтөн өлкәләрендә лә ҙур уңыштар теләйек. Ғаилә йылы беҙҙе улар кеүек матур ғаиләләр менән күберәк таныштырыр әле, шөкөр, баш ҡала шарттарында ла шундай башҡорт ғаиләһе ҡороп йәшәүселәр тураһында йыш ишетеп торабыҙ. Иң мөһиме, яңы йылдар матур яңылыҡтары менән килһен!**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# НИНДӘЙ АҘЫҠ АШАТЫРҒА?

**"Балам насар ашай. Ниндәй кәңәш бирерһегеҙ икән?" тип шылтыратҡайны телефондан бер йәш әсә. Бер аҙ кәңәштәр биргәйнем. Әле рәхмәт әйтеп тағы шылтыратты. "Балам һауығып-матурланып китте. Рәхмәт", ти. Ашауға сибек балаһы менән яфаланған әсәйҙәргә ярҙамға гәзит биттәре аша кәңәштәремде яҙырға булдым.**

Бала, ғәҙәттә, тәм-томға әүәҫ. Был әүәҫлекте ваҡытында сикләмәһәң, әлбиттә, уның ашҡаҙанына зыян буласаҡ, сөнки тәм-томдо саманан артыҡ ашатыу уның башҡа аҙыҡтарға тартымын кәметә. Билдәле булыуынса, бала организмы үҫешһен өсөн ризыҡтың һәр төрлөһө, бигерәк тә туҡлыҡлыһы, туйымлылығы юғары булған аҙыҡ кәрәк. Ундайҙарға икмәк, айырыуса ҡара икмәк, һөт аҙыҡтары, һәр төрлө ярмаларҙан бешерелгән бутҡа, картуф, йәшелсә, еләк-емеш, һурпа, талҡан, буҙа, емеш-еләк кеҫәле һәм башҡа ошондай тәбиғи аҙыҡтар инә. Ашауға ҙур иғтибар биргән әсәйҙәр, әлбиттә, һәр ваҡыт консерва, пакеттағы ҡаты-ҡото, тәм-том, ярым бешерелгән аҙыҡ, колбаса ашатыуҙы ныҡ сикләй. Бала, мәҫәлән, бутҡа ашауға әүәҫ түгел икән - ни эшләргә?

Үҙ тәжрибәмдән сығып, бер нисә кәңәш бирмәксемен. Бутҡаны, бигерәк тә һоло ярмаһыныҡын, бала ихлас ашамай. Шуның өсөн мин тәүҙә бутҡа бешереп, аҙ ғына он һәм йомортҡа ҡушып ҡоймаҡ итеп ҡоям. Ә ҡоймаҡты һәр бала ихлас ашай. Тәмен тойоп, ҡабул иткәс, аҡрынлап ҡына бутҡаға күсерәм.

Тағы бер миҫал. Ашҡаҙаны туҡтауһыҙ ауыртҡан бер баланы ҡарарға тура килде. Усы тулы төймә дарыу. Сәғәткә ҡарап ҡына әсәһе әйткәнсә дарыу эсә. Буҙа бешерҙем - эсмәй. Бер балғалаҡ ҡына буҙа алдым да: "Тәмләп ҡара әле. Тел осона ғына һал. Хәҙер дарыуыңды ялап ҡара", - тим. "Уны яларға ярамай. Әсе. Йоторға ғына кәрәк", - ти бала. "Ә ашҡаҙаныңа ниндәй дарыу эләккәнен белергә кәрәк бит. Ялап ҡара", - тип ныҡышам. "Ныҡ әсе". "Ә буҙа нисек һуң?" "Ул әсе түгел", - ти бала. "Ул да дарыу бит. Ашҡаҙаныңа файҙалы", - тим ышаныслы итеп. "Буҙа эсһәм, был дарыуҙы эсмәһәм дә яраймы?"- тип йәнләнеп китә бала. "Ярай". "Атыу, буҙа эсәм. Күпме эсергә ярай?" "Күпме теләһәң - шул тиклем". Һөҙөмтәлә ул малай көнөнә 4-5 стакан буҙа эсә башланы. Дарыу кәрәкмәне лә. Бына алтынсы йыл инде ул ашҡаҙан ауырыуы менән яфаланмай.

Мин врачтар тәғәйенләгән дауалау сараларын инҡар итмәйем. Әммә шулай ҙа баланың ашҡаҙанын бәләкәйҙән дарыу менән боҙмау, ә аҙыҡҡа нығыраҡ баҫым яһау яғындамын. Ауырыу аш менән инә, аш менән сыға, тиҙәр. Баланың йәшенә ҡарап, аҙыҡ төрөн һайларға кәрәк. Күберәк тәбиғи ризыҡҡа мөрәжәғәт итеү отошло. Бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән һәм етештерелгән аҙыҡ файҙалы. Мәҫәлән, йогурттың ни дәрәжәлә файҙалы булыуын әйтә алмайым, ә шулай ҙа йәйге айҙарҙа - яландағы, туғайҙағы, баҡсалағы еләк-емеште, ҡышын туңдырылған емеш-еләкте кефирға йәки ҡатыҡҡа һалып һәйбәтләп татытып, өй йогурты, башҡортса әйткәндә, емешле ҡатыҡ яһап биреү күпкә отошло.

Икмәк ашамаған балалар ҙа осрағылай. Йоҡа ғына киҫелгән телемгә йоҡа ғына май яғып, баланың үҙенә: "Әйҙә, үҙеңә торт яһап аша әле", - тип, икмәк өҫтөнә емеш-еләк һалдыртып алдаштырһаң, бер нисә телем икмәк ашалғанын һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Ашауға сибек баланы шулай уҡ аш-һыу әҙерләшергә ылыҡтырып, үҙенән бешертеп, үҙе бешергән аҙыҡ менән үҙен һыйлау ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә. Бала берәй ере ауыртыуға һылтанһа, "тап ана шул ауыртҡан еренә дауа булырлыҡ" аҙыҡ тәҡдим итергә кәрәк: "Һин арыш икмәге ашамайһың бит. Ә унда В витамины шул тиклем күп, ә был витамин теш һыҙлауын баҫа ла инде", - тиһең. Йәки: "Бына һөт эс әле. Уның өҫтөндә генә әллә күпме А витамины. Тамаҡ ауыртыуың бөтәр. Ә һөттөң төбөнә шәп йүгертә торған витаминдар йыйылған. Картуфты ҡабығы менән аша. Унда бер ниндәй дарыу менән алмаштырып булмай торған витаминдар була. Ул кешенең йөрәгенә файҙа. Йөрәгең һау булһа, көслө булаһың, ә көслө кеше бер нәмәнән дә ҡурҡмай". Һәм башҡа шундай алдаштырыуҙар табырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балам ашамай, ашатып булмай, тип, зарланыу дөрөҫ түгел. Һау бала ашай ул. Тик сирле баланың ғына ниндәйҙер аҙыҡтан баш тартыуы ихтимал, әммә бында һүҙҙе сәләмәт балаларҙың туҡланыуы тураһында алып барҙыҡ.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ *Ә балаларының ысынлап та бәхетле булыуын теләгән ҡәйнә бәхәсле мәлдәрҙә, киреһенсә… кейәүен йә киленен яҡлашырға тырыша! Һис юғында, нейтраль позиция ала.*



ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

# ҒӘЗИЗ БАЛАҢ...

## ике ут араһында ҡалмаһын



**Бала сағымда "Морозко" тип аталған төҫлө әкиәт-фильмды ҡарағаным хәтеремдә. Яңы йыл байрамы алдынан әле булһа йыш ҡына күрһәтәләр уны. Шул фильмдағы уҫал үгәй әсәне ауылыбыҙҙағы бер еңгәйгә оҡшата инем…**

Хисмәтулла ағай менән Мәйсәрә еңгә беҙҙең күршелә генә йәшәне (исемдәр үҙгәртеп яҙылды). Дүрт балалы шул ғаиләнең тормошон бер аҙ бәйән итмәксемен. Оло ҡыҙҙары Рәймәнең әсәһе тарафынан гел генә ҡыйырһытылып йәшәүен күреп, йәлләй торғайным. Әле кескенә булыуына ҡарамаҫтан, бәләкәй ҡусты-һеңлеләрен тәрбиәләүҙе өлөшләтә үҙ иңенә алған был ҡыҙ эшкә бик егәрле булып хәтеремдә ҡалған. Ә Мәйсәрә еңгәнең уҫаллығын бер нисек тә башыма һыйҙыра алманым. Үҙемдең йомшаҡ күңелле, һәр саҡ яғымлы әсәйем менән сағыштырып ҡарағанмындыр инде уға. Рәймә, һирәгерәк булһа ла, беҙҙең араға уйнарға килгеләй торғайны, әммә, әсәһе урам тышына сығып, әсе тауыш менән ҡысҡырыуы була, үҙенең исемен әллә ҡайҙан ишетеп, ҡыҙ шунда уҡ йүгереп ҡайтып китә. Минең менән йәштәш булған был һылыу ҡыҙҙы йыш ҡына илатып, сәсенән тартҡылап, ҡаҡҡылап-һуҡҡылаған әсәһе, ысынлап та, боронғо әкиәттәрҙәге әлеге персонаждарҙы хәтерләтә ине шул. Мөләйем йөҙлө Рәймәнең оҙон керпектәре иламаған ваҡытта ла сыланған, хатта көлгән мәлдәрендә лә матур һоро күҙҙәре йәш менән мөлдөрәмә тулы һымаҡ тойола. Урам буйлап илай-илай, һағышлы, үҙенсә генә бер көйгә һалып: "Әсәйем әлләғайҙа, әсәйем әлләғайҙа, әсәйем әлләғайҙа..." - тип, бер туҡтауһыҙ ҡабатлап, беҙҙең өй тапҡырынан үтеп барғанын күҙ алдыма килтерһәм, әле булһа күңелем тула. Һуңғараҡ уның ысынлап та үгәй ҡыҙ булыуы, үҙ әсәһенең башҡа ауылда йәшәүе хаҡында белдем. Бәғзеләр өсөн фәһем йә ғибрәт булырлыҡ ошо ғаиләнең тарихын да аҙағыраҡ ишеттем.

Хисмәтулла ағай йәш сағында Нәжиә исемле бер матур ҡыҙ менән ятытышып өйләнешкәндәр. Әммә йәштәрҙең ҡауышыу шатлығы оҙаҡҡа бармай. Йорт хужабикәһе Бәҙрикамал әбей тәүге көндәрҙән үк килененең ниндәй ҙә булһа етешһеҙлеген табырға тырышҡан, уға һәр саҡ иҫкәрмәләр әйтеп, хатта йыш ҡына әрләшеп, шау-шыу күтәрер булған. Рәймә исемле ҡыҙ балалары тыуғас та бер өй эсендә йәшәгән был ғаиләгә тыныслыҡ килмәй. Хисмәт кәләшен яҡлашырға баҙнат итмәй, ятраҡан әсәһенә ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтә алмай, хатта әсәһенең һүҙенә төшөп, ҡайһы берҙә ҡатынына екеренергә лә тартынмай башлай. Ҡәйнә йортондағы шул тормошҡа түҙеп тора алмаған Нәжиә еңгә ауылына ҡайтып китергә мәжбүр була. Ә ике йәшлек Рәймәне "Үҙебеҙ ҡарап үҫтерәсәкбеҙ", тип, әсәһенә бирмәйенсә алып ҡала Хисмәт ағай. Оҙаҡламай был ағай Зөләйха исемле икенсе бер апайҙы кәләш итеп ала. Әммә уныһы ла ҡәйнә менән һыйыша алмай, айырыла. Һәм, ниһайәт, ошо ғаиләгә Мәйсәрә еңгә килен булып төшә. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, инде ике ҡатын айырып өлгөргән кешегә тормошҡа сығырға баҙнат иткән был килен үҙе эшкәлә егәрле, шул уҡ ваҡытта ярайһы ғына ҡыйыу, телгә лә сос булып сыға. Бәҙрикамал әбей хаҡында алдан ишетеп йөрөгән, шунлыҡтан, һәр төрлө ҡаршылыҡтарға ла әҙер булғандыр, моғайын, был еңгә. Оҙаҡламай, ҡәйнәнең әре менән осраша башлағас, уның һәр "һөжүмен" ярайһы ғына уңышлы итеп кире ҡағыуға, бәғзе ваҡыт хатта "контратакаға" күскеләүгә лә өлгәшә. Халыҡта әйтмешләй, "шынаны шына менән һуғып сығарыуға" ирешә йәш килен. Көнө буйы совхоз эшендә булған Хисмәт ағай уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен әллә ни күрмәй йөрөһә лә, Бәҙрикамал әбей улына ошаҡлашҡандыр, моғайын... Тик инде ике ут араһында ярайһы ғына "сыныҡҡан" Хисмәтулла был кәләште ҡулынан ысҡындырмаҫҡа ҡарар итә, күрәһең, матур ғына итеп һөйләшеп, әсәһен тынысландырырға ла өйрәнеп ала. Өр-яңынан йорт һалып, әле ярайһы ғына "шәп" әбейҙең яңғыҙын ҡалдырып, башҡа сығып, был ғаилә үҙ-ара татыу ғына йәшәй башлай. Тағы өс балалары донъяға килә... Улының ғаиләһен болғарға "ҡулы ҡысытҡан" Бәҙрикамал әбей, әленән-әле уларға инеп, килене менән һүҙгә килешеп торһа ла, Хисмәтулла ағай хәҙер инде быны бөтөнләйгә "күрмәй". Мәйсәрәһенең унһыҙ ҙа бирешмәйәсәген аңлаған ир, әсәһе ни генә һөйләһә лә, уның һүҙенә иғтибар итмәй. Ғәзиз балаларынан да айырылғыһы килмәгәндер, ахырыһы...

Бәләкәй булыуыма ҡарамаҫтан, ярайһы ғына зирәк малай булғанмындыр инде: уларҙың бына шулай йәшәп ятҡан мәлендә булған бер һағышлы эпизодты һөйләгәндәрен асыҡ ҡына иҫемдә ҡалдырғанмын. Бер саҡ Хисмәтулла ағай менән Мәйсәрә еңгә ниндәйҙер бер ауылға ҡунаҡҡа саҡырыла. Ана шул ҙур мәжлестә уларға был ағайҙың тәүге кәләше Нәжиә менән бер өҫтәл артында ултырырға тура килә. Йыр-моңға оҫта булған Нәжиә шунда бер йыр йырлаған, имеш. Ошо хаҡта һөйләгән апай шул йырҙы йырлап та ишеттерҙе: "Таң атҡанда Ағиҙелдең тулҡындары бик һалҡын. Йәш йөрәктең тулҡындары ниңә икән тик ялҡын? Матур ҙа күп, батыр ҙа күп, ләкин һиңә тиң түгел. Көнгә баҡҡан көнбағыштай һиңә тартыла күңел..." Нәжиә еңгәнең моңло тауыш менән йырлаған шул йырына Хисмәтулла ағай түҙмәй, илаулап, мәжлестән сығып киткән. Һөйөп алған тәүге хәләл ефетен онота алмағандыр, күрәһең...

Тормош үҙ яйы менән бара. Тик был ағай йәнә бер ҙур проблема алдына килеп баҫа. Әлеге әйтмешләй, тағы "ике ут араһы". Юҡ, хәҙер уларға Бәҙрикамал әбей бер нисек тә тәьҫир итә алмай. Мәйсәрәнең уға ҡаршы ныҡ ҡына "иммунитеты" бар. Ә бына Хисмәтулланың тәүге ҡыҙы - Рәймәне Мәйсәрә еңгә ҡыйырһыта башлай. Төҫкә "хәс тә Нәжиә" булған был ҡыҙ уға көндәшен хәтерләтә лә торғандыр, бәлки... Атай меҫкендең ҡыҙын яҡлашыу ғына түгел, уға хатта иғтибар итергә лә хоҡуғы юҡ. Бәлки, иғтибар ҙа итер ине, әммә инде татыу ғаилә ҡорҙом ғына тигәндә, сираттағы мәртәбә тормошо боҙолоуҙан шикләнгән булһа кәрәк был ағайыбыҙ. Телгә ифрат оҫта булған был еңгәй сытырҙай башлаһа, уны туҡтатып алып булмай икәнлеген белгән Хисмәт уға өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә...

"Сытырҙай башлаһа" тигәндән, тағы бер ҡыҙыҡ хәлде иҫләнем. Бөтә күрше-тирә менән һәр саҡ аралашып, матур йәшәгән әсәйем Мәйсәрә еңгәй менән дә яҡшы мөнәсәбәттә булды, әлбиттә. Әсәйем уға "Мәйсәрә килен", ә ул әсәйемә "бикәм" тип өндәшә ине. Был еңгә көн дә беҙҙең сепарат менән һөт айыртырға килә торғайны. Сепарат бороп бөткәс, ҡайсаҡ әсәйем менән сәй эсеп, бер килке һөйләшеп алалар. Һүҙҙән-һүҙ сығып, әсәйем уға шаяртып бик ҡыҙыҡ һорау биргәне хәтеремдә: "Килен, һин берәүҙе әрләй башлаһаң, бер туҡтауһыҙ әйтә лә әйтәһең. Нәҡ берәй китаптан уҡып торған һымаҡ. Нисек яңылышмайһың ул?" "Мин ни, шулай ул, бикәм, шунһыҙ ҙа булмайҙыр шул..." - тип еңгәнең ҡытырҙатып көлгәне хәтеремдә. Уларҙың ғаилә мөнәсәбәтенә, әлбиттә, берәү ҙә ҡыҫылырға теләмәне. Ун йәштәр тирәһенә еткәс, Рәймәне Учалы балалар йортона биргәндәре хаҡында ишетелде. Шунан бирле уны бер ҡасан да күргәнем булманы. Башҡа ауылда торғас, уның үҙ әсәһе Нәжиә еңгәнең артабанғы тормошон да белмәйем...

...Әлеге Бәҙрикамал әбей һымаҡ "кеше балаһына" туранан-тура "һөжүм итеүселәргә" ҡарағанда күпкә йыуаштыраҡ, әммә уларҙан артыҡ яҡшыраҡ булмаған "йомшаҡ" ҡәйнәләр тураһында ла бер аҙ фекерләп алмаҡсымын (ҡыҙғаныҫҡа, шундайҙар ҙа осрай). Бәғзе бер әсә килененең ниндәйҙер етешһеҙлеген күрһәтеп, ятраҡан улының ҡолағына шыбырҙап ҡына аулаҡта берәй "файҙалы кәңәш" бирергә ярата. Икенселәр, һәр ғаиләлә тиерлек ир менән ҡатын араһында булып торған ваҡ-төйәк кенә бәхәстәрҙе ишетә һалып, үҙенең улын йә ҡыҙын яҡлашып, бер-ике, "йомшаҡ ҡына" һүҙ ҡыҫтырып та ебәреүсән. Нәтижәлә, үҙе лә һиҙмәҫтән, утҡа кәрәсин һибә ундайҙар. Күпселек осраҡта, әйтәйек, килен кеше ҡәйнәһенә ҡаршы бер ни ҙә өндәшмәй, әммә һуңынан "Ҡәйнәм шулай тип әйтте" тигән һымағыраҡ үпкә һүҙҙәре менән ирен игәй башлауында шик юҡ. Бына шулай, килененең күңеленә ятмаған бәләкәй генә һүҙ әйтһәң дә, уның "уҫлаптай" бумеранг булып ғәзиз улыңа кире ҡайтыуын көт тә тор. Нәтижәлә - ҡатынын да, үҙ әсәһен дә ятраҡан "көслө зат" ни эшләргә лә белмәй, сукеш менән һандал араһында ҡалғандай була. Бындай ғаилә, әлбиттә, татыу йәшәй алмай. Ҡайһы берәүҙәрҙең "Беҙ әсәйем (йә ҡәйнәм) арҡаһында ғына айырылыштыҡ" тигәндәрен ишеткеләгәнем бар.

Ә балаларының ысынлап та бәхетле булыуын теләгән ҡәйнә бәхәсле мәлдәрҙә, киреһенсә... кейәүен йә киленен яҡлашырға тырыша! Һис юғында, нейтраль позиция ала, "Берегеҙ ут булғанда, икенсеһеҙ һыу булып, бер-берегеҙгә мөмкин тиклем һыйынып йәшәргә тырышығыҙ", тигән һымаҡ ятраштырыусы нәсихәттәр әйтә. Һис нәмәгә ҡарамаҫтан, килененә, кейәүенә мөмкин тиклем ятрап йәшәргә тырышҡан ҡәйнәләр һәр саҡ отошта була. "Һөйөрөндөң арҡаһында һөймәҫенде һөйөрһөң" тигән (ифрат аҡыллы!) әйтемде беҙҙең яҡта йыш ҡулланалар. Бәхеткә, өлгө итеп ҡуйырлыҡ, бынамын тигән "алтын" ҡәйнәләр күп (ҡайны хаҡында һүҙ алып бармайым, сөнки, ҡайны-килен йә ҡайны-кейәү проблемаһы, ғәҙәттә, көнүҙәк мәсьәлә булып тормай). Минең бер ҡайнағам һәм ҡәйенеңгәм бар. Ҡыҙ-улдары инде үҫеп еткән, һәммәһенең үҙ ғаиләһе. Башҡалар алдында кейәү һәм килендәрен һәр саҡ маҡтап ҡына тора был оло кешеләр. "Беҙҙең килен шәп бит ул", йә "кейәү маладис" тигән, күңелдәрҙе иретерлек, "бәлзәм" булып яғылырлыҡ шундай йылы һүҙҙәр ғаиләләрҙе фәҡәт нығыта ғына (был "комплименттарҙы" килен, кейәүҙәр, әлбиттә, ишетеп йөрөй), йәштәрҙең бер-береһенә ихтирам тойғоһон арттыра. Бына шул хаҡиҡәтте яҡшы белгән ололар үҙҙәре лә кейәү һәм килендәре тарафынан ҡәҙер-хөрмәт күреп йәшәй (Шәхсән минең ҡәйнәмә килгәндә, ул һәр саҡ минең хаҡта "высший сорт кейәүем" тип кенә әйтә торғайны. Бына шундай кешенең ҡыҙына берәй ауыр һүҙ әйтергә нисек баҙнатың етер?)

Боронғо ата-бабаларыбыҙға килһәк, улын өйләндергәс тә оҙаҡлатмай башҡа сығарып ебәреү яғын ҡараған бит улар. Иң кесе улдары ғына ата-әсә менән бергә йәшәгән. Ул да булһа, атай йортона йәнәш өй һалып, йә айырым ишекле "төкәтмә" ҡороп, башҡа торорға тырышҡан. Аҡыллы ҡәйнәләр балаларының араһына төшөп, "коррекция" яһап тормаған.

Һүҙ аҙағында. Ғәйәт ҡатмарлы шул был тормош. Урыҫта бер йыр бар. Ошолай тип башлана ул: "Собака бывает кусачей только от жизни собачьей..." Әлеге Мәйсәрә еңгәнең шулай булып китеүенә, бәлки, тормош ауырлыҡтарына теше-тырнағы менән ҡаршы тороу ҙа ниндәйҙер кимәлдә сәбәпсе булғандыр. Уны тәрбиәләп үҫтергән әсәһе лә ғәйәт "ҡаты" кеше булған, үҙенең ҡыҙҙарын йыш ҡына туҡмап тәрбиәләгән, тинеләр. Бәлки, "уҫал ҡәйнә" Бәҙрикамал әбей ҙә йәш сағында шундай "этлек" кисергәндер, кем белә инде. Ә үгәй ҡыҙ Рәймәнең артабанғы тормошон белмәйем, әммә, үҙенең ҡәҙерһеҙ бала сағын иҫләп, шунан ғибрәт алып, башҡаларға миһырбанлы, яғымлы булып үҫкәндер, бала сағындағы мөләйемлеге лә һаҡланып ҡалғандыр, тигән өмөтөм бар...

**Мөхәммәт ВӘЛИЕВ.**

**✓ Ҡайтышлай Һөйөмдөң башына борсолоулы уй төштө: "Нишләнем мин? Иҫемде, аҡылымды юйҙыммы әллә? Бығаса белмәгән кеше менән осрашырға шундуҡ вәғәҙә бирҙем".**



Хаҡ Тәғәлә олуғ шәфәғәт килтерҙе. Хәҙер ни теләһә, шуны биреү лазым тиеп, йомшаҡлыҡ менән хәҡиҡәтте асты:

- Эй Әҙәм, ярлыҡаным. Дәхи һинән һуң килеүсе балаларың, гонаһтар ҡылып, Миңә һығынһалар, уларҙы ла ярлыҡармын. Ләкин Мин һине Ер йөҙөндә тороу һәм хәлифә ҡороу өсөн яраттым, шуға ла ожмахтан сыҡ.

Әҙәм Илаһтың мораты ни булғанын аңланы һәм Һауа менән инжир ағасынан биш япраҡ алып, ғәүрәттәрен ҡапланы. Ожмахтан сығып:

- Тәүбәм ҡабул ҡылынып, йәннәткә керәсәгемде төшөндөм, - тине.

Хаҡ Тәғәләнән хитап килде:

- Эйе, тәүбәңде ҡабул ҡылдым"...

***

Динмөхәмәт ағай хикәйәтен тамамланы ла, тыңлаусыға күҙ ташлап, тын ҡалды. Тәьҫир иттеме, уй-тойғо, кисереш уяттымы, юҡмы?..

- Бығаса ишеткәнем юҡ ине - тине Юлай әҫәрләнеп. - Бик ҡыҙыҡ һәм дә фәһемле.

- Заттарыбыҙ белмәй шул ошо рухи ҡиммәтте, хазинаны. Ҡыҙғаныс! Ә бит уның асылына ифрат та тәрән мәғәнә, аҡыл һалынған: никахһыҙ ҡатын-ҡыҙға йоғонмау, аманатты һаҡлау, тыйылғандан тыйылыу, ҡотҡоға бирелмәү, яҙыҡ эш ҡылмау, ҡайғы-хәсрәткә ғәйеп эш сәбәп булыу, гонаһ өсөн язаһыҙ ҡалмау, тәүбә итеү, ярлыҡау... Яҙыҡ эш иһә ғүмер баҡый Әҙәм менән Һауаның нәҫелдәрендә сағыла. Тыйылғандан тыйылыу - донъялағы бар бәндәгә һабаҡ, фәһем дә бит!

- Һөйәрғол, Һөйөм яҙмышы ла шуның бер саткыһы, сағымы булып сыға ла баһа!

- Нәҡ шулай, ҡәрҙәшем... Иблис ҡотҡоһона бирелеп, Әҙәм менән Һауаның гонаһына Йылан булышлыҡ иткән кеүек, Һөйөмдең бәхетһеҙлеге Исхаҡ тигән ҡәбәхәт бәндәнән башлана.

***

Ауылда һылыуҙарҙың һылыуы ине Һөйөмбикә. Ҡоралайҙай һомғол һынлы, көләс йөҙлө, күҙҙәре сөм ҡара, ҡыйғас ҡашлы, оҙон керпекле, һутлы иренле, дертләп торған күкрәкле, моңло, яғымлы тауышлы... Иҫ кергән һәр егеттең күңелен елкендерә һөймәләкле үә һөйкөмлө Һөйөм. Киске уйындарҙан артынан бер тотам ҡалмай эйәреп киләләр, ҡосорға, үбергә теләйҙәр. Ләкин береһенә лә иғтибар итмәй, буй бирмәй һылыу. Кире ҡағылғандарҙың бәғзеһе баҫыла, башҡа ҡыҙҙарға күҙ ата, бәғзеһе үсегә, үсләнә.

- Һөйөм барыбер минеке буласаҡ. Минеке! - тип ҡабарына йыш ҡына көлкөгә дусар Исхаҡ.

- Һандуғас һымаҡ ҡыҙҙың һиңә, таржыҡ танауға бара торғаны бармы? - Бер төртмә телләһе оҙаҡ өйләнмәй йөрөгән, оло йәштәге һауынсылар менән буталған көтөүсенең ауыртҡан еренә төрттө.

"Мәлғүн" ҡушаматлы иманһыҙ ҡорҙашы иһә яманлыҡҡа ҡотортто:

- Таржыҡ танау ҙа кеше. Таржыҡҡа ла ҡыҙ кәрәк. Барырға мәжбүр ит!

- Нисек?

- Нисек, нисек, имеш. Яңғыҙ ҡалғанында тот та көслә! Мин еңгәгеҙҙе шулай ниткәйнем...

Йәйҙең һөтайы үтеп, майайы ла тыуҙы. Тәүҙә таш еләге өлгөрҙө, шунан ер еләге беште. Ҡатын-ҡыҙ бала-сағаһы менән күнәк-күнәк емеш йыйып, көн һайын баҙар сапты. Һөйөмбикә лә әүәл оләсәһе менән йөрөгән аулаҡ ергә йүгерҙе. Еләк уңған, түшәлеп ята. Күп булғас, бер урындан китмәй генә тирҙе лә тирҙе. Иҫке ауыҙға яңы аш, тип, бармаҡ башындайҙарын тамағына оҙатты. Тәмле, бик тәмле! Шул саҡ, һиҫкәндереп, сыбыртҡы шартланы. Күмәк хужалыҡ малын әйҙәп, ерән бейәһен әйҙүкләп, ағас араһынан Исхаҡ килеп сыҡты. Ҡыҙҙы яңғыҙын күреү менән күҙҙәре майланды.

- Ни хәл матурҡай?

- Күреп тораһың, һәйбәт.

Көтөүсе эйәренән төшөп, рөхсәт тә һорап тормай, тула яҙған биҙрәләге еләктәрҙе услап һоғонорға кереште.

- Үҙең йыйып ашар инең, Исхаҡ.

- Һин өҙгәне татлыраҡ...

Һөйөм ҡыҙарып бешкән тау еләгенән дә ләззәтлерәктер. Исхаҡ сыуалған күүҙәләре лупыш, түштәре һалпыҡ бисәләр мең аҙым ары торһон. Улар - бисура, Һөйөм - фәрештә! Ана, ниндәй буй-һын!.. Гүйә ер хуры! Майлы күҙендә яғым юғалған егет һылыу һынға һонолдо.

- Нишләүең был, Исхаҡ?

- Мин... Мин ғашиҡмын һиңә. Түшеңдәге ике алһыу "алма"ңа ла, артыңдағы туп кеүек ике "ай"ыңа ла. Уларҙы күргем, тотҡом килә.

- Аҙғын!.. Атың башыңа типтеме әллә? Ауыҙың ни әйткәнде ҡолағың ишетмәй. Мин ҡыҙ бала ғына, һин - оло! Миңә уҡырға кәрәк, уҡырға...

- Еткән ҡыҙға ниндәй уҡыу! - Яһил, кеше-фәлән күренмәйме тип, тирә-яғына ҡарап алды ла ҡыҙға һырышты.

- Йоғонма миңә! Йоғонма, Таржыҡ!..

Күпме генә тибешһә лә, йәне сыға яҙып ҡаршылашһа ла, тамам хәле бөтөп, ҡулдарын шаҡарған, күүҙәһен баҫҡан көсләүсенән ҡотола алманы Һөйөм... Бер аҙҙан Исхаҡ, танауын тағы ла нығыраҡ таржайтып, ярым шәрә һушһыҙ ятҡан ҡорбанына еңеүсе ҡиәфәтендә ҡарап торҙо ла, зәңгәрһыу күк йөҙөн ҡапыл ҡаплаған ҡара болот һымаҡ, тағы Һөйөмдөң өҫтөнә ҡапланды...

Һөйөм иҫенә килгәндә, Исхаҡ та, көтөү ҙә юҡ ине. Ҡалтырап, тәнтерәп, быуынһыҙ булып, һығылып илай-илай, ауыл яғына тәнтерәкләне. Түңкәрелгән күнәге еләклектә ятып ҡалды. Кеше күҙенә салынмай ғына бәрәңге баҡсаһы аша көс-хәл менән өйөнә ҡайтып керҙе. Яфаланып, йөрәге һыҙылып сеңләгән ҡыҙын күреп, инәһе Һылыубикә өҙгәләнеп һораны:

- Нимә булды һиңә? Нимә?

Һүҙ әйтергә лә теле әйләнмәй, субыр-субыр йәше аҡты ла аҡты Һөйөмдөң. Сатлама һыуыҡта ныҡ өшөгән кеүек, ирендәре, ҡулдары ҡалтырай, бөтә тәне дерелдәй.

- Тыныслан инде, зинһар, тыныслан... Ни бәләгә юлыҡтың?

- Исхаҡ... Исхаҡ... Мәсхәрәләне...

- Әйттем бит мин һиңә урманға яңғыҙ йөрөмә тип, емеш аҫылын бүре ейә тип. Әйттем бит!.. Атаң иртә китеп, таяныр терәгебеҙ ауҙы шул. Ул иҫән булһа, Исхаҡ һиңә яҡынларға ла баҙнат ҡылмаҫ ине.

- Инәй... Нишләйем?.. Эсем тулы ут, эсем яна. Өмөттәремде өҙҙө Таржыҡ. Бәхетһеҙ итте, бәхетһеҙ...

Ҡыҙ үкһене лә үкһене. Уны йәлләп, Һылыубикәнең дә бәғере телгеләнде. Ҡанаттары ҡайырылған ҡарлуғасының. Ә ҡанаты ҡайырылған ҡош осмай. Осмай!.. Нишләргә һуң, нишләргә?.. Һөйөмө башын мендәргә терәп ойоп киткәс, Һылыубикә урамға сыҡты ла, асырғанып, тыны бөтөп Исхаҡтың инәһенә йүгерҙе. Ул ихатаһында кер сайҡай ине.

- Һылыубикә, ниңәлер ҡобараң осҡан, төҫөң ҡасҡан.

- Осмаһа ла осор. Һөйөмбикәм әле генә еләктән ни үле, ни тере килеш ҡайтып керҙе.

- Ҡош-ҡортҡа тап булғанмы әллә?

- Һинең ҡортоң көсләгән.

- Көсләгән?.. Һөйөм, Һөйөм, тип, ауыҙ һыуы ҡорой ине шул. Үәт шайтан, үәт мәлғүн!

- Нәфсеһен тыя алмай ҡыҙымды хур итте, ҡәһәр һуҡҡыр. Милицияға башырам мин уны.

- Ҡәһәрләмә, ялыу итмә инде, Һылыубикә! Улымдың башын төрмәлә серетерҙәр. Ғишыҡ диуана иткәндер. Йәллә инде беҙҙе, йәллә! Бер ырыу кешеләре бит беҙ. Иртәгә үк ҡыҙыңды һорап киләм.

- Ниндәй ғишыҡ?.. Был - яуызлыҡ, ләғинлек!

- Шулайҙыр, шулайҙыр... Әммә харап ҡына итмәгеҙ инде, итмәгеҙ! Донъя бит: алманың алына ла ҡорт төшә, бер матурға - бер йәмһеҙ, бер йәмһеҙгә - бер матур.

- Бер яҡшыға - бер шаҡшы тиң, исмаһам...

Иртәгәһен Исхаҡ менән инәһе, баштарын эйеп, ҡыҙ һорап килде. Әммә ғәрлегенән торонбаштай көйгән Һөйөм йөҙөн дә күрһәтмәне.

Бер нисә аҙнанан һуң Һылыубикә ҡыҙының йөккә ҡалғанын тойҙо. Ҡалмаһа, көсләүсегә яҡын да юламай, уны кем эте тип тә белмәй, ҡалаға уҡырға, йәки эшкә юлланыр ине. Ауырлы килеш ҡайҙа китһен, кемгә барып баш төртһөн?.. Мыҫҡыл иткән Исхаҡҡа сыҡмай сараһы юҡ. Бәлки, кем белә, тора-бара эҫенешеп тә китерҙәр. Яйлыраҡ мәлде һайлап, Һылыубикә яғымлы тауыш менән Һөйөмөнә өндәште:

- Ҡыҙым, беләһең, һин минең ҡәҙерләнән ҡәҙерлем. Аңлайым, сулпан кеүек кенә сағың. Иң күркәм, иң ипле егеткә лайыҡһың. Йола буйынса фатиха, ризалыҡ менән генә кейәүгә бирермен тигән инем дә бит. Йәл, бик йәл... Инде ҡарынында бәпәйең бар. Һеҙ хәҙер - икәү. Ҡорһағың ныҡлап беленмәҫ борон...

- Исхаҡҡа сыҡ, тиһеңме. Белә, күрә тороп, яманға димләйһең.

- Шулай ҙа һуң, әммә башҡа әмәл юҡ. Ололар әйтмешләй, кем менән ҡарайғанһың, шуның менән ағараһың инде.

- Ҡарайманым мин, инәй, ҡарайманым!.. Аҙғын Исхаҡ ҡарайтты мине!

- Ни ҡылайыҡ һуң? Ирһеҙ бала тапһаң, бәндә һөйләр, тәҡдир көлөр... Кәрәкме ул беҙгә?..

Бөтә ауылды аптыратып, Һөйөмбикә иләмәһеҙ, ибәтәйһеҙ Таржыҡҡа сыҡты. Уның ҡулы тәненә тейгән һайын Һөйөм таш һымаҡ ҡатты. Йән тартмағанға күңел дә ятмай икән шул. Исхаҡ иһә эскәнендә, шөкәтһеҙләнеп, ҡорҙаштары араһында Һөйөмдөң яманатын һатты:

- Атаһы сатлама һыуыҡта ҡар өҫтөндә әтмәләгәндер?.. Боҙ... Туң... Таш... Һылыулығы буғымамы? Ҡыҙыл алмаға алдандым.

Бер нисә егеттең Таржыҡтың был ҡыланышына йәндәре көйҙө:

- Исхаҡ, һин беҙҙең дә күҙ төшөп йөрөгән һылыуға өйләндең. Әле килеп, уны хурлап ултыраһың. Өләсәйҙәр әйтмешләй, яман ир генә үҙе теләп алған ҡатынды үҙе яманлай.

- Һине һөймәгәнгә һөйкәлмәҫ инең...

Бына шулай... Яратам тигән булып, ҡыҙҙы ирекһеҙләп, мәжбүр итеп алғас та тәүфиҡланманы Исхаҡ, әүәлге һөйәркәләре менән буталыуын дауам итте. Улы тыуғас та толҡа тапманы. Бәпесен биләп, йоҡлатып, баҡсаға түтәл ҡаҙырға ғына сыҡҡайны Һөйөм. Лаяҡыл иҫереп, күҙҙәре томаланып ҡайтҡан Таржыҡ һис ни шәйләмәй карауатҡа ауҙы. Ҡапыл күңеле болоҡһоп, өйгә йүгереп кергән инәй, йөрәге ярыла яҙып, ҡысҡырып ебәрҙе:

- Баламды!.. Баламды баҫҡан дөмөккөр!

Күҙ менән ҡаш араһында берҙән-бер йыуанысынан яҙҙы Һөйөм. Күҙ алмаһы кеүек кенә ине тумалағы. Күҙ алмаһы...

***

Яҙ, йәшеллек, һабантурғай төрлө уйҙар менән болоҡһота, иләҫләндерә. Иләҫмиләҫ килеп, Һөйөм Ыҡ буйына төштө. Шишмәнән услап һалҡын һыу эсте, ярҙың йәшел сирәменә ултырып, уйланып, йылға ағышына баҡты. Шул саҡ һиҫкәндереп, кемдер өндәште:

- Һин Һыуһылыумы әллә?..

Ҡараһа, эргәләге кисеүҙә берәү атын һуғарып тора. Һомғол буйлы, нурлы йөҙлө, ҡара мыйыҡлы. Хәс тә әкиәттәрҙә тасуирланған хозур үә батыр егет! Яҙ шауҡымына бирелеп, абайламаған да хатта. Һөйөмдөң ҡыҙ сағындағы хис-тойғолары терелеп, ҡош ҡанатындай елпеп, күңеле елкенеп ҡуйҙы.

- Ниңә телһеҙ ҡалдың, Һыуһылыу?

- Һыуһылыу түгел, Һөйөм.

- Ниндәй матур исем! Ә мин - Һөйәрғол. Һеҙҙең яҡҡа агроном булып килдем.

Ҡайһылай килешле: Һөйөм - Һөйәрғол, Һөйәрғол - Һөйөм. Ниндәйҙер илаһи тылсым, ғилле тәьҫирендә ҡыҙ егеткә ҡарап, ихлас йылмайҙы, һылыулығы, сихри ҡарашы менән уның бар булмышын биләне.

- Тәү күреүҙән үҙеңә ҡараттың мине, Һөйөм. Арбаның, сихырланың. Йөрәгем әллә нишләне. Иртәгә лә осрашып һөйләшәйек.

- Әйҙә. Тик бында түгел. Анау тауҙа, Йәмтауҙа...

Ҡайтышлай Һөйөмдөң башына борсолоулы уй төштө: "Нишләнем мин? Иҫемде, аҡылымды юйҙыммы әллә? Бығаса белмәгән кеше менән осрашырға шундуҡ вәғәҙә бирҙем. Ғәжәп, тәү күреүҙән уға күңелем ятты. Күрәһең, йәнем теләгән, көҫәгән - ул! Ниңә яҙмыш тиңем булырҙай менән иртәрәк осраштырманы икән? Ниңә?.."

**(Дауамы. Башы 2-се һанда).**



✓ Г. Камалова, конкурста "Тормош ағасы" тигән проекты менән еңеп, 450 000 һум грант отто. Проект, Башҡортостан Республикаһының билдәле шәхестәре исемендәге ағастар ултыртып, тотош бер аллея булдырыуҙы күҙ уңында тота.



ИНТЕРНЕТТАН



# КӘБЕҪТӘ ҠЫШҠЫ РИЗЫҠ

■ Эшкә төшкө ашҡа ризыҡты үҙегеҙ менән йөрөтәһегеҙме? "Рассвет" клиникаһы нутрицологы, педиатры Ирина Кирюшина билдәләүенсә, уның да үҙенең ҡағиҙәләре бар. Иң мөһиме, ҡулдарҙы ентекләп йыуығыҙ. Йәшелсәләрҙе яҡшылап йыуып, таҙа таҡтала таҙа бысаҡ менән турарға. Ит өсөн башҡа таҡта тотонорға. Әҙер салатҡа майҙы ашар алдынан һалыу яҡшыраҡ. Белгес шулай уҡ халыҡтың бер тапҡыр тотонола торған һауыт-һабаны ташларға йәлләүе тураһында ла әйтте. Уларға хатта был турала белдереүсе махсус маркировка ла ҡуйылған.

■ Өлкән йәштәге кешеләргә ҡышын айырыуса С витаминына иғтибар итергә кәрәк, тип белдерә Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш төп гериатры Ольга Ткачева. Был витаминды организм үҙе эшләп сығара алмай, шуға ла йәшелсә, емеш-еләк, йәшел тәмләткестәрҙе күберәк ашарға кәрәк. Витаминдың тәүлек нормаһы - 400 г. Әммә оло кешеләр бешерелгән йәшелсәгә өҫтөнлөк биреүсән. Әммә ризыҡ әҙерләүҙең температураһы юғары булған һайын, был витаминдың да тарҡалып бөтөүе ихтимал. Гөлйемеш, һырғанаҡ, болгар боросо, ҡара ҡарағат, цитрус емештәре, киви С витаминына бай. Тоҙло кәбеҫтә лә ҡышҡы рационда мотлаҡ булырға тейеш.

■ Сәтләүектәрҙең ҡайһы бер төрҙәрендә витаминдар менән бер рәттән ағыу ҙа бар. Мәҫәлән, миндаль сәтләүеген бер аҙ ҡыҙҙырып алһағыҙ, унда синиль кислотаһы бүленеп сығыуға булышлыҡ итеүсе матдәләр юҡҡа сыға. Ер сәтләүеген дә ҡыҙҙырғандан һуң ундағы файҙалы полифенолдар кимәле 20-25 процентҡа арта. Кешьюла урушиол тигән токсин бар, ул ҡысыныуға килтерә. Ҡайһы берәүҙәрҙә был матдәгә аллергия ла була. Шуға ла уны ла ҡыҙҙырырға кәрәк. Эксперттар билдәләүенсә, сәтләүекте ныҡ ҡыҙыу утта тотһаң, ундағы майлы кислоталар тарҡала, шуға ла талғын ут иң ҡулайлыһы. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: сәтләүектең төрлө төрҙәре үҙенсә файҙалы, мәҫәлән, ҡайһы берҙәрендә аҡһым, Е витамины, антиоксиданттар, хатта марганец һәм баҡыр ҙа бар.

■ Детокс-программалар тәҡдим итеүселәр аҙым һайын, бигерәк тә селтәрле маркетинг менән шөғөлләнеүселәр был хаҡта көнө-төнө һөйләй. Организмды шлак һәм токсиндарҙан таҙартырға кәрәк, тип, төрлө препараттар рекламаһалар ҙа, белгестәр бының өсөн бер ниндәй ҙә медицина һәм биологик сәбәп юҡ, тип иҫәпләй. Әгәр ҙә бауыр менән бөйөрҙәрегеҙ эшләй һәм насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ тораһығыҙ икән, бер ниндәй ҙә таҙарыныу кәрәк түгел, ти улар. Икенсенән, "шлак" тигән нәмәнең булыуы әлегә тиклем дәлилләнмәгән, детокстан һуң уларҙың юҡҡа сығыуын күрһәткән фәнни документтар ҙа юҡ. Организмдың эшмәкәрлегенә ҡыҫылғансы, дөрөҫ туҡланырға, күберәк һыу эсергә кәрәк, тигән кәңәш бирә табиптар.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# АЖДАҺАНЫ КЕМ КҮРГӘН?



**Быйылғы йыл бик үҙенсәлекле генә. Эш шунда: аждаһа йылы килде, ә бына аждаһаның үҙен күргән юҡ. Былтырғы йыл - ҡуян, унан алдағыһы - юлбарыҫ, унан алдағыһы - үгеҙ йылы булғайны. Бына был хайуандарҙы күргән бар. Күреү генә түгел, хатта ҡайһыһынан ҡасып, ҡайһыһын баҫтырып йөрөгән дә бар. Ә бына аждаһаны күргән юҡ. Берәүҙең дә күргәне юҡ. Беҙ аждаһа тураһында ишетеп кенә беләбеҙ. Ул беҙгә әкиәттәр аша таныш.**

Әйҙә, бер мәлгә бала саҡҡа әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Беҙгә элек әкиәттәрҙе күберәген өләсәйҙәр һөйләй торғайны. Шуға борон берәү берәй нәмәне алдап һөйләй башлаһа, "Өләсәң ҡошап (оҡшап була инде), әкиәт һөйләп торма әле", тип әйтеп ҡуйырҙар ине.

Уңайы сыҡҡан мәлдә был турала бер ҡыҙыҡ хәлде һөйләп үтәйем. Бер мәл уҡытыусы ошондай йомаҡ әйткән: "Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә". Күптәр аптырап ҡалған. Тик бер генә бала ихлас ҡулын күтәргән. Әлбиттә, йоҙаҡ тигән яуапты ишетергә өмөтләнгән уҡытыусы. Әммә яуап "Һандыҡ өҫтөндә ултырған өләсәй", булған.

Бына хәҙер әкиәткә күсәйек. Алдан әйткәнемсә, борон уны өләсәйҙәр һөйләй торғайны. Ошо мәлде һеҙ ҙә күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ. Ауыл кисе. Ҡараңғы күптән төшкән. Өйҙә илаһи тынлыҡ. Һандыҡ өҫтөнә йәтешле генә итеп аяҡтарын бөкләп ултырған өләсәй әкиәт һөйләй. Ә тыңлаусылар иһә урындыҡта теҙелешеп ятҡан береһенән-береһе бәләкәй балалар. Әйткәндәй, заманында күп осраҡта күмәк балаға бер юрған була торғайны. Өләсәй әкиәт һөйләй белә. Тауышын йә күтәреп ебәрә, йә шомло итеп ипләп кенә әйтә, йә бер мәлгә тын ҡалып, шымып ҡала. Ҡыҫҡаһы, тәмләп һөйләй ул әкиәтте. Бына бер мәл өләсәй әкиәттең иң ҡыҙыҡ мәленә килеп етә: "Шул мәл Аҡъял батыр әйләнеп ҡараһа (ошо урында өләсәй ауыр итеп тын ала, ә ниндәйҙер ҡурҡыныс хәбәрҙе ишетергә әҙерләнгән балалар дөйөм юрғанды өҫкә табан тарта бирә) урманды ҡап уртаға ярып (балалар башын һыйпап ала, сөнки ҡап уртаға ярыу тигән һүҙҙәр үтер-үтмәҫ ҡул сәсалғыстың башты ҡап уртаға ярып сәсте йолҡҡослап барған мәлен хәтерләтеп ҡуя), дауыл ҡуптарып, ауыҙынан ут-ялҡын бөркөп (был нисек була икән, тип балалар устарына өрөп ҡарай) был яҡҡа табан ҙур башлы аждаһа-йылан шыуыша, тей (өләсәйҙең шомло тауышы бер мәлгә тынып ҡала, шул арала бәләкәйерәктәр юрған аҫтына сума биреп ҡуя, ә өлкәнерәктәре юрғанды күҙҙәренә тиклем тартып, уны баш аша ташларға әҙер ята). Аҡъял батыр булат ҡылысын ҡынынан сығарып, аждаһаны көтә (хәҙер күптәр юрған аҫтында). Йылан-аждаһа килеп еткәс, Аҡъял батыр уның ҙурлығын күреп иҫе китә. Ауыл осонда йәшәгән фәлән ағайҙың өйө һымаҡ ҙур була аждаһа (был ваҡытта сағыштырыу өсөн ауылдағы иң ҙур өй атала). Әммә ҡурҡмай батыр. Аждаһаға ҡаршы алышҡа сыға. Бер көн һуғыша былар, ике көн һуғыша. Өсөнсө көн тигәндә Аҡъял батыр аждаһаның башын өҙә саба. Аҙаҡ кәүҙәһен тураҡлап, кәбән һымаҡ итеп өйөп ҡуя (был мәлгә юрған күптән ташланған, балалар тороп ултырған була, ҡайһылары хатта сәпәкәй итә, ә иң бәләкәйҙәре

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЗАМАНА БАЛАЛАРЫ ШУНДАЙ!

## ЕГЕРМЕНСЕЛӘР

**Өфө ҡалаһының Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында баланың һәр яҡлап үҫешенә һәм уның шәхси һәләттәрен, оҫталыҡтарын формалаштырыуға ҙур иғтибар бирелә.**



Был йәһәттән быйылғы уҡыу йылында ла уңыштарыбыҙ бихисап. Уҡыусыларыбыҙ биология, тарих, хоҡуҡ, технология фәндәре буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһының төбәк этабында ҡатнашыу бәхетенә иреште. Шулай уҡ уҡыусыбыҙ Баязит Кәримов башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиада призеры исеменә лайыҡ булды.

Гимназиябыҙҙа теүәл фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүгә иғтибар арта. Был йәһәттән Өфө фән һәм технологиялар университеты менән тығыҙ эшлекле бәйләнеш булдырылған. 2023 йылда юғары уҡыу йорто менән берлектә физика буйынса беренсе асыҡ олимпиада үтте. Олимпиадала Һамар һәм Силәбе өлкәләренән, Ханты-Манси автономиялы округы, Мәскәү ҡалаһынан меңдән ашыу 7-11 класс уҡыусылары ҡатнашты. Олимпиадала еңеү яулаған 10-11-се класс уҡыусылары Өфө фән һәм технологиялар университетының инженер факультетына уҡырға ингәндә өҫтәмә балл алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Уҡыусыларҙың башланғыстарын хуплап, уларҙы төрлө проекттар әҙерләү эшенә лә актив йәлеп итәбеҙ. Был йүнәлеш уҡыусыларҙы, ата-әсәләрҙе, уҡытыусыларҙы - белем биреү процесында ҡатнашыусыларҙың барыһын да берләштерә. Һәр кемдең үҙ эшмәкәрлегенә яуаплы ҡарауы ыңғай һөҙөмтәләр бирә: уҡыусылар социаль проекттар әҙерләргә өйрәнә, ораторлыҡ оҫталығын камиллаштыра, республиканың билдәле медиа шәхестәре менән осраша, оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша. Был эшебеҙҙең һөҙөмтәһе шул: "Үҫеш биләмәһе. Яңы движ" ("Территория роста. Новый движ") республика проекты сиктәрендә өс гимназисыбыҙ Камила Әхмәтова, Гөлдәр Камалова, Вилена Сәғәҙәтова А.Ш. Сәхәүетдинов етәкселегендә "Росмолодежь" фонды үткәргән проекттар конкурсында ҡатнашты. Г. Камалова, конкурста "Тормош ағасы" тигән проекты менән еңеп, 450 000 һум грант отто. Проект, Башҡортостан Республикаһының билдәле шәхестәре исемендәге ағастар ултыртып, тотош бер аллея булдырыуҙы күҙ уңында тота.

Күптән түгел республикабыҙҙа инициативалы бюджетлау һәм предуниверсарийҙар селтәрен үҫтереү буйынса проекттар конкурсы старт алды. Был конкурста гимназиябыҙ уҡыусылары ла ҡатнашырға теләк белдерҙе. Тәҡдим ителгән проекттар белем биреү, спорт һәм ижади саралар үткәреүгә, мәктәптә ял зоналары, телевизион студиялар, медиа-үҙәктәр, кинозалдар булдырыу, спорт майҙансыҡтарын йыһазландырыу, мәктәптең эске интерьер дизайнын яңыртыуға йүнәлтелгән. Әлеге ваҡытта улар проекттарын яҡлауға сығарып, гимназиябыҙ эксперттары алдында сығыш яһарға әҙерләнә. Иң яҡшы тип табылған проект республика конкурсына тәҡдим ителәсәк. 2024 йылда Башҡортостан Республикаһында 15 предуниверсарий эшләүе, ә уҡыусылар үҙҙәренең 100-ҙән ашыу башланғысын тормошҡа ашыра алыуы планлаштырыла.

## ҠЫЙҒЫЛАР

**Республикабыҙ мәктәптәренең уҡытыу-тәрбиә эшенә милли проекттар аша булышлыҡ итеү һөҙөмтәһендә байтаҡ ҡына инновацион башланғыстар ғәмәлгә ашырыла, музыкаль студиялар асыла, ял итеү урындары барлыҡҡа килә, һынлы сәнғәт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар булдырыла.**

Ҡыйғы районының Ҡурғаш төп белем биреү мәктәбе урындағы инициативаларҙы бюджетлау проекттарын ғә-

✓ ***Башҡорт халҡының фаразы буйынса, йөҙ йыл йәшәгән йылан аждаһаға әүерелә. Төп шарттарҙың береһе булып был йыландың бер ваҡытта ла кешеләргә күренмәүе тора.***

*ҺАБАҠТАР*

күптән инде әүен баҙарына киткән була)".

Ошо башҡорт халыҡ әкиәтен тыңлағандан һуң, аждаһа йыландан барлыҡҡа килә икән, тигән һығымта яһарға була. Ә быныһы, баҡтиһәң, әкиәт түгел икән. Аптырамалы, бындай фараз ысынлап та бар икән. Башҡорттар ғына түгел, күп кенә башҡа халыҡтарҙа аждаһаның йыландан барлыҡҡа килеүенә, уның ысынлап булыуына ышана икән. Бына сербтар уны аждайя, болгарҙар - аждер, төрөктәр - аждарха, иран халҡы - ажи-дахака тип атай икән. Башҡорт халҡының фаразы буйынса, йөҙ йыл йәшәгән йылан аждаһаға әүерелә. Ҡайһы бер халыҡтар йөҙ түгел, ә биш йөҙ йыл йәшәгәне аждаһаға әйләнә, тип иҫәпләй. Төп шарттарҙың береһе булып был йыландың бер ваҡытта ла кешеләргә күренмәүе тора. Ә аждаһаның төп эше нимәнән ғибәрәт? Халыҡ ышаныуы буйынса, ул һыу-ямғыр өсөн яуаплы икән. Шуға борон ҡайһы бер ырыу халҡы йыланға табынған да инде.

Ярай әле беҙҙә йыландар әҙ, тип ҡыуанып уйлап ҡуям мин. Әгәр Ер йөҙөндә йыландарҙың өс менән ашыу төрө билдәле булһа, беҙҙә уларҙың ни бары алты ғына төрө йәшәй. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһы саға. Шуныһы һәйбәт, беҙҙә йәшәгәндәрҙең өсәүһе (туҙбаш, еҙ, сыбар йыландар) ағыуһыҙ. Уларҙың йәшәү рәүеше башҡаларҙың тормошонан әллә ней айырылмай. Ғалимдар билдәләүенсә, бер йыландың биләмәһе алтмыш-йөҙ метрҙан артмай. Ул ҡышлау өсөн яраҡлы урын эҙләп, йәйге төбәктән биш саҡрымға тиклем арағa күсә ала. Ҡыш осорон ике метрға тиклем тәрәнлектәге ояла үткәрә. Берәмләп тә, төркөм-төркөм булып та ҡышлай йылан. Күп осраҡта бер урынға унлап йылан йыйыла. Яҙҙың нисек килеүенә ҡарап, ер өҫтөнә май башында һәм уртаһында сыға. Оянан беренсе булып ата йылан сыға. Бер нисә көндән инә йылан һәм балалары ер өҫтөнә күтәрелә. Яҙ көнө улар ҡояшта ҡыҙынып ятырға ярата. Берәй түмгәк йә ялпаҡ таш өҫтөндә ятҡан йыланды, әлбиттә, урап үтеү хәйерле. Үҙе башлап һөжүм итмәһә лә үҙен бимазалағанды яратмай ул. Йылан йәй көнө йәшәү урыны итеп ташландыҡ ояларҙы, ҡороған ҡыуаҡ төптәрен һәм серек ағастарҙы һайлай. Һунарға ҡояш байығас ҡына сыға. Уңышлы һунарҙан һуң оянһынан ике-өс көн сыҡмай ята. Уның өсөн ояла тыныс ҡына ятыу отошло. Сөнки уның дошмандары етәрлек. Етмәһә, улар көслө. Йыландың төп дошмандары булып бөркөт, өкө, ябалаҡ, бурһыҡ, төлкө һәм терпе иҫәпләнә.

Күреп тораһығыҙ, йыландың тәбиғәттәге тормошо ябай ғына. Ә шулай ҙа кеше өсөн уға ҡағылышлы асыҡланмаған һораүҙар апаруҡ. Әйтәйек, һауыт тирәләй уралған йылан һүрәте. Белеүегеҙсә, был һүрәт медицина хеҙмәткәрҙәренең билдәһе (эмблемаһы) булып тора. Был осраҡта ни өсөн йылан төп билдә булып һайланды икән, әйтеүе ҡыйын. Йылан һәйбәт булғанға был эмблемаға килеп эләккәндер инде, тип әйтергә генә ҡала. Беҙҙең халыҡта ла, башҡаларҙа ла йыланға ҡараш төрлөсә. Уны өҙөп кенә насар, йә һәйбәт тип әйтеп булмай. Был турала халыҡ әйтемдәре лә әйтә. Йыландың ҡараһы ла йылан, ағы ла йылан. Йәне теләгән - йылан ите ашаған. Ер аҫтында йылан көйшәгәнен белә. Ҡуйыныбыҙҙа йылан аҫрап ятҡан икәнбеҙ. Йылан аяғын киҫкән. Йылан аяғын күргән бәхетле булыр. Күрәһегеҙ, әйтемдәр байтаҡ ҡына.

Аҡ йылан була, тей халыҡ. Ул йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнә. Уға тейергә ярамай. Аҡ йыланды үлтергән кешене йыландар торған ерендә ашар, тей халыҡ. Аҡ йыланға аҡ яулыҡ һалһаң, ул мөгөҙөн һала. Ул кеше бәхетле була, тигән ышаныу һаман йәшәй халыҡ араһында. Һуңғы осор халҡыбыҙ өсөн уның "йәшел йылан" тип исем алған яңы төрө бигерәк тә ҡурҡыныс булып китте. Йылан күрһәң, йылан доғаһын уҡыр кәрәк, тей халыҡ әйтеме. Арбауын белһәң, ҡара йылан да ("йәшел йылан" да, тип өҫтәге килә) ҡарышмай, тигән халыҡ әйтеме менән тамамлағы килә был мәҡәләне.

Был йылды ла тыныс күңел менән үткәрергә насип итһен барыбыҙға ла. "Йәшел йылан"ға бирешмәй, тыныс тормош көтәйек. Ә аждаһаға килгәндә инде... Әйҙә, ул бары тик әкиәттә генә ҡалһын. Ысын аждаһаны күрергә насип итмәһен. Һандыҡ өҫтөндә аяғын бөкләп ултырған өләсәй генә һөйләһен уның тураһында.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

мәлгә ашырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Былтырғы уҡыу йылында ла мәктәп уҡыусылары тәҡдим иткән проект еңеүсе тип табылып, ошо уҡыу йортонда психологик бушаныу кабинеты асылғайны. Быйыл да уҡыусылар менән ошо мәсьәлә буйынса "мейе штурмы" уҙғарылды, улар үҙҙәренә оҡшаған идеяларҙы яҡлап сығыш яһаны. Тәҡдим ителгән проекттарҙың барыһы ла мәктәп тормошо менән бәйле. Мәктәп музейын нигеҙләү, спорт майҙансығын төҙөү, мобиль компьютер класын асыу, "Уңыш мәктәбе" коворкинг зонаһын булдырыу идеялары иң ҡыҙыҡлы һәм файҙалы, тип табылды.

Шулай уҡ Ҡыйғы районының Вәкиәр төп белем биреү мәктәбе лә 2024 йылда урындағы инициативаларҙы бюджетлау проекты сиктәрендә эш башланы, уның төп принцибы - проекттарҙы уҡыусылар үҙҙәре тәҡдим итә. Мәктәптә 5 инициатив проект төркөмө үҙ тәҡдимдәрен яҡланы. Бына улар "Яҡшыртзинг", "Хыялым кабинеты", "Мәктәп спортзалы - һаулыҡҡа тәүге аҙым", "Мәктәп метеостанцияһы цифрлы лабораторияһы", " Робототехника мәктәп лабораторияһы".

# ӘБЙӘЛИЛДӘР

**Урындағы инициативаларҙы бюджетлау проектында Әбйәлил районы мәктәптәре йыл да ҡатнаша. Шундай әүҙем белем усаҡтарының береһе - Сиҙәм ауыл мәктәбе. Былтыр уҡыусыларҙың интерактив технология комплексы булдырыуға бағышланған башланғысы хуплау табып, бойомға ашырылғайны. Быйыл балалар өр-яңы идеялар менән яна.**

"Мәктәбебеҙҙә компьютерҙар аҙ, уларының да иҫке булыуы тейешле кимәлдә белем алыуға ҡамасаулай. Шуға ла беҙ ошо проблеманы хәл итеүҙе үҙебеҙгә маҡсат итеп ҡуйҙыҡ, - ти Сиҙәм мәктәбе уҡыусыһы Гөлфиә Ғәлиәкбәрова. - Ул тормошҡа ашһын өсөн капитаныбыҙ Динә Хәмзина етәкселегендәге команда менән бар көсөбөҙҙө һалабыҙ. Тимур Мөстәкимов презентация иң яҡшыһы булһын өсөн тырыша, Динислам Яуынбаев менән Эмиль Бейешев коммерция тәҡдимдәрен эҙләй, проекттың финанс яғын теүәлләй. Әлиә Хафизова бөтә кәрәкле документтарҙы төҙөй, Нәркәс Ишаева проекттың эшләнеү барышын күрһәткән дәлилдәр - гәзиттәге һәм социаль селтәрҙәге мәғлүмәтте бер ергә туплап йыя, ә мин иһә беҙҙең эште матбуғатта яҡтыртам. Ошолай тырышып, тиҙ арала барыһын да тамамлап, конкурсҡа тапшырырға иҫәп. Беҙҙең проект өсөн тауыш биргән барлыҡ уҡыусыларҙың ышанысын аҡларға тырышырбыҙ. Проектыбыҙ иң яҡшылар иҫәбендә булыр тип ышанабыҙ".

*БАҠСА*

# ҠЫШЫН ДА ХӘСТӘРЛӘ

**Ҡыштар ҡыҙыҡ хәҙер, бер нык һыуытып, бер йылытып торған мәлдәр йыш була. Баҡсасыларға был осраҡта нимә эшләргә?**



♦ Бөгөн һәр кеше лә бер нисә көнгә һауа торошон алдан белеү мөмкинлегенә эйә: интернеттағы асыҡ мәғлүмәт баҡсасыларға ярҙам итә ала. Белгестәр әйтеүенсә, әгәр ҙә һыуыҡтарҙан һуң бер аҙға йылытып, иретеп тора икән, быдың артыҡ ҡурҡынысы юҡ. Бары тик баҡсаға сығып ҡарап, ҡар йоҡа ятҡан урындарға ҡар өҫтәп сығырға кәрәк. Иң тәүҙә емеш ҡыуаҡтары һәм ағастарына иғтибар итергә. Шулай уҡ сәскәләр ҡышлаған ерҙә ҡар ҡатламы булһын, ҡышҡа сәсеп ҡалдырылған түтәлдәр ҙә ҡар менән ябылһын.

♦ Әгәр ҙә ямғыр, боҙло ямғыр яуыуы көтөлә икән, ағастарҙың олондарын ниндәйҙер ҡулайламалар ҡуйып терәтегеҙ. Ямғырҙан һуң ботаҡтар боҙ менән ҡапланасаҡ, был саҡта инде ул ағасҡа зыян килтермәй генә үҙенән-үҙе иреп бөтәсәк.

♦ Йылытып, иретеп торған һауа торошо оҙаҡҡараҡ һуҙылһа, ҡар ҡатламын көн һайын тикшерәбеҙ - ул 0,3-0,5 м тирәһенән кәмеп китмәһен. Ҡар иреп, һыу йыйылып, ағас-ҡыуаҡтарҙың тамырына төшмәһен, быныһына ла иғтибар итегеҙ. Төндә барыбер һыуыта, ә был дым тамырҙарға төшөп, уларҙы туңдырыуы ихтимал.

Ниндәйҙер ҡыуаҡтарҙы ҡышҡылыҡҡа япҡанһығыҙ икән, уларҙы елләтегеҙ. Юғиһә, конденсат ултырыуы бар. Был япма материалдар гел ҡоро булырға тейеш, һыуланһа, киптерегеҙ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Йылан һәм табиптар

Баш ватыр өсөн бына тағы бер һорау: ни өсөн медицина символы булып кадуцей - ике йылан үрелгән ҡанатлы таяҡ һанала? Минеңсә, табиптарҙың күптәре был символдың мәғәнәһен аңларға ла тырышмайҙыр кеүек, сөнки улар быны аңлаһа, фармацевтика индустрияһының көнө бөтә. Ә һеҙ был хаҡта уйлап ҡарғанығыҙ бармы?

Ярҙам итәм: сексуаль трансмутацияны ҡулланығыҙ. Күҙҙәрегеҙ ҡабат осҡонланып киттеме? Был һүҙҙе икенсе тапҡыр ҡулланам, әммә уны мин уйлап сығарманым. Уның авторы Наполеон Хилл 1908 - 1928 йылдарҙа иң уңышлы 500 эшҡыуар менән әңгәмәләшеп, донъяның иң төп серҙәренең береһе булып сексуаль трансмутация тора тигән һығымтаға килә. Бының менән бизнеста Дао ҡанундарын көсәйтеү тураһындағы бүлектә ентекләберәк танышырбыҙ, ә был көскә эйә булыу өсөн семинарҙарҙа ҡатнашырға кәрәк.

Күп халыҡтар өсөн йылан - сексуаль энергия символы булып тора. Мәҫәлән, ожмах баҡсаһындағы йыланды алығыҙ. Мексикала Чичен-Итҡа пирамидаларының ҡайһы бер ҡоролмаларын үҙенең ҡойроғон тешләгән ҙур йылан һүрәте уратып алған. Шундай уҡ символды Һиндостан ҡорамдарында, Ҡытай байрамдарында күрергә мөмкин. Был йыландың исеме - Уроборос, һәм ул сексуаль энергияның тән эсендәге әйләнешен кәүҙәләндерә.

Кадуцей, ысынлап та, ғәжәп йоғонтоло сара - ул умыртҡа бағанаһы буйлап күтәрелеп, йәнде ҡанатландырған сексуаль энергияны символлаштыра.

## Телевидение: эйеме, юҡмы?

Телевидение - ғәжәйеп техник ҡаҙаныш. Күңел асыуҙың шәп сараһы. Әммә уны аҙнаһына 35 сәғәт ҡараһаң, ул йәмғиәт ҡарғышына әйләнә. Төньяҡ Америка халҡы өсөн "тиле йәшник" алдында 35 сәғәт ултырыу - уртаса аҙналыҡ норма. Һеҙ үҙегеҙҙе уртаса кеше тип һанайһығыҙмы? Әгәр кендегегеҙ телевизорға идара итеү пультына йәбешкән икән, үҙегеҙҙә нисек итеп ҡыҙыҡһыныусанлыҡ уята һәм тормошоғоҙҙо мажаралар менән тултыра алаһығыҙ? Морфогенетик ҡырҙар һәм сексуаль трансмутация донъяһы "һабын ҡыуығы операларынан" юғарыраҡ урынлашҡан!

## Икенсе союздаш: еңел аҡыллылыҡ

Үҙегеҙҙең ҡыҙыҡһыныусанлығығыҙҙы уятҡас, парашютһыҙ "ышаныс һикереүе" яһарға ла оҙаҡ түгел. Әгәр хәүефһеҙлек - уңыштың ҡан дошманы булһа, яҡынлашып килгән хәүеф тойғоһо - уның иң шәп арҡаҙашы.

Моғайын, һеҙ тормошоғоҙҙағы иң мөһим мәлде яҙғанһығыҙҙыр һәм үҙегеҙҙе уларҙың ҡурҡмау һәм алабарманлыҡ һөҙөмтәһе булыуына ышандырғанһығыҙҙыр. Әгәр яҙмағанһығыҙ икән, быны тиҙ арала эшләп ҡуйығыҙ! Бер ыңғай ҡушылғанды үтәп бармайынса, яҙылғанды ғына уҡыу һөҙөмтә бирмәйәсәк. Файҙаны бары тик үҙ тәжрибәгеҙҙә генә күрәсәкһегеҙ. Интеллектуаль ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡына аҙ, Ерҙәге тормош практик тәжрибә талап итә.

**Пьер МОРАНСИ.**

✔ *Камиллаштырғандан һуң, ул 3 автомобиль эшләй. Бөгөнгө көндә был беренсе өлгөләрҙең икеһе эҙһеҙ юғалған тип иҫәпләнә, ә өсөнсөһө Мюнхендағы Германия музейында тора.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 29 ҒИНУАР - АВТОМОБИЛЬ УЙЛАП ТАБЫЛҒАН КӨН



**1886 йылдың 29 ғинуарында немец конструкторы Карл Бенц үҙе уйлап тапҡан тәүге автомобиленә патент ала һәм ошо көндән был транспорт төрөнөң тарихы башлана.**

Әлбиттә, уға тиклем дә кеше һәм хайуандарҙың көс түгеүен талап итмәгән үҙйөрөшлө механизмдар эшләүселәр була. Иң тәүгеләр араһында тарихсылар Леонардо да Винчи исемен атай, ул үҙйөрөшлө арба уйлап таба: тешле тәгәрмәс ярҙамында хәрәкәткә килгән. 1692 йылда Фердинанд Вербист пар ҡаҙаны ярҙамында эшләгән үҙйөрөшлө арбаның тәүге бәләкәс моделен эшләй. 1784 йылға Британия механигы Уильям Мэрдок парҙа эшләгән трактор уйлап таба. 1803 йылда Ричард Тревитик пар көймәһендә Лондон урамдары буйлап үтә. Электр тартыу көсөндә эшләгән тәүге бәләкәй моделде венгр Аньош Йедлик 1828 йылда эшләй. 1834 йылда американлы Томас Дэвенпорт электр ҡорамалы уйлап таба һәм поезға ҡуя, ул Американа беренсе булып электр машинаһы һәм моторына патент ала. Йылап электромобилдәр үҫешә. 19-сы быуат башында газ двигателдәрен һынауҙар башлана. 1870 йылда Зигфрид Маркус шыйыҡсалы эске яныулы двигателде ябай арбаға ҡуя, был уны бензинда эшләгән транспорт сараһын ҡулланыусы тәүге кеше итеп таныта. Бер аҙҙан Карл Бенц тәүге өс тәгәрмәсле автомобиль уйлап таба. Тәүге һынауҙар ваҡытында урамдан үткәндә ул ит һатыусының атын өркөтә, шуға камиллаштырғандан һуң, 3 автомобиль эшләй. Бөгөнгө көндә был беренсе өлгөләрҙең икеһе эҙһеҙ юғалған тип иҫәпләнә, ә өсөнсөһө Мюнхендағы Германия музейында тора. Артабан немец инженеры автомобилдәрен киң һатыуға әҙерләй һәм даими камиллаштырып тора.

Рәсәйҙә автомобиль 1891 йылда килеп сыҡҡан тип иҫәпләнә: Францианан алып киленгән "Панар-Левассор" була. Икенсе версия буйынса, мөғжизәле техниканы Рәсәй халҡы 1895 йылда ғына күрә һәм был Benz Velo булған, имеш.




1-се өс тәгәрмәсле автомобиль хужаһы

1904 йылда Петербургта тәүге ватан яңғын һүндереү автомобиле уйлап табыусы

Квадрацикл уйлап табыусы

Барон Чарльз Роллстың компаньоны

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**2-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Көй. Әхмәтов. Совет. Сабыу. Икмәк. Рамаҙан. Ғәлиева. Крузо. Мәҙинә. Сенат. Ата. Гәзит. Көрт. Лайыҡ. Ҡан. Ас. Афоризм. Ваҡыт. Ихсанов. Әй. Ваба.

**Вертикаль буйынса:** Ғайсин. Солтанова. Еретик. Әр. Фәриҙә. Урама. Ҡүмәс. Аҫтар. Итбаев. Владикавказ. СМС. Виват. Инк. Голов. Рәшә. Зәки. Кио. Тәкәт.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**2 февраль "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12+
**3 февраль "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш), музыкаль комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**31 ғинуар "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+
**2 февраль "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 11.00 6+
**4 февраль "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 февраль "Коза-дереза"** (В. Супонин). 12.00, 15.00 +
**4 февраль "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 ғинуар "Сказки о маме"** мультимедиялы концерт. 6+
**1 февраль "Дуҫлыҡ күпере"** Ишембай һәм Күгәрсен районы таланттары. 6+
**2 февраль "НОНИ. Rafstyle"** барабансылар. 6+
**3 февраль "Музыку слушаем вместе"** джаз. 11.00 0+
**"Музыкаль интерактив".** 13.00 0+
**4 февраль "Ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты".** Органда В. Мортазин. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**31 ғинуар "Алға, Баламишкин"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия. 12+
**1 февраль "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**3 февраль "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

Учалы районында гастролдә **"Его Величество Колобок второй"** (А. Кружнов), әкиәте 0+ һәм **"Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Гәйетбаев), комедияһы 16+ менән
**29 ғинуар -** Ҡунаҡбай,
**30 ғинуар -** Миндәк,
**31 ғинуар -** Уральск ауылдарында.
**"Их, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), лирик комедияһы менән Хәйбулла районы буйлап гастролдәрҙә:
**29 ғинуар -** Маҡан,
**30 ғинуар -** Быҙаулыҡ,
**31 ғинуар -** Бүребай;
**2 февраль -** Ивановка;
Баймаҡ районы буйлап:
**1 февраль -** Урғаҙа,
**3 февраль -** Төркмән ауылдарында. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2 февраль "Хушығыҙ, хыялдарым..."** (Ә. Атнабаев), драма. 12+
**3 февраль "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия. 18.00 16+

Беҙ өс төрлө холоҡҡа эйәбеҙ: беренсеhе - барыhы ла күргәне; икенсеhе - ысынлап та миндә булғаны; өсөнсөhө - минең уйҙағыhы.

(Альфонс Карр).



АФАРИН!

# МӘСКӘҮГӘ, ИЛГӘ...

## башҡорт халыҡ ижадын күрhәттеләр

(Дауамы. Башы 1-се hанда).

Күргәҙмәлә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме, ҡурай, Башҡортостан оҫталарының биҙәү-ҡулланма сәнғәте өлгөләре презентациялары үтте. Мәҫәлән, ете килограмға еткән көмөш биҙәүестәр менән биҙәлгән милли кейем ҡунаҡтарҙа ҙур ҡыҙыҡhыныу уятты. Ә реконструктор Гөлсөм Хөсәйенованың байрам һәм көндәлек кейемгә матур өҫтәмә буласаҡ стилләштерелгән бәләкәй селтәр эшләү серҙәренә өйрәткән оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашырға теләүселәрҙән хатта сират барлыҡҡа килде. Шулай уҡ күргәҙмә ҡунаҡтары башҡорт халҡының традицион биҙәүестәрен һәм ҡурсаҡ эшләү, шәл бәйләү, күнгә баҫып биҙәк һалыу, сигеү, тегеү, туҡыу һәм кейеҙ баҫыу буйынса уҙған оҫталыҡ дәрестәрендә бик ихлас ҡатнашты. Ә кемдер оҫталыҡ дәресендә ҡатнашып, ҡиммәтле бүләктәргә - ҡара буркаға, эксклюзив мамыҡ шәлгә һәм башҡа приздарға лайыҡ булды.

"Башҡортостандың сигелгән картаhы" Халыҡ ижады аҙналығының тағы бер үҙенсәлекле биҙәге булды. Уникаль ижади йолаларҙы, республика төбәктәренең тарихи үҙенсәлеген сағылдырған, символизм менән hуғарылған картаның hәр өлөшө төрлө район оҫталары тарафынан эшләнгән. Тыуған яҡтың матурлығы һәм тарихы менән илhамланған оҫталар ысын мәғәнәhендә күҙҙең яуын алырлыҡ Башҡортостан картаhы эшләгәндәр һәм, тәбиғи, ул күргәҙмә ҡунаҡтары араhында ла hоҡланыу уятты.

Шулай уҡ кейеҙҙән эшләнгән ҡурсаҡ, уйынсыҡ һәм паннолар ҙа Мәскәү халҡының һәм ҡала ҡунаҡтарының күңеленә хуш килде.




Этник стилдәге уникаль әйберҙәр күргәҙмәнең бер биҙәге булып торҙо.

Башҡортостан, Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәhе араhындағы мәҙәни диалог яңы үҫеш алды. Был көндәрҙә Башҡортостан һәм Ленинград өлкәhе стендтарында "Ленинград - Өфө: эвакуация, яҙмыш, хәтер" исемле төбәк-ара музей акцияhы уҙҙы. Унда ҡатнашыусылар Бөйөк Ватан hуғышы йылдарында Ленинградтан һәм өлкәнән Башҡортостан АССР-ына эвакуацияланған һәм hуғыштан hуң эвакуациянан ҡайтарылған яҡындары һәм таныштары тураhында мәғлүмәт менән бүлеште. Был иҫтәлекле тарихтар публицистик материалдар һәм тематик күргәҙмәләрҙең нигеҙенә ятасаҡ һәм дәhшәтле hуғыш йылдары хәтирәләрен hаҡлап ҡалыуға һәм киләсәк быуындарға тапшырырға булышлыҡ итәсәк.

Һәр халыҡ йолалары менән көслө. Уларҙы белеү, hаҡлау һәм киләhе быуындарға тапшырыу - изге бурыс. Уҙған аҙнала Башҡортостан стендына килгән ҡунаҡтар башҡорт ғаилә традициялары һәм йолалары тураhында тәрәнерәк белде. "Рәсәй" күргәҙмәhе сиктәрендә уҙғарылған "Туғандар-Яратҡандар" Бөтә Рәсәй форумында ҡомартҡылар менән hандыҡ тапшырыу йолаhы күрhәтелде. Һандыҡ Башҡортостан исеменән сығыш яhаған Өфө районында йәшәүсе Мәхмүтовтар ғаиләhенә тапшырылды. Һандыҡ эсендә ҡулдан эшләнгән һәм быуындан-быуынға тапшырылып килгән әйберҙәр hалынған. Мәхмүтовтарға шәжәрә китабы, ә ғаилә башлығы Илнур Зөфәр улына элек яҙыу булмаған ваҡытта килешеү документы ролен уйнаған таҫтамал тапшырылды. Хужабикәгә тыуған яҡ йылыhын hаҡлаусы башҡорт шәле, балаларға янсыҡ бүләк ителде. Ә иң бәләкәй ғаилә ағзаhы Асель hандыҡҡа хужа булды. Һандыҡ тапшырыу йолаhы ғаилә йылыhын, быуындар күсәгилешлеген, халыҡ йолалары һәм традициялары мәртәбәhен көүҙәләндереүсе матур символ булды.

"Башҡортостандың тере традициялары" аҙналығында республика стенды янынан тылсымлы ҡурай моңдары, башҡорт йырҙары өҙөлмәне, дәртле бейеүҙәр hәр кемдең күңелен елкендерҙе. "Халыҡ ижады аҙналығы - тотош илгә төбәктең башҡорт халҡының тарихына һәм мәҙәниәтенә, эш hөйөүсәнлегенә, изге ғаилә йолаларына һәм ҡунаҡсыллыҡҡа нигеҙләнгән уңыштарын күрhәтеү өсөн тағы ла бер яҡшы мөмкинлек ул. Үткәндәрhеҙ киләсәк юҡ, беҙҙең стенд-космолет быны бик яҡшы күрhәтә: интерактив технологиялар бында тарих, халыҡ аҡылы һәм халыҡ ижады менән күрше, нигеҙҙәрҙең нигеҙе һәм киләсәк ҡаҙаныштары араhында үҙенсәлекле күпер булып тора", - тип билдәләне республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Илдәге үҙгәрештәрҙе, төрлө өлкәләге ҡаҙаныштарын һәм төбәктәр колоритын күрhәтеүгә йүнәлтелгән күргәҙмәнең масштабы һәм әhәмиәте ғәйәт ҙур. Башҡортостан иhә күргәҙмә-форумда иң сағыу, мәғлүмәтле стенд тәҡдим итеүсе төбәктәрҙең береhе. Рәсәй менән бергә алға осоусы космолет артабан да күргәҙмә ҡунаҡтарына төбәк менән таныштырған мауыҡтырғыс һәм күләмле программалар тәҡдим итәсәк.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ТЕЛhӨЙӘР

# МӘРЕ ҠАРҘАН...

**Телдә, моғайын, тәбиғәт донъяhына бәйле hүҙҙәр күпселекте тәшкил итәлер. Халыҡ бер үк хәл-күренеште лә төрлөсә төшөндөрөр маhирлыҡҡа эйә. Бына тағын шундай миҫалдарға иғтибар итәйек.**

**Мәре, мәреү.** Мәғәнәhе - епшек. Йомшарыу. Ҡар мәрей башлаған. Мәре ҡарҙан атлауы ҡыйын.

**Мәреү.** "Мәреү" hүҙенең йәнә бер мәғәнәhе - оҫол. Техникаға саҡ тотоноусының мәреүе самалы инде.

**Мәретке.** Аяҡ аҫты епшек булған. Юл бик мәретке. Мәретке туңа башлаған.

**Мәрүәт.** 1. Диңгеҙ ҡабырсағының эсендә була торған аҡ, hарғылт, алhыу төҫтәге йоп-йоморо аҫыл таш; ынйы. Мәрүәт муйынса. Диңгеҙ төбөнән мәрүәт эҙләүселәр.

2. Ҡайhы бер әкәм-төкәм ҡабырсаҡтарының ялтыраууыҡлы эске яҡ ҡатламы (төрлө биҙәү әйбере, hиҙәп h.б. эhау өсөн ҡулланыла); перламутр. Ҡумтаға мәрүәт биҙәк hалынған. Мәрүәттән эhалған алҡа.

**Мәүлен.** Яҙҙың күк үлән сыҡҡан миҙгеле шулай атала. Тәүге сәскәләр мәүлендә ҡалҡа. Мәүлендә мал да ҡырға сыға.

**Шулай итеп, телмәребеҙҙә мәрүәттәй hүҙҙәр артhын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
(Дауамы. Башы 45-се hанда).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең hүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, hығымталар яhа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ БАЛАhЫН...

## бүреккә hалhаң да иш булмаҫ

Һөймәгәнгә hөйкәлмә: ҡулы менән төрткөләр; hөймәгәнгә hөйкәлмә: теле менән сәнскеләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Барыhын да бер юлы бәхетле итә торған закон юҡ.

**(Леви).**

Миндә тағы бер кеше йәшеренгән: ул миңә йыш ҡына асыулана.

**(Томас Браун).**

Сәләмәт булырға теләгән кеше ысынлап та сәләмәтләнә.

**(Джованни Боккаччо).**

Нәфсеңде ауыҙлыҡлай алмаhаң, иң оло хәсрәттәргә тарырhың.

**(Вольтер).**

Беҙ өс төрлө холоҡҡа эйәбеҙ: беренсеhе - барыhы ла күргәне; икенсеhе - ысынлап та миндә булғаны; өсөнсөhө - минең уйҙағыhы.

**(Альфонс Карр).**

Бысраҡ hауытҡа нимә генә hалhаң да әсей.

**(Квин Флакк).**

Иҫәр менән бергә көлгәнсе, аҡыллы менән бергә иларға кәрәк.

**(Испан мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Киләсәктә hин ни генә эшләhәң дә, ул үткәндәгеләрҙе дауам итеү буласаҡ. Һин уларға ниндәйҙер үҙгәреш индерергә маташырға мөмкинhең, әммә эшләнгәндәрҙең төп йөкмәткеhе үҙгәрешhеҙ ҡаласаҡ...**

**Үлем түшәгендә ятҡан Хужа Насретдиндан:**

**- Әгәр ҙә hиңә өр-яңынан ғүмер бирhәләр, уны нисек итеп йәшәп үткәрер инең? Ниҙеләр үҙгәртергә теләр инеңме?- тип hорағандар.**

**Насретдин, уйланып, күҙҙәрен йомған, шунан күҙҙәрен асҡан һәм әйткән:**

**- Эйе, әгәр миңә яңы ғүмер бирhәләр, мин сәстәремде тураға ярып йөрөтөр инем. Мин гел генә ошолай эшләргә теләнем, әммә быны миңә атайым рөхсәт итмәне. Атайым донъя ҡуйғас, мин сәстәремде тураға ярып йөрөтөргә маташтым, әммә уларҙы элекке хәленән үҙгәртеп булманы...**

**Көлмәгеҙ! Һеҙҙән дә, яңы ғүмерегеҙҙә ни эшләр инегеҙ, тип hораhалар, Хужа Насретдин hымаҡ уҡ яуап бирәсәкhегеҙ: иремдең танауын бәләкәсәйтер, ҡатынымдың тән төҫөн үҙгәртер, йортомдо ҙурыраҡ итеп hалыр инем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаhы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты hаҡлау өлкәhен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаhы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24003

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаhы, Өфө ҡалаhы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияhында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаhы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 ғинуар 15 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111260

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.